ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Кискэ Өфө
11-17 март (буранай) 2017
№ 10 (740)
kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Кем - хоккей уйнай...**
кем - ни ашарын уйлай



3

**Милли мираҫыбыҙ...**
йәш быуынды тәрбиәләү сараһы



5-6

**Үҙебеҙ тураһында үҙебеҙ**



11

**Тула сәкмән, тула итек**
халҡыбыҙҙың кейгәне...



12

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 31 мартҡа тиклем 2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Кискэ Өфө"гә (индекс 50665) ваҡытынан алда арзанлыраҡ хаҡҡа яҙылыу бара, йәғни был осорҙа баҫмабыҙға яҙылыу 469 һум 92 тин, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, I һәм II төркөм инвалидтары өсөн 423 һум 96 тин тәшкил итә. Ә тәүге ярты йыллыҡта гәзитһеҙ ҡалғандар 17 мартҡа тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе апрелдән алдыра башлау мөмкинлегенә эйә (ес айға - 244 һум 70 тин).***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Еңел автомобилдәр үҙ хужаһы өсөн уңайлы булһа ла, әйләнә-тирәләгеләргә уңайһыҙлыҡ тыуҙырған осраҡтар ҙа етерлек бит. Үндайҙарҙы нисек аҡылға ултыртырға була?

***Динар ҒИЛМЕТДИНОВ, БР буйынса Эске эштәр министрлығының ЮХХДИ идаралығы начальнигы:*** Идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре көнө-төнө, теләһә ниндәй һауа торошона ҡарамаҫтан, юл-хәрәкәт хәүефһеҙлеге һағында тора, башҡаса мөмкин дә түгел, сөнки был йәһәттән күп нәмә беҙҙең эшкә лә бәйле икәнен яҡшы аңлайбыҙ. Юлдарҙағы фажиғәле, күңелһеҙ хәлдәрҙең эҙемтәләрен тикшереүгә ҡарағанда, уларҙы булдырмау, алдан иҫкәртеү сараларын күреү буйынса эште йәнләндерергә тырышабыҙ. Водителдәрҙең кемеһенәлер үҙ тәртибенең иң тәүҙә үҙе өсөн үк хәүефле булыуын аңлатырға, кемгәлер штраф һалырға, кемдәндер машина йөрөтөүгә хоҡуҡ документын тартып алырға тура килә. Тәүәккәллек - егетлектер ҙә, бәлки, тик быны руль артында уның һис кәрәге юҡ. Юл-хәрәкәт фажиғәләрен булдырмау өсөн, минеңсә, һәр кем үҙен ҡулда тоторға, уйлап, аҡыл менән эш итергә, башҡаларға ихтирамлы булырға тейеш - бына быныһы егетлек булыр ине. Юғиһә, ҡайһы бер водителдәрҙең сик-сама белмәүсе ҡылыҡтары, эскән килеш юлға сығыуы, тупаҫлығы юл-хәрәкәт хәлдәрен бик ҡатмарлаштыра. Үндайҙарға ҡарата, әйтеүемсә, анығ саралар күрелә, тик беҙҙең тырышлыҡ ҡына етмәй: йәмәғәтселек ярҙамы, аңлы, әүҙем граждандарыбыҙ ярҙамына ла мохтажбыҙ. Ҡағиҙә булараҡ, юл-транспорт фажиғәләре күпселек осраҡта ике яҡлы була. Тимәк, аварияла рулдәгеләр генә түгел, йәйәүлеләр ҙә ғәйепле. Әйтеүемсә, ял көндәре лә беҙ профилактик рейдтарға сығабыҙ. Мәҫәлән, шундай бер көндә генә лә йәйәүле граждандар тарафынан - 373, ә водителдәр яғынан 230 юл ҡағиҙәләрен тупаҫ боҙоу осрағы, эскән килеш рулгә ултырған 432 кеше теркәлде. Был февраль ахырында булһа, 4 мартта, мәҫәлән, ана шундай иҫкәртеү рейды ваҡытында 3 меңдән ашыу юл-хәрәкәт ҡағиҙәләрен боҙоу осрағы киҫәтелде. Тимәк, кемдәрҙеңдер ғүмерҙәре һаҡлап ҡалынды, тигән һүҙ. Ғибрәт өсөн бынан да алдағыраҡ тағы бер рейд мәғлүмәттәрен килтерәм: аҙнаның һуңғы бер көнөндә генә 4 125 юл-хәрәкәт ҡағиҙәләрен боҙоу осрағы асыҡланды. Шуларҙың 143-ө - тимер юл аша үтеү, 386-һы пассажирҙар ташыу (шуның 99-ы- балалар ташыуға ҡағыла), 381-е хәүефһеҙлек ҡайышын эләктермәү, 541-е машинаның дәүләт номерына бәйле ҡағиҙә боҙоуҙарҙы тәшкил итә. Шул уҡ көндө эскән килеш машина йөрөтөүсе 107 кеше асыҡланды. Шуларҙың 7-һе ошо сәбәп менән икенсе тапҡыр килеп эләкте. Улар мотлаҡ енәйәт яуаплылығына тарттырыласаҡ. Беҙҙең хеҙмәт бына шундай законлы юлдар менән "аҡылға ултыртырға" тырыша юл ҡағиҙәләрен боҙоусыларҙы. Тағы бер ҡабатлайым: машина йөрөтөүсе яҡындарығыҙ, туғандарығыҙҙың кәйефен йышыраҡ белешеп, уларға юлда һаҡ, иғтибарлы булырға саҡырып тороғоҙ. Иң мөһиме, гел иҫтәренә төшөрөгөҙ, бәлки, файҙаһы тейер...

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ЗАМАН БАШҠОРТО*

# ЙӘШТӘРҘЕ БӘПЛӘРГӘ ЯРАМАЙ,

## уларҙы алға ебәрергә лә, дөрөҫ йүнәлеш бирергә генә кәрәк



### ЗИННУР ЙӘРМӨХӘМӘТОВ:

*Йәштәргә тормош теҙгенен ышанып тапшырырғамы, юҡмы, тигән һорау бөтөнләй торорға тейеш түгел. Киреһенсә, уларға үҙ заманының хужаһы икәнен иртәрәк төшөндөрөргә һәм шул яуаплылыҡты елкәләренә һалырға кәрәк. Иртәрәк бешекһен, ираҡлашһын, сыныҡһын улар. Йәштәрҙең көслө һәм аңлы икәнен күреп торам, барыһы ла күҙ алдында. Ҡурсаларға, бәпләргә кәрәкмәй уларҙы, киреһенсә, алға ебәрергә лә, арттан ҡарап, өйрәтеп, дөрөҫ йүнәлеш биреп кенә барырға кәрәк. Ошо быуын ҡулында үҫкән быуын тағы ла шәберәк булыр һәм шулай итеп милләт үҙ сәләмәтлегенә ҡайтыр, тип ышанам.*

(Әңгәмәне 8-9-сы биттәрҙә уҡығыҙ).

12+

***✓ Бына ошондай аныҡ саралар ҡулланыу менән генә кешене тәртипкә ултыртырға мөмкиндер, сөнки әҙәп, оят тигән нәмәне белмәгәндәрҙе аҡсалата яза сараһы бик тиҙ айнытасаҡ, тигән уйҙамын.***



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАШҠОРТОСТАН КИЛӘСӘГЕН...

## "Сәңгелдәк"тә бәүетәйек!

***Гөлназ ҠОЛҺАРИНА, "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы директоры:*** Әлеге мәлдә бала күңелен ҡурсалайым тиһәң, заманса милли мөхит булдырыу мөһим. Уның булмышын сағыу, ҡыҙыҡлы, сикһеҙ башҡорт мөхитенә сорнар кәрәк. Тыуған телгә, тыуған йолаларға нигеҙләнгән тәрбиә - иң тәбиғи, бала күңеленә ауаздаш тәрбиә, тип ҡабатлауҙан туҡтамайым. "Тамыр"ҙың сирек быуат эшмәкәрлеге - быға ныҡлы дәлил. Мәрйәм апай Бураҡаеваның тыуған телде күңел теле тип атауы хаҡ икәнен дә ваҡыт раҫланы. Беҙ телевизорҙан балаға уның күңел телендә өндәшәбеҙ. Каналдың биҙәлеше, декорациялар ҙа милли семәрҙәр менән һырланған. Музыканы, деталдәрҙе уйлап, һаҡ ҡулланырға тырыша режиссерҙарыбыҙ. Әммә телевидение, бигерәк тә балалар телевидениеһы - бик сығымлы өлкә. "Тамыр" айырым канал булып асылған йылда маҡсатлы финанслау ярҙамында эфир серверы, видеокамера, ҡорау аппараты, иң мөһиме, тиҫтәнән ашыу сағыу, заманса тапшырыу аса алдыҡ. Балалар телевидениеһы өсөн был иҫ киткес үҫеш булды. Рәсәй, халыҡ-ара фестивалдәрҙә башҡа телекомпаниялар шаҡ ҡатты. Һеҙҙең тапшырыуҙан күҙ ҡамаша, шул тиклем матур, халыҡсан тип һоҡланыуҙарын йәшермәнеләр. Ул осор үҫеш осоро булһа, әле бирешмәү осорон кисерәбеҙ. Хатта үҫмерҙәр өсөн башлаған сериалға ла "Бирешмә!" тип исем бирҙек. Тик оҙаҡҡа һуҙылып китте был осон-осҡа ялғап, юҡты бар итеп, милли балалар телевидениеһын йәшәтеү, үҫтерергә тырышыу осоро. Көрсөккә һылтанып ҡына, яңы проекттар асмай, булғанына шөкөр, тип ултыра алмайбыҙ, улай ярамай ҙа. Бала саҡ - бер мәл генә, кеше ғүмеренең иң әһәмиәтле осоро. Ошо бер нисә йылды ҡулдан ысҡындырһаҡ, аҙаҡ терһәкте тешләрҙәй булырбыҙ. Шуға, нисек кенә ауыр булмаһын, "тамырҙар" бер нисә теле-радио тапшырыуҙар эшләп кенә тынысланып йөрөй алмай, намыҫ ҡушмай. Фильм-әкиәттәр, ҙур байрамдар, концерттар, ярыштар, уйындар, видеоальбомдар, интернет селтәрендә эшләү, йыр студияһы асып, йыр аша тыуған телде еткереү һ.б. балаларҙың иғтибарын, күңелен яуларлыҡ әллә күпме эштәр башҡарабыҙ. Тырышып-тырмашып, балаға тыуған мөхит булдырыуға үҙ өлөшөбөҙҙө индерәбеҙ. "Тамыр"ҙың тәүге тапшырыуы "Сәңгелдәк" әле лә кис һайын эфирға сыға. Тимәк, беҙҙең тапшырыуҙарҙы ҡараусы иң мөһим тамашасыларыбыҙға был кәрәкле, уларға башҡортса әкиәттәр ҡарауы оҡшай, башҡорт батырҙарын улар ярата. Ата-әсәләр, милләттәштәр ошо турала бер ваҡытта ла иҫенән сығармаһын, балаларын тыуған телендә, күңеленә яҡын тапшырыуҙар ҡарауҙан айырмаһын. Башҡортостан киләсәген сәңгелдәктә бергәләп бәүетәйек!

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Еңел автомобилдәр үҙ хужаһы өсөн уңайлы булһа ла, әйләнә-тирәләгеләргә уңайһыҙлыҡ тыуҙырған осраҡтар ҙа етерлек бит. Ундайҙарҙы нисек аҡылға ултыртырға була?

**(Башы 1-се биттә).**



***Мәхмүт ИБРАҺИМОВ, йәйәүле:*** Шаяртыу ҡатыш әйткәндә, ысын мәғәнәһендә "йәйәүле Мәхмүт" булам инде. Машинам юҡтан түгел, бар, ләкин улыма бирҙем. Принципҡа барып, тип әйтәйемме - рулгә ҡабат ултырмаҫҡа булдым. Урамдағы ҡайнап торған хәрәкәт, ығы-зығынан нервылар ҡаҡшаны. Элек водителдәр нисек иғтибарлы, бер-береһенә кеселекле, ярҙамсыл ине! Ә хәҙер өҙгөсләп ташлауҙары ла ихтимал. Юл-хәрәкәт ҡағиҙәһен боҙған ҡайһы берәүҙәрҙе, ана шулай һеҙ әйткәнсә, аҡылға ултыртайым, тип зәғифләнеп ҡала яҙҙым. Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, тәртип боҙоусы "крутой"ҙарға берәй һүҙ әйтеп йә ҡаршылашып ҡара - ниңә тыуғаныңа үкенерһең. Телевидениенан, интернет яҙмаларынан аҙ күрһәтәләрме ни: пистолетын йә суҡмарын тотоп килеп сығалар ҙа һуғыша ла башлайҙар бит. Йә машинаны онтайҙар. Бар, эҙләп ҡара шунан ғәҙеллекте. Бөтәһен дә һатып алып өйрәнгәндәр, уларға закон юҡ. Закон фәҡәт ябай, тыңлаусан кешеләр үтәһен өсөн генә. Әйткәндәй, кисә генә подъезд алдында берәүҙе шулай аҡылға ултырталар ине әле. Ҡағиҙә боҙғанды түгел шул, ә шуларға ауыҙ асып һүҙ әйткән ЖЭУ эшсеһенә ташланды машинаның хужаһы бисәһе менән бергәләшеп. Мин тәҙрәнән ҡарап торам, тауыштары 7-се ҡатҡа ишетелә хатта. Коммуналь хужалыҡ эшсеһе, меҫкен, сүп-сар контейнерын сүп тейәгес махсус машина юлына сығара алмай аҙаплана ине. Әмәлгә ҡалғандай, юлды ҡаплап торған еңел машина хужалары килеп сыҡҡас, башланды ла инде ҙур ғауға. Бында, әлбиттә, коммуналь-хужалыҡ идаралығына төшә төп ғәйеп: ниңә улар эшселәренә тейешле шарттар тыуҙырмай? "Был урынға машина ҡуйырға ярамай" тигән берәй махсус билдә урынлаштырып ҡуйһалар, законға таянып яҡлар ине үҙен әлеге эшселәре лә. Бындай билдә мотлаҡ кәрәк подъезд алдарына, сөнки хәҙер подъезд ишеге янына "Тиҙ ярҙам" машинаһы ла, башҡа төр йөк машиналары ла яҡын килә алмай. Әгәр, ундай хәл була күрмәһен, янғын сыға ҡалһа, ошо юлды ҡаплап торған шәхси машиналар арҡаһында иҫәпле генә ҡиммәтле ваҡыт юғалтыласаҡ бит! Әйткәндәй, яңыраҡ "Тиҙ ярҙам" машинаһына юл бирмәгән оятһыҙ ҡатын арҡаһында кеше үлде бит хатта. Шунан һуң ҡыҙыулыҡ менәндер инде, юл бирмәгән машиналарҙы төкөтөп китергә кәрәк, тип шаулаштылар ҙа шымып ҡалдылар. Әлбиттә, был да ике яҡлы "таяҡ" буласаҡ бит: "Тиҙ ярҙам" машинаһының үҙе лә зыян күрәсәк, юғиһә. Шуға был шәп идеянан баш тартырға тура килде лә уларға. Белмәйем, бөгөн фәҡәт үҙен генә ҡайғыртып өйрәнгән оятһыҙ әҙәмдәрҙе барыбер аҡылға ултыртыу мөмкин түгелдер. Улар менән закон һаҡсылары, ЮХХДИ хеҙмәте эшләргә тейеш, тик уларҙың оло юлдарҙа аҡса ҡайырып тороуҙан башҡа хәсрәттәре юҡ.

***Хәлим ӘЙҮПОВ, эшҡыуар:*** Бөгөн кешелә шәхси транспорт саралары бик күбәйҙе, әйтергә лә түгел. Был, әлбиттә, машина эйәләренең үҙҙәре өсөн дә, башҡаларға ла ныҡ ҡына уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра. Үҙегеҙ күрәһегеҙ, ҡаланың торлаҡ йорттары ғына түгел, хатта ойошма, предприятиелар биналарының биләмәләрендә лә иркенлек тигән нәмә юҡ. Торлаҡ хәҙер, ғөмүмән, урын йәһәтенән санитар нормаларҙы боҙоп, бер-береһенә бик яҡын, тығыҙлап төҙөлә. Ҡайһы бер йорт алдарында машина ҡуйыу түгел, әсәләргә балаһы менән йөрөргә лә урын юҡ. Шул һүрәттә лә машинаһын юлға булһа ла ҡуйып китергә мәжбүр водитель. Әйткәндәй, тейешле урынға ҡуйылмаған машиналарҙы штраф туҡталҡаларына алып китеү тарифтары ошо йылдың 1 мартынан тағы ла арттырылды. Еңел машиналарҙы "ҡулға алған" өсөн хәҙер 2135 һум да 77 тинеңде сығарып һалырға кәрәк буласаҡ. Бәлки, ошо сара аҡылға ултыртыр ҡағиҙә боҙоусыларҙы? Машинаны туҡталҡала тотоу сәғәтенә 653 һум 56 тингә төшәсәк. Мотоцикл һәм мопед хужалары өсөн был шуға ярашлы 1067 һум да 88 тин, ә сәғәтенә - 27 һум 78 тин. Ауырлығы 3,5 тоннаға тиклемге В һәм Д категория автомобилдәре өсөн - 4271 һум 54 тин һәм сәғәтенә 107 һум, ә шунан да ауырыраҡ Д,С һәм Ғ категориялар өсөн 8543 һум һәм сәғәтенә 214 һум түләтеләсәк. Бына ошондай аныҡ саралар ҡулланыу менән генә кешене тәртипкә ултыртырға мөмкиндер, сөнки әҙәп, оят тигән нәмәне белмәгәндәрҙе аҡсалата яза сараһы бик тиҙ айнытасаҡ, тигән уйҙамын. Яңыраҡ Мәскәүҙә юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге мәсьәләләре буйынса Дәүләт Советы ултырышы булып үткәйне. Ил Президенты В.Путин шунда законды һанлауҫы тәртип булдырыу мәсьәләһен күтәрҙе. Юл-хәрәкәт осраҡтарында йышыраҡ водителдәр ғәйепле, тине шулай ҙа Президент. "Тап агрессия һәм юл хәрәкәтенең башҡа ҡатнашсыларына ихтирамдың булмауы ауыр аварияларға килтерә лә инде,"-тип белдерҙе ул. Бик дөрөҫ!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓17 мартҡа тиклем Өфөләге "ВДНХ-Экспо" майҙансығында Агросәнәғәт форумы һәм XXVII халыҡ-ара махсуслашҡан "Агрокомплекс-2017" күргәҙмәһе уҙа. Унда Нидерландтар, Германия, Франция, Польша, Италия, Англия, Бельгия, Ҡытай, Ҡаҙағстан, Украина, Белоруссия компаниялары ҡатнаша. Бынан тыш, Өфөгә Рәсәйҙең 33 төбәгенән компаниялар килгән.

✓Өфөлә "Дим-2" станцияһы эшселәре геморрагик биҙгәк вирусы менән зарарланған. 4-се йоғошло ауырыуҙар клиник дауаханаһында 41 кеше дауалана һәм тикшереү үтә. "Дим-2" станцияһы эшселәре һөйләүенсә, вагон депоһына эйәләшеүсе сысҡандарға химик эшкәртеү үткәрелмәгән. Улар ошо проблема хаҡында администрацияға уҙған йылдың көҙөндә үк еткергән булған. Әммә бер кем дә бер ниндәй ҙә сара күрмәгән.

✓Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында директор тәғәйенләнде. Ул - Иршат Фәйзуллин. Быға тиклем ул оҙаҡ йылдар театр директоры урынбаҫары булып эшләне. Художество етәксеһе - Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Олег Ханов ижади мәсьәләләр өсөн яуап биреүен дауам итә, тип хәбәр иттеләр театрҙың матбуғат хеҙмәтендә.

✓2017 йылда республика заманса ҡала мөхитен булдырыу буйынса милли проектты бойомға ашырыу сиктәрендә федераль бюджеттан 856 миллион һум аҡса аласаҡ. Аҡсаларҙың өстән ике өлөшө - ихаталарҙы төҙөкләндереүгә, ҡалғаны халыҡ күп йөрөгән урындарҙы тәртипкә килтереүгә йүнәлтелә.

✓Йыл башынан Өфөлә меңдән ашыу кеше мәшғүллек хеҙмәте ярҙамында эш тапҡан. Әле республиканың баш ҡалаһында 11,2 меңдән ашыу "рәсми" вакансия һәм алты меңгә яҡын эшһеҙ иҫәплә-нә. Өфөнөң мәшғүллек үҙәгендә бөтәһе 6,5 мең кеше иҫәптә тора. Теркәлгән эшһеҙлек кимәле 1 процентҡа тиң.

✓Өфөнөң Опека һәм попечителлек идаралығы "Әсәй, эсмә!" ҡала акцияһын үткәрә. Сара "Йортта бәхетте һаҡлағыҙ" социаль проектын тормошҡа ашырыу барышында сәләмәт йәшәү рәүешенә ынтылыш булдырыу, шулай уҡ ҡатын-ҡыҙҙар алкоголизмын иҫкәртеү маҡсатында ойошторола. 14 мартта сара - "Ғаилә" психологик-педагогик, медицина һәм социаль ярҙам үҙәгендә, 15 мартта "Саторис" үҙәгендә ойошторола.

***✓ Карта үҙ илебеҙҙә етештерелеүсе аҙыҡ-түлек өсөн ғәмәлдә. Уның менән ит, икмәк, картуф, йәшелсә-емеш, шәкәр, эсәр һыу, үсемлек майы, балыҡ һәм һөт алырға була. Алкоголь, тәмәке ул исемлеккә индерелмәй.***



ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# КЕМ - ХОККЕЙ УЙНАЙ...

## кем - ни ашарын уйлай

**Ил буйынса тағы ла иң кәрәкле көндәлек аҙыҡ-түлек төрҙәренә талон системаһы индереү тураһында һүҙ алып барыла. Беҙҙең аңыбыҙҙа был сара сараһыҙҙан бер әмәл булған ҡытлыҡ, көрсөк һәм хатта ҡыйралыш замандарын күҙ алдына баҫтыра. Һәм ул тап ана шундай батып барғанда йәбешерлек һалам ролен үтәне лә бит.**



Ҡыҙыҡ, быйыл Рәсәйҙә тәү тапҡыр карточка системаһын башлап ебәреүгә 100 йыл тула икән дә! Бер быуат эсендә күп нәмә үҙгәрҙе, әлбиттә, әммә социализм нығынып, уның ҡаҙаныштары юғары нөктәһенә еткәс, яңынан ҡыйралыш башланды. Әйткәндәй, күптәр күрә алмаған социализм йылдарында НЭП, Бөйөк Ватан һуғышы, СССР-ҙы тарҡатыу кеүек иң ауыр осорҙа ғына бындай сараны күрергә мәжбүр булдылар. Бөгөн иһә беҙгә ниндәй афәт янай? Әле генә Сочиҙа булып үткән Рәсәй инвестиция форумының төп пленар ултырышында ил Премьеры Дмитрий Медведев иҡтисадҡа күҙәтеү яһап, дейөм алғанда, Рәсәй күрсәткән сыҡты, ВВП түбән тәгәрәүҙән туктаны, тип белдерҙе бит. Хеҙмәт баҙары тотороҡло, эшһеҙлек юҡ, тиген һүҙҙәр ҙә күптәрҙе ғәжәпкә ҡалдырҙы. Әлбиттә, бизнес әһелдәре элитаһы уратыуында бөтәһе лә ал да гөл күренәләр, һүҙ ҙә юҡ. Халыҡ көнкүрешендәге ниндәйҙер ваҡ-төйәк тормош хәлдәренә башҡоллай инергә Премьерҙың теләге лә, ваҡыты ла юҡҡа оҡшаған, сөнки уның башҡа мөһимерәк эштәре бар, имеш. "Мин әле хоккей уйнарға өйрәнәм, ҡамасаулама", - тине ул форумда үҙенә бүләк ителгән нано-сәкәнде ҡәнәғәтләнеү менән ҡабул итеп...

Ә инде киң мәғлүмәт саралары, интернет мәғлүмәттәренә генә түгел, күптәребеҙҙең тормош хәленә лә күҙ һалһаң, бөтөнләй икенсе ҡәйеф хаким итеүе күренә. Үкенескә, был иллюзияға ҡоролған уйҙырма түгел инде, ә тормошобоҙ ысынбарлығы. Мәҡәләләргә ҡуйылған баштар ҙа хатта бөтәһен дә асыҡ һөйләп тора: "Тоталь фәҡирлек - төп ризаһыҙлыҡ", "Рәсәй һәр өсөнсө кешенең фәҡирлек сигенә сығыу хәүефе менән йәшәй", "Рәсәйҙә фәҡирҙәр һаны 20 миллиондан күпкә артығыраҡ" һәм башҡа ана шундай рухта...

Интернетта нимә генә юҡ, тиер, бәлки, балда-майҙа йөҙгән бәгзе берәү. Һуң, улайһа, әйҙәгеҙ, ошо мәсьәлә менән туранан-тура шөғөлләнгән белгес - олпат ғалимдың фекеренә мөрәжәғәт итәйек. Бына, мәҫәлән, Бөтә Рәсәй тормош кимәле үҙәгенең генераль директоры, иҡтисад фәндәре докторы, профессор Вячеслав Бобков нимә ти: "Рәсәйҙең 60 процент халҡы йәшәү минимумынан түбәнерәк кимәлем менән фәҡирлек сигендә һәм аҙ тәьмин ителгәндәр ҡатламы араһында көн күрә. Беҙҙең Үҙәк мәғлүмәттәре буйынса, 13,3 процент ғаиләнең килеме 10 мендән дә аҙыраҡ; 49,7 процентының - 10-30 мең, ә йән башына 110 мең һум килемгә эйә ғаиләләр ни бары 2 процент тәшкил итә". Ә бына чиновниктарҙың эш хаҡы күпме, тип уйлайһығыҙ? Илдәге уртаса эш хаҡынан уларҙыҡы өс тапҡырға (!) юғары. Әлеге Хөкүмәт аппараты хеҙмәткәрҙәренең уртаса айлыҡ эш хаҡы, Росстат мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 228 мең һум тәшкил итә. Быйылғы йыл - һайлау алды йылы. Тимәк, ярлы ҡатлам халыҡты алдаштырып, ниҙер өләшәсәктәр, бик булмаһа, халыҡ өсөн "прәник" булһа ла вәғәҙә итәсәктәр. Ә бына килеп тыуған социаль тигеҙһеҙлек буйынса хәлде тамырынан үҙгәртеү буйынса ниндәйҙер тәкдимдәр түгел, был тема, ғөмүмән, федераль кимәлдә ҡуҙғатылмай ҙа хатта..."

Ысынлап та, ана шул "прәник"тәрҙең береһелер ҙә, бәлки, әле ил буйынса булдырырға йыйынған карточка системаһы. Ярай, ни булһа ла хәйерлегә булһын, кем өсөндөр йәбешер "һалам" булһа ла файҙағалыр, тип юрарға кәрәктер. РФ Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы быйылғы йылдан тормош хәле айырыуса хөрт кешеләрҙе аҙыҡ-түлек карточкалары менән тәьмин итеүҙе индермәксе, тиген хәбәрҙәр баҫылып сыҡҡайны инде. Асыҡланыуынса, электрон карталар уртаса килеме йәшәү минимумынан түбән булған кешеләргә тәғәйенләнәсәк (был сумма һәр төбәк өсөн яҙып сығылған. Башҡортостанда ул эшкә һәләтле булғандар өсөн - 8 323 һум). Карта үҙ илебеҙҙә етештерелеүсе аҙыҡ-түлек өсөн ғәмәлдә. Уның менән ит, икмәк, картуф, йәшелсә-емеш, шәкәр, эсәр һыу, үсемлек майы, балыҡ һәм һөт алырға була. Алкоголь, тәмәке кеүек һаулыҡ өсөн зыянлы әйберҙәр ул исемлеккә индерелмәй. Ай һайын был картаға 1,4 мең һум күләмендә балл иҫәпләнәсәк. Аҙыҡ-түлекте ошо программала ҡатнашыусы бөтөн магазиндарҙан да алырға була, тиҙәр. Киләһе йылдан хатта ошо карта менән ашхана һәм кафела ла иҫәпләшергә мөмкин, тип тә вәғәҙәләйҙәр. Балдарҙы туплағаs, аҡсалата алырға ярамай, әгәр уны ваҡытында файҙаланмаһаң, юҡҡа сығасаҡ. Ә бына картаны тулыландырырға була икән. Ул ғына ла түгел, индерелгән сумманың 30-50 процентын бонус рәүешендә кире ҡайтарып алырға ла мөмкин, тип хәбәр итә сығанаҡтар. Тик бына ул картаға "лайыҡ" булыу өсөн ниндәйҙер кәртәләр ҙә ҡоролған, имеш. Мәҫәлән, уға мохтаж кеше үҙенең фәҡирлек сигендә йәшәүен һәм ошондай хәлгә үҙ ихтыярынан тыш төшөүен иҫбатларға тейеш буласаҡ. Быныһы ниндәй процедураларҙы үҙ эсенә алалыр - бер Хоҙай ғына белә...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!



# ӨҪТӘЛ ГӘЗИТЕМ УЛ МИНЕҢ

**Халыҡтың һынйылай рухи байлығын йыйып, бер епкә теҙеп, мәрйен итеп беҙгә еткереүсе был баҫма үҙ эсенә әллә күпме мәғлүмәт, белем, аң-зиһен, аҡыл, мәрхәмәтлек, хәҡиҡәт һәм өмөт һыйҙыра. Олоһонан кесеһенә тиклем һәр кем гәзиттә үҙенә кәрәклеһен табып уҡый ала.**

Сибай ҡалаһының 5-се урта мәктәбе коллективы менән "Киске Өфө"гә һәр йыл һайын яҙылабыҙ, яратып уҡыйбыҙ, кәрәкле материалдарҙы йыйып барабыҙ. Беҙҙең тәрбиә һәм уҡытыу системаһында ла ул - төп ҡулланмабыҙ. Сөнки уҡыусылар менән осрашыуҙарҙа, телмәр тотҡанда ундағы факттарҙы файҙаланабыҙ. Фәһемле, тәрбиә бирерлек мәҡәләләр бик күп баҫыла унда.

Коллегабыҙ, башланғыс синыфтар уҡытыусыһы Фирүзә Әбделфәйез ҡыҙы Хәсәнованың, мәҫәлән, "Киске Өфө" тиген һүҙҙе ишетеү менән күҙҙәре балҡып китә. Ул уны 2003 йылдан бирле алдыра, үҙе әйтмешләй, "тәүге хәрефенән башлап, һуңғы нөктәһенә тиклем" уҡый. Бер тапҡыр гәзит үткәргән бер конкурсҡа еңеп, бүләк алыуы тураһында кинәнеп һөйләп ала.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте, Башҡортостан мәҙәниәте уҡытыусыһы буларак, "Киске Өфө" гәзитен мин дә өҫтәлемдән төшөрмәйем. Республикабыҙҙағы яңылыҡтар, көнүҙәк мәсьәләләр, тыуған яҡ тарихы, күренекле шәхестәр тураһындағы мәҡәләләр - барыһы ла дәрестәрҙә, синыф сәғәттәрендә ҡулланыу таба. Гәзит битендәге һәр бер мәҡәлә берҙәмлек, бер-береңә ҡарата ихтирам һәм иғтибар, халҡың, телең, тыуған ереӊ өсөн янып-көйөү хисе менән һуғарылған. "Киске Өфө" беҙҙең иң тоғро, иң яҡын һәм ярҙамсыл аралашыу сараһы булып ҡала. Шуныһы ҡыуандыра: күңел талап иткән хазина - әсә телендәге баҫманың ҡәҙере лә, баҫе лә арта. Бөгөн ошо байлыҡты һаҡлау, юғалтмау - барыбыҙҙың да изге бурысы.

**Нурзилә ҺӨЙӘРҒОЛОВА, Сибай ҡалаһының 5-се урта мәктәбе уҡытыусыһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓РФ Хөкүмәте торлаҡ һатып алыу өсөн әсәлек капиталы аҡсаһын күсереү ваҡытын ярайһы уҡ ҡыҫҡартырға әрҙәм иткән ҡағиҙәләрҙе раҫланы. "Мин ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға әсәлек капиталы аҡсаһын йүнәлтеү ҡағиҙәһен килтергән ҡарарға ҡул ҡуйҙым. Бынан тыш, унда ата-әсәнең ғаризаһы буйынса ыңғай ҡарар ҡабул ителгәндән алып әсәлек капиталы аҡсаһын күсереү ваҡыты айҙан 10 көнгә хәтлем ҡыҫҡартыла", - тине Дмитрий Медведев.

✓Муниципалитеттың "Бәйләнештә"ге үҙ төркөмөндә уҙғарылған һорау алыуға ярашлы, ашығыс рәүештә ремонт талап ителгән урамдарҙың исемлеге билдәләнде. Ул - Жуков, Сипайлово, Новоженов, Өфө шоссеһы, Йәштәр бульвары, СССР-ҙың 50 йыллығы, Шафиев, Рязань, Комсомол, Юрий Гагарин, Максим Рыльский, Баязит Бикбай, Наталья Ковшова, Рәсәй урамдары, Төҙөлөш тыҡрығы һәм башҡалар.

✓Өфөлә 18 мартта автор йырын үҫтереүгә айырыуса өлөш индергән өсөн "Күңел ҡылдары" республика премияһын тапшырыу тантанаһы үтә. Сәхнәгә республикала һәм илебеҙҙә билдәле бард йырсылар, Өфө тамашасыһы һөйөүен яулап алған авторҙар һәм башҡарыусылар сығасаҡ. Сара Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 21 адресы буйынса Йәштәр һарайында (элекке "Юбилей" мәҙәниәт һарайында) киске 7-лә башлана.

✓Быйыл республика аграрийҙары 3,5 миллион тонна иген, 1,7 миллион тонна картуф һәм йәшелсә, 1,4 миллион тонна шәкәр сөгөлдөрө һәм 200 мең тонна самаһы көнбағыш йыйып алыуҙы күҙаллай. Республиканың ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов хәбәр итеүенсә, республика орлоҡтар менән тулыһынса тәьмин ителгән, быйылғы яҙғы баҫыу эштәренә сығымдар 7,9 миллиард һум тәшкил итәсәк, ул былтырғы кимәлдән биш процентҡа күберәк.

✓Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы медицина хеҙмәттәре сифаты менән идара итеү системаһын индерә. Рәсәйҙең "Һаулыҡ һаҡлауҙы үҫтереү" дәүләт программаһы алдағы йылдарҙа медицина ойошмаларының 95 процентында ошо системаны индереүҙе күҙ уңында тота. 2016 йылда илдең алты төбәге ошо йүнәлештәге пилот проекттарын бойомға ашырҙы.

**"Башинформ"дан.**

✔ *Был йәрҙамды тәүге балаһы тыуған бөтәһе лә түгел, ә сиратта торған, үтә ҡатмарлы торлаҡ проблемаһы булғандар ғына аласаҡ. Республикала ошондай ике мең самаһы ғаилә иҫәпләнек.*



ҠЫҪҠАСА

# СОҠОРҘАР ЯМАЛА

✔ Өфөлә Октябрь районы торлаҡ-коммуналь хужалығы хеҙмәте юлдарҙы йүнәтеү өсөн яңы агрегат - "Вулкан" термос-бункеры һатып алды. Ҡала хакимиәтендә аңлатыуҙарынса, мобиль техника бер "заправкалауҙа" 40 квадрат метр юл ямаһына асфальт түшәү мөмкинлеге бирә. Файҙаланыуҙа булған рециклерҙар бер асфальт ҡатышмаһы порцияһын файҙаланып, 10 квадрат метрҙан ашыу майҙандағы соҡорҙы ямай ала. "Термос-бункер менән ҡар әүҙем ирегән осорҙа ваҡ соҡорҙарҙы ямарға мөмкин. Ҡатышма температураһы 200 градус тәшкил итә. Шул рәүешле, ул асфальт емерелгән урында йыйылған бөтә һыуҙы парға әйләндерә", - тип һөйләне Октябрь районының төҙөкләндереү буйынса муниципаль бюджет учреждениеһы директоры Марс Лотфрахманов.

✔ Өфөлә халыҡтың интерактив картаға килгән ғаризалары буйынса соҡорҙарҙы ямау дауам итә. Ҡала хакимиәтендә хәбәр итеүҙәренсә, ял көндәрендә баш ҡаланың Киров районында Әй, 37 һәм Софья Перовская, 38 урамдарындағы участкаларҙа ремонт эштәре башҡарылған. Тиҙҙән Исмәғилев, Мөбәрәков, Амантай, Колгуев һәм башҡа урамдарҙағы юлды төҙөкләндереү ҡарала. Ленин районының Өмөт, Әхмәтов, Сәләм, Эшсе, Рига, Ауыл кисеүе урамдарында, 8 Март ҡасабаһына илткән юлда, Затон һәм Миловка сиселешендә һәм башҡаларҙа соҡор-сағырҙар тигеҙләнгән. Һауа торошонон үҙгәреүсәнлеге арҡаһында көн һайын тиерлек яңы соҡорҙар барлыҡҡа килә. Бөгөн юл хеҙмәттәре алдында юлдарҙың аварияһы участкаларында соҡорҙарҙы тигеҙләү бурысы тора. Был - юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү һәм юл ямаһының артабан емерелеүенә юл ҡуймау өсөн ваҡытлыса сара. Көндәр йылытҡас, соҡорҙар ямалған урындарҙа ҡайнар ҡойолған асфальт-бетон ҡатнашмалары менән өҫтәмә ремонт яһау ҡаралған.

✔ "Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан буйынса идараһы ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау мәсьәләләре буйынса "ҡыҙыу линия" үткәрә. 13-27 мартта иртәнге сәғәт 10-дан 4-кә тиклем туҡланыу продукттарының сифаты буйынса һорауҙар бирергә, республика ведомстволарына һәм уның территориаль бүлектәренә мөрәжәғәт итеү тәртибе хаҡында белергә мөмкин. "Ҡыҙыу линия" телефоны: 8-800-100-47-67. Бынан тыш, Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау өлкәһендә дәүләт мәғлүмәт ресурсы сайтында"Виртуаль ҡабул итеү" эшен дауам итә, унда һәр кем үҙенең ҡулланыусы хоҡуғына ҡағылышлы һорау бирә ала.Шулай уҡ йәмғәтселекте ҡабул итеү бүлмәһендә консультация алырға мөмкин. Адресы: Өфө, Р. Зорге урамы, 58, 106-сы бүлмә, көндәҙгә 1 тула 15 минуттан 4-кә тиклем.

✔ Ҡаланың 2017 йылға бюджеты буйынса асыҡ тыңлауҙарҙа "Трамплин" туҡталышы янындағы канат юлын ремонтлау мәсьәләһе күтәрелде. Депутаттар баҡсасылыҙарҙың башланғысын хуплаһы һәм ҡаҙнаға төҙөкләндереү өсөн 2 миллион һум аҡса һалды, тип хәбәр иттеләр ҡала Советының матбуғат хеҙмәтендә. "Канат юлы ҡала округының Транспорт инфраструктураһы менән идара итеү балансында тора. Беҙ уларҙан ремонт эштәрен башҡарыуҙың анығ ваҡытын һораныҡ. Рәсми яуап: канатты алмаштырыу һәм башҡа эштәр апрель айына билдәләнгән. Канат юлы навигация башланғас файҙаланыуға тапшырыла. Беҙҙең депутаттар корпусы ошо срокты үтәүҙе контролдә тотасаҡ", - тип аңлатма бирҙе Өфө ҡала Советы рәйесе Валерий Трофимов.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ҒАИЛӘ МИНИСТРЛЫҒЫ КӘРӘК



**Башҡортостанда Ғаилә министрлығын булдырыу мәсьәләһе тикшерелә. Ошо тәҡдим хаҡында республика Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктең әүҙем йәмәғәт эше менән шөғөлләнгән ҡатын-ҡыҙҙары менән осрашыу барышында белдерҙе.**

- Мин Ғаилә министрлығын йәки махсус дәүләт учреждениеһын булдырыу фекерен ситкә ҡаҡмайым, беҙгә уны тикшерергә, ошо темаға фекер алышырға кәрәк, - тине Рөстәм Хәмитов. - Ысынлап та, хәҙерге ваҡытта ғаиләләр, уларҙа килеп тыуған ҡатмарлыҡтар менән эшләй белмәйбеҙ. Бик йыш власҡа эйә булған структуралар был проблемаларҙан ситләшергә тырыша. Әммә был хаҡта уйланыу кәрәк. Нисек итеп власть структураларының, дәүләтебеҙҙең иғтибарын электән килгән иктисад темаһына түгел, ә йәмғиәтебеҙҙә барлыҡҡа килтергән ғаиләгә йүнәлтеү мөмкинлеген ҡарарға кәрәк.

Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов был осрашыуҙа шулай уҡ бала тыуғанда 300 мең һум күләмендәге социаль түләүгә ниндәй йәш ғаиләләрҙең иҫәп тота алыуын аңлатты.

- Льготалы торлаҡ алыуға сиратта торған йәш ғаиләләргә ярҙам итеү өсөн матди дәртләндереү сараһы хаҡында ҡарар ҡабул иттек. Сиратта торған бындай йәш ғаиләләр 300 мең һумға ҡәҙәр аҡса аласаҡ, тип уйлайым, - тип хәбәр итте төбәк етәксеһе. - Был ярҙамды тәүге балаһы тыуған бөтәһе лә түгел, ә сиратта торған, үтә ҡатмарлы торлаҡ проблемаһы булғандар ғына аласаҡ. Республикала ошондай ике мең самаһы ғаилә иҫәпләнек. Ике мең ғаиләгә балалары тыуғанда торлаҡ һатып алыуға йәки ҡатмарлы кредит килешеүҙәренең бурысын кәметеүгә ярҙам итә алһаҡ, бик яҡшы булаҫаҡ.

Республика Башлығы әлеге ярҙам сараһының Рәсәй Финанс министрлығында килешеү үтеүен билдәләне.

# СИФАТЫ - ТӨП ӨҪТӨНЛӨК



**Белорет, Әбйәлил, Бөрйән, Архангел һәм Башҡортостандың башҡа район умартасылары күпләп бал алыу һәм һатыуҙы ойоштороу өсөн "Башҡорт балы" коллектив бренды аҫтында берләшә ала. Бындай проект менән Белорет районы хакимиәте моноҡалаларҙы үҫтереү фондына мөрәжәғәт итте.**

"Тәү сиратта, иҡтисади ауырлыҡтар килеп тыуасаҡ - кем, ниндәй хаҡҡа был балды күпләп һатып аласаҡ. Икенсенән, сит ҡатышмалар һәм антибиотиктарға бал сифатын тикшереү өсөн Башҡортостанда күптән инде үҙ лабораторияһын һатып алыу мәсьәләһе тора. Сифат сертификатынан тыш донъя баҙарына сығып булмай тиерлек", - тип һөйләне Иглин районы умартасыһы, йәмәғәт эшмәкәре Илгиз Кәлимуллин.

Башҡорт балының экологик сифаты донъя баҙарында уның төп конкурент өҫтөнлөгө булып тора. Сөнки унда 30 процентҡа ҡәҙәр ялған бал һатыла, тип иҫәпләй республика умартасылыҡ продукцияларын етештереүселәр һәм эшкәртеүселәр ассоциацияһы вице-президенты Сергей Мәләков. Әммә шул уҡ ваҡытта умартасыларҙы бал ҡорттарын ҡарау буйынса заманса алымдарға, технологияларға уҡытыу программаһы насар үҫешкән. Балдың сифатын тикшереү мөмкинлеге бирәүсе ҡорамалдарҙы һатып алыу өсөн 15 миллион һумлап инвестиция талап ителә. Әүҙемселәр лабораторияны дәүләттеке булырға һәм уның менән бөтә ҡортсолар ҙа файҙалана алырға тейеш, тип иҫәпләй. Балды тыйылған матдәләргә тикшереү бөтә етештереүселәр өсөн дә мәжбүри булыу зарур.

# БАҠСАСЫЛЫҠ ОЙОШМАҺЫ



**Өфөлә ҡаланың берҙәм баҡсасылыҡ ойошмаһын булдырыу хаҡында тәҡдим ҡарала. Ҡала Советы рәйесе Валерий Трофимов хәбәр итеүенсә, май айында депутаттар корпусы баҡса ширҡәте мәсьәләләре буйынса киң ведомство-ара кәңәшмә уҙғарырға ниәтләнә.**

Депутаттарҙың фекере буйынса, был өлкәлә проблемалар етерлек йыйылды. Күп кенә баҡсасылар әле һаман үҙ участкаларын рәсмиләштерә алмай, сөнки улар һыу һаҡлау зонаһында урынлашҡан. Шул рәүешле рәсмиләштереү өсөн ҡаршылыҡтар күбәйһенсә ҡануниәттең һәм норматив акттарҙың ерелә еткереп эшләнмәүендә тора. Бер төркөм баҡса ширҡәтендә электр менән тәьмин итеү мәсьәләләре бар. Ҡайһы бер баҡсасылар үҙ идаралыҡ компанияларын төҙөргә теләй.

"Әлеге ваҡытта был өлкәлә берҙәмлек юҡ. Өфөлә Баҡсасылар ассоциацияһы, союзы эшләй. Тағы ла ваҡ ғаралыҡ берекмәләр бар. Ҡайһы берәүҙәре уларҙың әүҙем эшләй, икенселәре ҡағыҙҙа ғына. Һәр берәһе таркау эш итә. Был дөрөҫ түгел, - тип билдәләне Валерий Трофимов. - Аныҡ позициялары менән бер ойошма булырға тейеш, ул ҡаланың баҡсасылары исеменән дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдары менән диалог алып барасаҡ".

# ҠОШТАРҘЫ БАРЛАЙБЫҘ



**Башҡортостанда "Яҙғы барлау" телевизион конкурсы уҙғарыла.**

Уны Башҡортостан юлдаш телевидениеһы һәм Рәсәй Ҡоштарҙы һаҡлау союзы һәм Рус географик йәмғиәте ойоштора.

Ҡатнашыуҙың шарттарҙы шулай: мобиль телефонға күсмә ҡоштар төшөрөлә. Видео WhatsApp-тағы 8-937-300-2023 һандарына ебәрелә. Аңлатмала ҡанатлыларҙың иҫәбен һәм төшөргән урынды билдәләргә кәрәк. Видеояҙма эфирҙа күрһәтелә, tv-rb.ru сайтында һәм социаль селтәрҙәрҙә "Башҡортостан юлдаш телевидениеһы"ның рәсми сәхифәләрендә урынлаштырыла. Үҙенсәлекле материал авторын бүләк көтә. Башҡортостан юлдаш телевидениеһында хәбәр итеүҙәренсә, акцияла тәүгеләрҙән булып Өфөнән Эльза Ғәббәсова ҡатнашты. Ул Дан булвары янында донъялағы иң ҡыйғыр ҡоштарҙың берөһен - сапсанды фотоға төшөргән. Сапсан сәғәтенә 322 саҡрымдан, йәки секундына 90 метрҙан ашыу тиҙлектә оса ала, тиҙәр белгестәр.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Башҡортостандың йәш, инициативалы кешеләрен Волга буйы федераль округындағы "iВолга-2017" йәштәр форумында ҡатнашырға саҡыралар. V юбилей форумы 14-24 июндә Һамар өлкәһенең Мастрюков күлдәрендә уҙғарыла. Ҡатнашыусыларҙы теркәү проекттың рәсми сайтында 15 майға тиклем бара.

✔Башҡортостанда 9 марттан 16-һына тиклем Сәләмәт ғәҙәттәр аҙналығы уҙа. Ул белем биреү акцияларынан тора, уларҙың маҡсаты - балаларҙа һәм өлкәндәрҙә бөйөр ауырыуҙарын иҫкәртеү, сәләмәт йәшәү рәүешен булдырыу. 11 мартта Өфөләге "Мега" сауҙа-күңел асыу комплексында "Бөтә кешеләргә сәләмәт бөйөрҙәр" акцияһы уҙа. 12 мартта "Президент Отель" ҡунаҡхана комплексында Бөтә донъя бөйөр көнөнә арналған конференция уҙа, ул сәғәт 12-лә башлана.

✔Яҙ башынан Башҡортостанда йәнә бензин ҡиммәтләнде. Бөтә республика буйынса "Башнефть" ягыулыҡ ҡойоу станцияларында хаҡтар 4 мартта артты. АИ-92 бензинының бер литры хәҙер 35 һум 40 тин тора. АИ-92 ATUM маркаһына хаҡ шулай уҡ үҫеп, 36 һумға етте. АМ-95 һәм АИ-95 ATIUM бензиндарына ла хаҡтарҙың артыуы ҡағылды: 38 һум һәм 38 һум 50 тин. АИ-80 маркаһы ла литры өсөн 30 тингә ҡиммәтләнде - 33 һум 90 тин.

✔Башҡортостанда традицион уҡ атыу буйынса бәйге уҙасаҡ. 18 мартта иң етеҙ һәм мәргәндәр Учалы районының Уральск ҡасабаһында йыйыла. Был ярыш XVIII быуатҡы билдәле башҡорт сәсәне һәм батыры Ҡарас сәсәнгә арнала. Ғаризалар 15 мартҡа ҡәҙәр kult-uch@mail.ru электрон адресына ҡабул ителә, белешмәләр өсөн телефондар: 8347 (6-21-56, 6-15-44).

✔"Янғантау" шифаханаһының хужалыҡ мәсьәләләре буйынса директор урынбаҫары Марс Кашапов контракт буйынса Башҡортостандың Салауат районы хакимиәте башлығы вазифаһына тәғәйенләнде. Ҡарар хакимиәт башлығы вазифаһына конкурс һөҙөмтәләре буйынса район Советы тарафынан ҡабул ителде.

✔Башҡортостан Хөкүмәте 2017 йылға балалар баҡсаһы өсөн түләүҙең яңы максималь күләмен раҫланы. Һәр ҡала һәм районда түләү күләме төрлөсә һәм айына 1070 һумдан 2646 һумға тиклем тирбәлә. Йылайыр районында максималь түләү - 1070, Өфөлә 2646 һум тәшкил итәсәк. Артабан Өфө районы килә - 2448 һум, Стәрлетамаҡ - 2376, Салауат - 2205, Иглин районы - 2102, Октябрьский ҡалаһы - 2100 һум.

✓ *Башҡорт өндәренең, моңоноң кеше психологияһына тәьҫире ҙур һәм уның шәхес булып формалашыуында ла ҙур роль уйнай. Быны БДУ-ның доценты Зифа Ишембәтова ла үҙенең сығышында һыҙыҡ өҫтөнә алды.*



ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарары менән быйылдан башлап 1 март - Башҡорт ғаиләһе көнө тип билдәләнәсәк. Сөнки тап ғаиләлә киләсәк тәрбиәләнә, тап башҡорт ғаиләһе тарихты, телде, милләтте һаҡлап ҡалыу сәңгелдәге ул. Икенсе яҡтан, республикаға исем биргән аҫаба халыҡ, ерле халыҡ, тарихлы халыҡ булараҡ та башҡорттар башҡаларға өлгө булып торорға тейеш. Шулай тип уйланылды һәм яҙҙың беренсе көнөндә республиканың төрлө төбәктәренән йыйылған өлгөлө ғаиләләр баш ҡаланың төп сәхнәһенә - "Башҡортостан" дәүләт концерт залына йыйылды. Ә был тантананан алда Башҡорт дәүләт университетында республиканың район-ҡалаларынан, күрше өлкәләрҙән килгән ҡоролтай активистарының "Йәш быуындың милли үҙаңын тәрбиәләүҙә халыҡ педагогикаһының, ғөрөф-ғәҙәттәренең, традицияларының, диндең, мәҙәниәттең һәм әҙәбиәттең роле" тигән темаға түңәрәк ҡорҙа фекер алышыуы ла матур бер күренешкә нигеҙ һалды, тиергә мөмкин.**

# МИЛЛИ МИРАҪЫБЫҘ...

## йәш быуынды тәрбиәләү сараһы



Темаға инеп китеүҙән алда, нимә һуң ул халыҡ педагогикаһы, этнопедагогика тигән һорауға яуап биреү кәрәктер, моғайын. Халыҡ педагогикаһы - ул халҡыбыҙҙың быуындан-быуынға күсеп килгән тәрбиә традициялары, әхлаҡ нормалары. Ә этнопедагогика - ошо тәрбиә алымдарын өйрәнгән фән. Ләкин был термин ҡулланылышҡа үҙгәртеп ҡороу йылдары башланғас ҡына килеп инде, әммә был хаҡта бөтөнләй билдәле түгел ине тип тә әйтеп булмай. Был йүнәлештә исемдәре билдәле барлыҡ педагогтар ҙа ҡуллана: Ян Амонс Каменский, К. Ушинский, А. Макаренко, В. Сухомлинский. Улар барыһы ла, иң бөйөк педагог - халыҡ, тип иҫәпләй. Ысынлап та, халыҡ быуаттар буйына тупланған ғилем - ул бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлыҡ. Әммә уны көндәлек тормошта, тәрбиә эшендә ҡуллана беләбеҙме һуң? Башҡорт халҡының донъя халыҡтарына йәшәйеш программаһы булған "Урал батыр" эпосынан алып, бөгөнгә тиклем һаҡланып, тупланған ауыҙ-тел ижады ынйыларының (мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар, әкиәттәр, легендалар, эпостар, ҡобайырҙар, оҙон көйлә халыҡ йырҙары) төбөнә төшкәндә, асылын аңлағанда, улар бит үрҙә атап үтелгән педагогтарҙың хеҙмәттәренән дә баһалыраҡтыр, моғайын. Юҡҡа ғына яҙыусы, Салауат Юлаев ордены кавалеры, "Тормош һабаҡтары" дәреслектәре авторы Мәрйәм Бураҡаева был хаҡта даими ҡабатламай. Уның раҫлауынса, башҡорт өндәренең, моңоноң кеше психологияһына тәьҫире ҙур һәм уның шәхес булып формалашыуында ла ҙур роль уйнай. Быны БДУ-ның педагогика кафедраһы доценты Зифа Ишембәтова ла үҙенең сығышында һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Түңәрәк ҡор башҡа күнегелгән сараларҙан ойоштороло йәһәтенән дә айырылып торҙо. Ҡоролтай Башҡарма комитеты аппаратында мәғариф мәсьәләләре буйынса белгес-хеҙмәткәр булып эшләүсе Рәйсә Күзбәкова һәр сығыш яһаусынан һуң йыйылыусыларға төрлө һорауҙар менән мөрәжәғәт итте, улар иһә фекер алышыуға дәррәү ҡушылды. Ҡорға килгән халыҡтың аралашыуға, мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшеүгә һыуһауын раҫланы был. Мәҫәлән, Зифа Ғәҙелша ҡыҙының сығышынан һуң ҡорға йыйылыусылар менән фекер алышып, шундай һығымта төйнәлде: ни өсөн ир-аттың абруйы юҡ, тибеҙ ҙә һөйләйбеҙ, бәлки, уны беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, үҙебеҙ төшөрәбеҙҙер? Сөнки башҡорттар тарихын ҡараһаң, унда ир-ат бер ваҡытта ла бала тәрбиәләп ултырмаған, бының өсөн уның ваҡыты ла булмаған, ул йә ихтилалдарҙа, йә 25-әр йыл хәрби хеҙмәттә йөрөгән. Ә был ваҡытта ҡатын-ҡыҙ донъя көткән, малайҙарҙы ысын ир-азамат итеп тәрбиәләгән. Хатта мәшһүр "Урал батыр" эпосында ла, Урал өс ҡыҙға өйләнә һәм береһе эргәһендә лә оҙаҡ тормай, туҡталмай, юлын артабан дауам итә. Һуңынан ғына әсәләре улдарын батыр итеп үҫтереп, тәрбиәләп, аталары артынан ебәрә. Ир-атты ҡатын-ҡыҙҙың итәгенә бәйләп ҡуйыу - ул бары тик совет власы йылдарында башҡа халыҡтан килеп ингән күренеш, феминизмдың бер сағылышы түгелме икән? Эйе, ни өсөндөр беҙҙә башҡа халыҡтарҙың ыңғай яҡтары түгел, үкенескә күрә, кире, башҡорт милләтенә хас булмаған сифаттары тиҙерәк һәм нығыраҡ үҙләштерелә.

Түңәрәк ҡорҙа шулай уҡ йәш быуынды тәрбиәләүҙә фольклорҙың, әҙәбиәттең, театрҙарҙың һәм милли матбуғаттың роле тураһында ла эксперт сығышы булды. Филология фәндәре кандидаты Ғәҙилә Бүләкова: "Рухи тәрбиә биреүҙә ата-бабаларыбыҙ бик күп фольклор өлгөләрен, мәҫәлән, һамаҡлауҙар, бишек йырҙары, теләктәр, әкиәттәрҙе ҡулланған, әммә бөгөн беҙ уларҙы беләбеҙме? Ә бит был өлгөләр тупланған том-том китаптар башҡортса ла, русса ла баҫылып сыҡҡан. Быны белмәйме, файҙаланмаймы атай-әсәйҙәр? Шулай уҡ балалар әҙәбиәте ныҡ үҫешte, уның бына тигән өлгөләре бар, улар китап магазиндарында тулып ята, уларҙы алалармы? Балаларға тәғәйенләнгән ваҡытлы матбуғатҡа яҙылабыҙмы?" - тип һорауҙы ҡабырғаһы менән ҡуйҙы. Урынлы һәм ҡайһы бер осраҡта һауала аҫылынып, яуапһыҙ ҡалған һорауҙар. Мәрйәм апай Бураҡаеваның ошо сарала: "Минең бер осрашыуҙағы сығышымдан һуң телевидениела эшләгән бер журналист ҡатын ығып торҙо ла: "Һеҙҙе тыңлағандан һуң күпте аңланым: иртәгә үк балаларымды 11-се гимназиянан алам да, башҡорт мәктәбенә бирәм. Ниңә шул сығыштарығыҙҙы гәзит-журналдарҙа баҫтырмайһығыҙ?" - тине. Уға яуап итеп: "Туғанҡайым, һин дөрөҫ һығымтаға килгәнһең, балаларыңды башҡорт мәктәбенә бир. Әммә мин тел тураһында бары тик "Һәнәк" журналына ғына яҙғаным юҡ", - тип яуапланым", - тиеүе лә әлеге түңәрәк ҡорҙа күтәрелгән барлыҡ проблемаларҙа ғәйепләне ситтән эҙләмәй, уны хәл итеүҙе тап үҙебеҙҙән башлау зарурлығына ишара булды Бәлки, ысынлап та, тышҡа баҫылған һүҙҙәргә иғтибарлыраҡ булырға ғына кәрәктер. Юҡҡа ғына борон (был да халыҡ педагогикаһылыр, бәлки) китап асмағандар, китап менән имләмәгәндәр, китап һүҙенә ышанмағандар, иң элек һүҙ булған, тимәгәндәр бит.

"Йәш быуынды тәрбиәләүҙә ғаиләнең роле" темаһы буйынса сығыш яһаусы Мәрйәм апай Бураҡаева йыйылыусыларға аңы аҙашҡан халыҡ менән эшләү, уларға туған телдә һөйләшеүҙән, туған мондарҙың ни өсөн кәрәклеген аңлатыу кәрәклеге тураһында һөйләне. Уның: "Меңйыллыҡтар башында уҡ тиерлек телгә алынған, карталарҙа билдәләнгән башҡорт егерме беренсе быуатҡа тиклем башҡорт булып йәшәй. Беҙ әлегәсә үҙебеҙ булып йәшәүҙе дауам итәбеҙ, шул уҡ ваҡытта замандан да артта ҡалмайбыҙ: ҡурай ҙа тартабыҙ - органда ла уйнайбыҙ; боронғо "Һунарсы" бейеүен дә бейейбеҙ - "Сыңрау торна" легендаһын балет сәнғәте аша ла аңлатабыҙ; әлегә саҡлы бишбармаҡ та бешерәбеҙ, ҡымыҙ ҙа бешәбеҙ, ҡорот та ыҫлайбыҙ, талҡан да тартабыҙ, кирәм менән үрмәләп солоҡ балын да йыйбыҙ - заманса аш-һыу ҙа әҙерләй беләбеҙ. Милли көрәшебеҙҙе лә онотмағанбыҙ - Америкаға барып бокс буйынса ла еңеп ҡайтабыҙ. Әкиәттәребеҙҙә телгә алынған сатраш уйынында ла, йәғни шашка ярышында тиҫтәләрсә дәғүәселәрҙе еңеп ҡайтабыҙ; боронғо гимныбыҙ "Урал"ды ла онотмайбыҙ, опералар башҡарып, донъя кимәленә лә сығабыҙ, һ.б. Сөнки беҙ бай мираҫлы халыҡ һәм тарихыбыҙ тәрәнгә киткән, шул уҡ ваҡытта заман һулышын йәһәт кенә тойоп алырлыҡ яҡты зиһенлебеҙ ҙә", - тигән һүҙҙәрен һәр кем күңеленә һеңдергәндер, тип ышанғы килә.

(Дауамы 6-сы биттә).

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған ҡәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡорсаңғы

❖ 1 ус айыу ҡурайы тамырын 15 минут 5-6 ҡалаҡ сусҡаның эс майында бешерергә, һөҙөргә, майға 2 ҡалаҡ ҡайын дегете, 2 ҡалаҡ иҙелгән дауахана көкөртө өҫтәргә. Төнгөләккә һөртөргә. Иртән айыу ҡурайы төнәтмәһе менән йыуырға. Төнәтмә шулай әҙерләнә: 50 г тамырға 1 л ҡайнар һыу ҡойорға, 15-20 минут талғын утта бешерергә.

### Тотлоғоу

❖ Йырлау телмәрҙе нормаға килтерә, тик даими йырларға кәрәк.

❖ 1 ҡалаҡ рута (рута садовая) үләненә 200 л ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр тамаҡты сайҡатырға. Дауаланыу курсы - 10 көн.

❖ 2-шәр ҡалаҡ арса (вереск) һәм мелисса үләне, 1-әр ҡалаҡ айыу ҡурайы тамыры (корень дягиля), аҡ сәскә, ҡомалаҡ тубырсыҡтары, арыҫлан ҡойроғо (пустырник), һары мәтрүшкәне ҡушып, 1 балғалаҡ ошо ҡатнашмаға 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм ас ҡарынға иртән һәм йоҡлар алдынан 40-ар мл эсергә. Ошо уҡ төнәтмә менән тамаҡты сайҡатырға. Дауаланыу курсы - 2 ай, 10 көн ял иткәндән һуң тағы ҡабатларға.

### Ҡолаҡ шаулауы

❖ 1 балғалаҡ барвинка үләне, 1 ҡалаҡ энәлек сәскәһен ваҡлап, 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, ҡапҡас ябып, һауытты 30 минут ҡайнап ултырған һыуҙа торорға, һөҙөргә. 1-1,5 ай дауамында ашарҙан 20 минут алда көнөнә 3-4 тапҡыр 70-шәр г эсергә.

### Тырнаҡ бәшмәге

❖ Көн һайын төнгөләккә каланхоэ япрағын лейкопластырь менән тырнаҡҡа йәбештерергә.

### Ғырылдау

❖ Йоҡлар алдынан яңы һығылған 1 стакан кәбеҫтә һутына 1 ҡалаҡ бал өҫтәп эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай. Форточканы асып, ҡабырғала йоҡларға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы 1 мартты "Башҡорт ғаиләһе көнө" тип иғлан итеүе, республиканың барлыҡ ауыл-ҡалаларында үткәрелергә тейешле "Ырыуымдың иң матур ғаиләһе" конкурсына старт биреүе юҡҡа түгел.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕ

**Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарына мең, көҙәй, танып, елдәк-гәрәй, ҡайлы-ҡаршы, йәнәй, байлар, йылан, ҡырғыҙ, бүләр, таҙлар, ирәкте, уран, ғәйнә ырыуҙары инә.**

Хәҙерге административ бүленеш буйынса Яңауыл, Тәтешле, Асҡын, Балтас, Мишкә, Борай, Ҡалтасы, Краснокама, Илеш, Баҡалы, Саҡмағош, Кушнаренко, Благовещен, Шаран, Дүртөйлө, Благовар, Бүздәк, Туймазы, Бөрө райондары, Ҡариҙел, Өфө, Нуриман, Шишмә, Иглин районларының бер өлөшө, Пермь өлкәһенең көньяҡ өлөшө, Татарстандың көнсығыш өлөшө инә.

Төньяҡ-көнбайыштың матди мәҙәниәте бик төрлө. Был төбәктең тәбиғәт шарттарында яҡшы үҫеүе сәбәпле, етенде күпләп эшкәртәләр. Тап ошо төбәк һуғылған таҫтамалдары менән билдәле. Ҡатын-ҡыҙ һәм ирҙәр күлдәге, шулай уҡ салбарҙар һуғылған туҡыманан тегелгән. Розетка - сәскә, япраҡ һымаҡ итеп эшләнгән төп биҙәктәр шаҡмаҡҡа сағыу төҫтәр менән һуғылған **(һүрәт)**.



Күлдәк теккәндә тура мөйөшлө, трапеция формаһындағы туҡымалар ҡулланылған, был туҡыманың геометрик һүрәтен тура килтереүҙе лә еңелләштергән.

Күлдәктәрҙә бала итәктәр юҡ, күкрәк линияһы буйлап сатин йәки ситсанан бер әберкә һалынған **(һүрәт)**.





Алъяпҡыстар ҙа һуғылған туҡыманан тегелгән. Шаҡмаҡлы биҙәктәр алъяпҡыстың урта өлөшөнә тура килә, йәиһә уны бөтөнләй төҫлө туҡыманан тегәләр. Бындай сағыу алъяпҡыс һәм өй шарттарында һуғылған туҡыманан тегелгән күлдәк байрам кейеме иҫәпләнә **(һүрәт)**.





Камзулдар күкрәк тәңгәлендә үк аҫҡа ҡарай киңәйә башлай. Камзулдың оҙонлоғо янбаш уртаһына тиклем етә **(һүрәт)**. Был төбәккә хас өҫ кейемдәре тәңкәләр менән түгел, ә уҡа менән генә биҙәлә. Шул уҡ ваҡытта биҙәүестәрҙә ул мул ҡулланылған.

Шулай итеп, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары костюмы ер эшкәртеү материалдарын ҡулланыу менән айырылып тора. Өйҙә һуғылған етен ҡалын була, форманы ла яҡшы тота.

**Айгөл КАМАЛИЕВА.**
**"Башҡорт костюмы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ



# МИЛЛИ МИРАҪЫБЫҘ...

## йәш быуынды тәрбиәләү сараһы







**(Башы 5-се биттә).**

Йыйылыусылар БР мәғариф министры урынбаҫары Венера Вәлиеваға мәктәптәрҙә туған телдәрҙе уҡытыу буйынса килеп тыуған ҡатмарлыҡтар тураһындағы һорауҙарын еткерҙе. "Бөгөн ата-әсәләргә ҙур вәкәләт бирелгән, улар мәктәптең уҡыу-уҡытыу планын һайлауҙа әүҙем ҡатнаша һәм үҙ фекерен белдерә ала. Әгәр ата-әсәләр мәктәп йыйылыштарына йөрөп, ошо вәкәләттәрен ҡулланып, башҡорт теленә ҙур урын бүленгән уҡытыу планын һайлаһа, мәктәп администрацияһы уларҙың ихтыярын үтәргә тейеш", - тине Венера Фәрит ҡыҙы.

Мәлдән файҙаланып, шуны ла өҫтәп әйтке килә: РФ Дәүләт Думаһында Татарстан депутаттарының бер вәкиле Берҙәм дәүләт имтиханын туған телдәрҙә тапшырыу тураһында бик күп мөрәжәғәттәр булыуға бәйле, ошо турала закон ҡабул итеү тәҡдиме менән сығыш яһағайны. Әммә Башҡортостанда был хаҡта ым-ишара ла булманы. Эйе, бөгөн 9-сы синыфтар имтихандарҙы башҡорт телендә тапшырыу хоҡуғына эйә булһа ла, тотош Башҡортостан буйынса ундай теләк белдереүсе табылмаған. Ошо факттан сығып, 11-се синыфты тамамлаусылар араһында ла теләүселәр булмаҫ, тигән фекер яңғыраны. Ләкин көн бөгөн менән генә бөтмәй. Бәлки, бер нисә йылдан һуң Берҙәм дәүләт имтиханын башҡорт телендә тапшырырға теләүселәр табылыр, ләкин ҡанун булмаҫ. Ул ваҡытта балаларға нимә тип яуаплар быҙ? Икенсе яҡтан, Рәсәйҙә бит бер башҡорттар ғына йәшәмәй, беҙгә ул ҡанун кәрәкмәй икән, башҡа милләттәргә кәрәк. Хәйер, ҡанундың булыуы ла зыян итмәҫ - аҫабалыҡ тураһындағы ҡасанғы грамоталарға нигеҙләнеп, һаман да башҡорттарҙың аҫаба халыҡ булғанына күкрәк ҡағабыҙ бит әле, ә ни өсөн киләсәк быуындарға үҙебеҙҙән һуң да шундай грамота ҡалдырмаҫҡа, имтихандарҙы башҡорт телендә тапшырыу хоҡуғы буйынса булһа ла...

Ғөмүмән, был сарала хәҙерге ғаиләнең социаль-философик аспекты ла, үҫмерҙәр араһында үҙ-үҙенә ҡул һалыу проблемалары буйынса ла етди һөйләшеү булды. Дөйөм алғанда, түңәрәк ҡор, ниһайәт, ысын мәғәнәһендә башҡорттарҙың йыйынын хәтерләтте, сөнки ул беренсе тапҡыр саф башҡорт телендә үтте һәм башҡорттарҙың башҡорт телен дәүләт теле кимәленә күтәреүенең бер сағылышы, үҙгәреүҙе үҙебеҙҙән башлайыҡ, тигән саҡырыуға бер дәлил булды.

Сараны йомғаҡлап, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов икенсе йылға "Ырыуымдың иң матур ғаиләһе" фестивален үткәреү өсөн бөгөндән әҙерлек башларға һәм уның тәүге турҙарын урындарҙа ойоштороп, район кимәлендә еңеүселәрҙе йыл да 1 мартта Өфөлә тәбрикләү тураһындағы өмөт-хыялдары менән бүлеште.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Сараның икенсе өлөшө "Башҡортостан" дәүләт концерт залында дауам итте һәм "Матур ғаилә - ил ҡото" тип аталды.**

Программа Сибай концерт-театр берекмәһе артистарының рухлы, йөкмәткеле сығышынан башланды. Һәр ваҡыттағыса, был талантлы, халыҡсан коллективтың йырсылары, бейеүселәре сәхнәлә күренеү менән тамашасы күңел талпыныуы кисерҙе. Кисә буйы был талпыныу ташламаны уны. Сибайҙар башҡорт сәнғәтенең ғәжәйеп көсөн һынландырһа, артабанғы сығыштар беҙҙең йәшәйешебеҙҙә "Башҡорт ғаиләһе" тигән тағы ла бер мөғжизә барлығына инандырҙы. Эйе, алдан планлаштырылғанса, был осрашыуға райондарҙан халыҡ араһында абруй һәм хөрмәт яулаған күркәм башҡорт ғаиләләре саҡырылғайны. Ишембайҙан Хафизовтарҙың, Мәсетле районынан Зәйнетдиновтар, Баймаҡтан Аралбаевтар, Әбйәлилдән Баймырҙиндар, Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылынан Боҫҡоновтар, Илеш районы Айыу ауылынан Муллахмәтовтар, Иглин районының Ләмәҙ ауылынан Хәлитовтарҙың сәхнәгә күтәрелеп, үҙ ғаиләләрендәге йолалар, шөғөлдәр, бала тәрбиәләү алымдары тураһында һөйләүе, әлбиттә, һәр кем күңелендә фәһемле һабаҡ булып уйылып ҡалды. Беҙгә тап бына ошондай һабаҡтарҙы күберәк күрһәтеү, һөйләү мәле еткәндер ҙә. Һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының 1 мартты "Башҡорт ғаиләһе көнө" тип иғлан итеүе, республиканың барлыҡ ауыл-ҡалаларында үткәрелергә тейешле "Ырыуымдың иң матур ғаиләһе" конкурсына старт биреүе юҡҡа түгел: беҙ хәҙер килеп шәхестәребеҙ, илһөйәрҙәребеҙ, телһөйәрҙәребеҙ, таланттарыбыҙ, зыялыларыбыҙ иң тәүҙә ғаиләлә формалаша, тәрбиәләнә, тигән хәҡиҡәткә яңынан йөҙ борорға тейешбеҙ. Ошоға ишара булды ла инде үтеп киткән әлеге матур саралар.

✔ Хәҙерге Ишембай районында тирмән ташы ер өҫтөндә осрай. Таштар төрлө төҫтә, күк таштар иһә иң шәбе тип һаналған. Ул ҡатыраҡ һәм унда кварц кристалдары күберәк осрай.



БАШҠОРТ ОҪТАХАНАҺЫ

**Революцияға тиклем ҡайһы бер таулы райондарҙа башҡорттар таш сығарыу, уны эшкәртеү һәм һатыу менән шөғөлләнгән. Был шөғөл фәндә тейешенсә өйрәнелмәгән. Шуға ла хәҙерге уҡыусы башҡорттарҙа таш сығарыу тураһында белдәле яҙыусы Ринат Камалдың романдарынан ғына белә ала. Сығанаҡтарға килгәндә, улар күбеһенсә XIX быуаттың икенсе яртыһы - XX башына ҡарай.**

# ТАШ СЫҒАРЫУ ҺӘМ ЭШКӘРТЕҮ



1859 йылда, мәҫәлән, губерна гәзите Стәрлетамаҡ өйәҙенә ҡараған Мырҙаҡай ауылында (хәҙерге Ғафури районы Сәйетбаба ауылы) таш сығарыу һәм уларҙан ҡайраҡтар һәм дүрт ҡырлы итеп яһалған таштар эшкәртеү тураһында хәбәр итә. Күбеһенсә ул эшкәртелгән таштарҙы Табын ҡаласығында һатҡандар. Был шөғөл йылдан-йыл үҫешә барған. Табындан ул таштарҙы Ағиҙел буйлап Кама һәм Иҙел буйындағы ҡалаларға алып сыҡҡандар. Мырҙаҡайҙа ике төрлө таш сығарылған: ҡара һәм һоро. Ҡара таш яҡшыраҡ һаналған һәм ҡыйбатыраҡ торған. XIX быуат аҙағында Мырҙаҡай ауылы халҡы йылына 700-ҙән алып 1000 ботҡа (пуд) тиклем ҡайраҡ таш сығарған һәм эшкәрткән.

Мырҙаҡай ауылы эргәһендәге ҡомташтарҙы 1860 йылдарҙа инженер, штабс-капитан Васильев (инициалдары күрһәтелмәгән) өйрәнгән. Һәм бына ни тип яҙып ҡалдырған: "Комташтарҙан бына тигән ҡайраҡ таштар сыға, улар бер нәмәһе менән дә Печора һәм инглиз ҡайраҡтарынан ҡайтыш түгел. Был ҡомташтар ваҡ бөртөклө һәм слюдалы. Төҫө ҡара-һоро, күбеһенсә ҡара, шулай уҡ ап-аҡ ҡомташтар ҙа осрай".

Шулай уҡ 1850-1860 йылдарҙа Златоуст өйәҙе 2-се Әйле улысы башҡорттары ла ҡайраҡ таштар сығарған һәм эшкәрткән. Леуҙа таш сығарыу урындарын ваҡытында башҡорттар үҙләштерә башлаған булһа кәрәк. Әммә XIX быуат аҙағында был шөғөл әйле башҡорттарында яйлап һүнә барған. Ә 1860 йылдарҙа Леуҙаға (хәҙерге Ҡыйғы районы) күсенеп килгән урыҫтар таш сығарыуға башҡорттарҙан өйрәнгән.

Стәрлетамаҡ өйәҙендә шулай уҡ тирмән ташы сығарғандар. Мәҫәлән, XIX быуат аҙағында шул уҡ Мырҙаҡай (Сәйетбаба) ауылында бер йәйҙә 50-100 пар тирмән таштары сығарылған. Һаҡмар буйында йәшәгән башҡорттар (хәҙерге Йылайыр районы) слюдалы һөйерташтар менән кварцтың ҡушымтаһынан тирмән таштары эшләп, уларҙы ҡазаҡтарға һатыр булған. 1850-1870 йылдарҙа тирмән таштарын шулай уҡ хәҙерге Ишембай районына ҡараған Маҡар, Иҫәкәй, Ибрай, Һәргәй, Иҫкесәк, Ғүмәр ауылдары кешеләре лә сығарған. XIX быуат аҙағында - XX быуат башында Петровск улысына ҡараған ауылдарҙа (Иҫкесәк, Ғүмәр) иһә таш сығарыу туҡтаған.

Хәҙерге Ишембай районында тирмән ташы ер өҫтөндә осрай. Таштар төрлө төҫтә, күк таштар иһә иң шәбе тип һаналған. Ул ҡатыраҡ һәм унда кварц кристалдары күберәк осрай. Әммә төрлө төҫлө тирмән таштары ҡыйбатыраҡ торған.

Күбеһенсә ташты йәй көнө сығарғандар, ә ҡышын уны эшкәртеү менән мәшғүл булғандар. Башҡорттар ташты тимер бырауҙар менән эҙләгәндәр. Тапҡас, сүкеш менән ташҡа һуғып ҡарағандар. Әгәр ҙә тауыш асыҡ сыҡһа, таш һәйбәт була, тигәндәр, киреһенсә, тауыш тоноҡ булһа, таш насар. Ундай таш эшкәрткәндә ватылған. Тирмән ташын лом, элмәк, шына, бер ботҡа тиклемге ауырлыҡтағы сүкештәр ярҙамында ватып алғандар. Тишектәр барлыҡҡа килгәс, һыҙыҡ буйынса ағас һәм тимер шыналар ҡағып, өҫ-дүрт тирмән ташына етерлек ҙур ташты ватҡандар һәм шунда уҡ уны таҙартҡандар. Таштарҙы соҡорҙан бүрәнәләр буйлап сығарғандар. Бында ун-ун бишләгән кеше кәрәк булған. Таштарҙы шымартҡанда, уларҙы утта тотҡандар. Ут ташты йомшарта, тип уйлағандар. Таштарҙы аттар менән ауылға алып килгәндәр (ҡайһы бер ауылдарҙан таш сығарыу урындары арыу ғына йыраҡлыҡта булған. Мәҫәлән, Иҫәкәй ауылынан 10-15 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан). Унан эш ауылда дауам иткән. Таштарҙы циркуль буйынса бөләкәй генә сүкештәр менән тигеҙләгәндәр. Бер кеше 7-15 көн эсендә ауырлығына ҡарап бер тирмән ташын эшкәртә алған. Махсус оҫтаханалар, әлбиттә, булмаған. Ташты эшкәртеү ихатала башҡарылған. Был ауыр эш менән ирҙәр генә шөғөлләнгән. Кәрәк ваҡытта өмәгә күрше-күләнде йыйғандар. XIX быуат аҙағында Маҡар, Ибрай, Иҫәкәй ауылдары һөнәрселәре күп ваҡыт шул тирмән ташы сығарыу һәм эшкәртеү менән шөғөлләнгәндәр, бесән ваҡытында ғына туҡтап торор булғандар.

Һуңыраҡ байҙар ярлыларҙы яллағандар. Ялсылар көнөнә 25-тән 35 тингә тиклем эш хаҡы алған. Мәҫәлән, XIX быуат аҙағында Иҫәкәй ауылында байҙар ярлыларға һәр ҡарыш таш өсөн 25-60 тин түләгән.

Әгәр ҙә 1850-1860 йылдарҙа таш сығарыусы үҙе баҙарға тауарын алып сыҡһа, XX быуат башында ауылдарҙа әҙер таштарҙы һатып алып, уларҙы баҙарға сығарыу менән генә шөғөлләнгән алыпһатарҙар ҡатламы үҫеп сыҡҡан. Улар үҙҙәренең ауылдаштарын яллап эшләткәндәр. Таш сығарыу урындары хужалары ҡайһы берҙә алыпһатарҙарға таштарҙы эшкәртелмәгән көйө лә һата булғандар. Тегеләре иһә таштарҙы ауылға алып ҡайтып, уларҙы өсөнсө кешеләргә эшкәртергә биргән. Мәҫәлән, Сәйетбаба ауылында тирмән ташы сығарыу менән шөғөлләнгән 12 йорттоң 11-е урында уҡ үҙҙәренең ауылдаштары - алыпһатарҙар Звездин менән Сафиуллинға һатҡандар.

Тегеләре таш сығарыусыларға сейәлдың диаметрына ҡарап ҡарышына 30 тиндән алып 60 тингә тиклем түләгәндәр. Эшкәрткән өсөн ҡарышына 20 тин биргәндәр.

Маҡар ауылында таш сығарыусы алты йорт эшкәртмәйенсә ауылдаштары Солтангәрәй Ҡарамышевҡа һатҡандар. С. Ҡарамышев Ҡаҙан сауҙагәре Бәҙретдиновтың ышаныслы вәкиле булған. Шул уҡ хәл башҡа ауылдарҙа ла күҙәтелгән.

Таш сығарыусылар, әлбиттә, алыпһатарҙарға тауарҙы арзанға бирергә мәжбүр булған. Сөнки яҡын-тирәлә ул таштарға мохтажлыҡ булмаған.

1860 йылдар башында Стәрлетамаҡ өйәҙендә йылына 300-ҙән алып 400-гә тиклем тирмән ташы эшкәртелгән. Тауар, әйтеүебеҙсә, Табын ҡаласығында баҙарға сығарылған. Унан ул баржаларҙа Ҡаҙан, Түбәнге Новгород, Һамар, Һарытау, Әстерхан һәм башҡа ҡалаларға оҙатылған. 1850 йылдарҙа Сәйетбаба ҡайраҡтары ҡайһы бер дәүләт ҡорал заводтарына ла ебәрелгән булған.

1850 йылдар аҙағында Табында ҡара ҡайраҡтың бото 18-20 тин, һоро ҡайраҡтың бото - 12-15 тин, ҡара дүрт ҡырлы итеп яһалған таштарҙың йөҙө - 80 тин - 1 һум, һоролары - 50-70 тин торған. XIX быуаттың икенсе яртыһында таш тауарға хаҡтар төшөүгә барған. Әгәр ҙә 1864 йылда Сәйетбаба халҡы ҡайраҡтарҙың ботон 9 тин көмөш аҡса менән һатһа, XIX быуат аҙағында иһә - 5-6 тингә биреп ебәргән. 1860-1890 йылдарҙа тирмән таштарын сығарған ерҙәрҙә хаҡтар ике-өс һәм унан да күберәк тапҡырға төшкән. Ә алыпһатарҙар иһә ул тауарҙарҙы икенсе ҡалаларҙа һатыуҙан ҙур табыш алған.

Таш, әлбиттә, башҡа өйәҙҙәрҙә лә сығарылған, төҙөлөштә лә ҡулланылған. Ҡайһы бер һөнәрселәр ҡәбер таштары эшләү менән шөғөлләнгәндәр. Был шөғөл тураһында әҙәбиәттә материал осрамай тиерлек һәм ул шулай уҡ өйрәнелмәгән тиһәк тә була. Совет власы урынлашыуы, замандарҙың үҙгәреүе таш сығарыуҙың һүнеүенә, уның менән бәйле күп шөғөлдәрҙең юҡҡа сығыуына килтергән.

**Шамил ИҪӘНҒОЛОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

## БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### ХАНЛЫҠТАР

### 3. Ыҡ (ирәкле) батшалығы

Биләр башҡорттарҙың Ыҡ батшалығының баш ҡалаһы булып торған. Ыҡ батшалығының иҡтисади яҡтан ныҡ үҫешеүе уның батшаһы Байраска ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бөйөк Аҡһаҡ Тимерҙең килеүенә махсус рәүештә һарай төҙөп ҡуйырға мөмкинлек биргән, был хаҡта Мөслими яҙып үтә. Был яҙмала Ыҡ батшалығына ҡараған олоҫтарҙың бер ҡайҙа ла булмаған статусы сағылыш тапҡан. Уның яҙмаларында "Ыҡ батшалығы" хаҡында һүҙ барыуы юҡҡа түгел, күрәһең, автор беҙгә быҒаса булмаған сығанаҡтар менән эш иткән. Шулай итеп, Кама аръяғы территорияһында, Ыҡ бассейнына ҡараған Шишмә, Зәй йылғалары буйында башҡорттарҙың "Ыҡ ханлығы" йәки "Ыҡ батшалығы" йәшәп, уның баш ҡалаһы Биләр булған. Әгәр ҙә биләрҙәрҙең был батшалыҡты төҙөүҙән алда башҡорт ҡәбиләләренең эре берләшмәһен барлыҡҡа килтереүен иҫәпкә алғанда, Биләр ҡалаһының башҡорт ерендә төҙөлөүен һәм унда башҡорттар йәшәүен ҡыйыу рәүештә раҫлап була. Н.П. Рычков Биләрҙә күп һандағы башҡорттар йәшәүе хаҡында яҙа. Биләр Сиремшән йылғаһының көньяҡ-көнсығыш ярындағы, Болғар менән Башҡорт иле араһындағы шартлы сикте билдәләгән батшалыҡ булған. XIII быуатта "Биләр йәки Бөйөк ҡала бөтә донъя әһәмиәтендәге, бер үк ваҡытта сәйәси, иҡтисади, дини һәм мәҙәни үҙәккә әүерелгән", тип яҙа күп кенә авторҙар. В.К. Сәмиғуллин башҡорттарҙың тарихтың бер мәлендә "биләр" ырыуҡәбилә берләшмәһе нигеҙендә Биләр ҡалаһына нигеҙ һалыуы, ҡала дәүләттең баш ҡалаһы булыуы, унда башҡорттарҙың хакимлыҡ итеүе хаҡында яҙа. Археологик ҡомартҡылар ҙа тап ошоно, йәғни Ыҡ батшалығының баш ҡалаһы Биләрҙә башҡорттар йәшәгәнлеген иҫбатлай. Бүләрҙең тарихи үткәне хаҡындағы хәтер "урыҫ осоро"нда ла һаҡлана. Был ҡәбиләләрҙең эҙен хәҙерге башҡорттар араһында ла табырға була. Мәҫәлән, 1761 йылда бүләр башҡорттарының бер өлөшө Рәсәй батшалығының ҡыҫырыҡлауы һөҙөмтәһендә Стәрлетамаҡ өйәҙендәге юрматыларға һыйынып, Ишембай районының Кинйәкәй ауылын барлыҡҡа килтерә. Юрматылар шәжәрәһендә Биләргә килгән тәүге хандың исеме Шибан булыуы хаҡында әйтелә, юрматыларҙа ул йорт башлығы була. Сығанаҡтар буйынса, ҡыпсаҡтар менән бер союзға ингәнсә, "бараш" ҡәбиләләр союзында юрматылар, юрмыйҙар, йәнәйҙәр, бүләрҙәр торған. Бүләрҙәр юрматылар, юрмыйҙар менән бергә бер сәйәси берләшмәне тәшкил иткән. Был союзда юрматылар ҙур урынды алып торған.

Ғалим Ә.Х. Халиков "баранджар" этнонимын Максуди яҙмаларына бәйләй, унда "берберәһенә кәрҙәш булған дүрт төрки ҡәбилә - бәжнәләрҙең, бәджнәктәрҙең, баджгурдтарҙың һәм нөкәрҙәләрҙең - славян ерҙәренә һөжүм итеүе" хаҡында әйтелә. "Бәджнә" атамаһы "бәрәш-бәрәнджәр", "бурджан"ға ныҡ оҡшаш, был ҡәбилә башҡорттарҙа ғына бар. "Дәфтәр-и Сыңғыҙнамә" әҫәрендә лә "бараш" атамаһы осрай. Ҡайһы бер тарихсылар "бараш"ты "баранджар"ҙың бер варианты тип ҡарау яғында. Һәр хәлдә, уларҙың Биләр ҡалаһының төп үк булмаһа ла, бер өлөшөн тәшкил итеүендә шик юҡ.

**(Дауамы бар).**

**✓ Юғары белем һинең һөнәрмән икәнеңде аңлатмай әле, был шул һөнәрҙе үҙләштереүеңдә генә белдерә. Ә һөнәрмән булыу өсөн мотлаҡ ниндәйҙер хеҙмәт юлы үтеү, кешеләр менән аралашып, уларҙы аңлап, тыңлап эшләп өйрәнеү зарур.**



# ЙӘШТӘРҘЕ

## уларҙы алға ебәрергә лә,

**Заман шәхесе, заман батыры булыу өсөн замандың ниндәй булыуы түгел, ә үҙеңдең кем булыуың мөһим икән шул. Уйлап ҡараһаң, беҙҙең арала "йондоҙ" тип йөрөтөлгәндәр, затлы журнал биттәрен биҙәгәндәр, һөйләгәндә исемдәре беренсе булып аталғандар бихисап. Эйе, улар бөгөн "йондоҙ", ә иртәгә уларҙың исемен иҫкә алған кеше лә булмауы ихтимал. Шул уҡ ваҡытта икенсе төрлө шәхестәр ҙә бар: уларҙы, бәлки, беҙ йөҙгә лә танымайбыҙҙыр, әммә уларҙың башҡарған эштәре бөгөн - ысынбарлыҡ, ә киләсәктә тарих булып йәшәйәсәк. Шундай шәхестәрҙең береһе - Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты директоры, иҡтисад фәндәре докторы, профессор Зиннур Ғөбәйҙулла улы ЙӘРМӨХӘМӘТОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**Зиннур Ғөбәйҙулла улы, һеҙҙең һымаҡ илһөйәр ир-уҙаманды кемдәр тәрбиәләп үҫтерҙе, улар ниндәй ҡағиҙә-ҡиммәттәрҙе алға ҡуйҙы һәм ниндәй кәңәштәр бирҙе икән?**

- Мин Баймаҡ районының Хәсән ауылында тыуып үҫтем. Фронтовик атайым мин иҫ белгәндән Башҡорт баҡыр-көкөрт комбинатының шахтаһында эшләне. Утлы юл үтеп ҡайтҡан, унан һуңғы ил ауырлыҡтарын иңдәрендә күтәргән атайҙарҙың тәрбиәһен үҙегеҙ күҙаллайһығыҙҙыр. Улар артыҡ һүҙ һөйләп, иркәләп-бәпләп тороуҙы белмәне, бары хеҙмәтте һәм намыҫты алға ҡуйҙы. Бәләкәйҙән йорт араһындағы эшкә егелдек. Ғәйепле булғанда атайҙың ҡаты ҡулын да, ҡайышын да татырға тура килде. Бер саҡ, хәтеремдә, малайҙар менән тәмәке тәмен тәмләп ҡарарға булып, төтәтеп маташтыҡ. Ул ваҡытта "Бокс" тигән сигареттар сыҡты, шуны ҡулға төшөрөп алғанбыҙ. Таш араһына йәшеренгән дә һымаҡ инек, атайҙарҙың тап эштән ҡайтып килгән юлына тура килгәнбеҙ икән. Атай күреп ҡалып, арыу ғына ҡайышланы. Шул ваҡиғанан һуң тәмәке тигән нәмәгә тотонманым...

1953 йылда Сибайҙың Ҡарағайлы урамына күсеп килдек. Һигеҙ класты ҡала мәктәбенә йөрөп тамамланым да, тау техникумына уҡырға индем. Был хаҡта ғаиләлә артыҡ һөйләшеү ҙә, бәхәс тә булманы, шул һөнәр кешеләрен күреп үҫкән һәм шул өлкәне яҡын күргән бала булараҡ, мин дә таусы булырға ынтылдым. Техникумды тамамлағас, Ҡаҙағстан СССР-ында Майкаин комбинатында эшләнем, армияла йөрөп ҡайттым, бер аҙ ГПТУ-ла мастер булып эшләп алдым һәм белемемде камиллаштырмаҡсы булып, Магнитогорск тау институтына имтихан тоттом. Институттан һуң Силәбе өлкәһенең боронғо башҡорт ерҙәре булған Баҡал ҡалаһында өс йыл тәжрибә тупланым.

Сибайға ҡабаттан әйләнеп ҡайтҡанда мин өс дипломлы белгес инем инде, әммә ул саҡтағы талапсан йәмғиәт өсөн был ғына күрһәткес булмай сыҡты. Тиҙ генә эшкә урынлаша алманым. Ахырҙа, мастер ярҙамсыһы булып, иң түбән баҫҡыстан хеҙмәт юлымды башланым. Артабан комбинатта бүлек етәксеһе булып киттем, рудниктың партком секретары, һуңғараҡ комбинатта ошо уҡ вазифаны башҡарҙым. Туҡһанынсы йылдарҙағы демократия осоронда Сибай ҡала Советы башҡарма комитеты рәйесе, шунан һуң ун ике йыл ҡала хакимиәте башлығы вазифаһында эшләргә тура килде. 1999 йылдан Сибай институтын етәкләйем.

**Өс диплом менән ҡайтып та, иң түбән баҫҡыстан эш башланым, тигәндән сығып, шундай һорау: һеҙҙең быуын кешеләре хеҙмәт коллективында ниндәй мәктәп үтте? Бөгөнгө йәш белгестәрҙең эшкә мөнәсәбәте, уларға ҡуйылған талаптарҙы ул заман тәртиптәре менән сағыштырып буламы?**

- Ике төрлө быуынды сағыштырыу артыҡ дөрөҫ үк булмаҫ. Сөнки бында идеология мөһим ролде уйнай. Беҙҙең замандың заңы ла башҡа, уҡытыусыһы ла ҡөҙрәтле булды бит. Партияны әйтәм. Был система барыбер ҙә яҡшы кадрҙар тәрбиәләне. Йәғни кеше бала саҡтан иғтибар үҙәгендә тотолоп, хеҙмәт баҫҡыстарында үҫтерелде. Мәҫәлән, үҙегеҙ хәтерләгеҙ әле, пионерға, комсомолға ингәндә һеҙҙең тәртип, уҡыуҙағы өлгәш, йәмғиәт тормошондағы әүҙемлегегеҙ ҡаралмай инеме ни? Ә инде партияға ҡабул ителгәндәге талаптарҙы әйтеп тә тормайым. Үҙең генә түгел, ғаиләң дә, туғандарың да иғтибар үҙәгендә ине. Тимәк, һин яҡындарың өсөн дә яуаплыһың. Тимәк, ғаиләңде тарҡатыр алдынан ете ҡат уйларға тейешһең, тигән һүҙ. Был бит үҙенә күрә бер тәрбиә мәктәбе, тотанаҡлыҡ өлгөһө булған.

Бөгөн ни өсөн күп ойошмалар көрсөк кисерә? Сөнки етәкселәре белекһеҙ. Етәкселектә осраҡлы кешеләр күп. Белеме менән бөтөнләй тура килмәгән кешеләр үҙҙәренә таныш булмаған, ныҡлы өйрәнмәгән системаға етәксе итеп тәғәйенләнә. Бигерәк тә хакимиәттәрҙә, идаралыҡтарҙа осрай бындай миҫалдар. Һыналмаған, тәжрибәһе булмаған, юғары белем хаҡындағы танытмаға ғына эйә булғандар халыҡ менән идара итеп маташа. Ошондай һөнәрһеҙлек, профессионаллек тигәнде һанға һуҡмау булдыҡһыҙ етәкселәр командаһын барлыҡҡа килтерҙе лә инде.

Юғары белем һинең һөнәрмән икәнеңде аңлатмай әле, был һинең шул һөнәрҙе үҙләштереүеңде генә белдерә. Ә һөнәрмән булыу өсөн мотлаҡ ниндәйҙер хеҙмәт юлы үтеү, кешеләр менән аралашып, уларҙы аңлап һәм тыңлап эшләп өйрәнеү, уларға үҙеңдең оҫталығыңды, булдыҡлылығыңды иҫбат итеү кәрәк.

**Һеҙ ысын мәғәнәһендә тыуған ерегеҙҙең, үҙ милләтегеҙҙең улы. Тыуған ерҙә ерегеү яҙмыш ҡушыуы булдымы, әллә һеҙ быны маҡсатлы рәүештә эшләнегеҙме?**

- Юғары уҡыу йортонда уҡыуҙы тамамлап, Силәбенең Баҡал ҡалаһында ла мин яҡшы ғына эшкә урынлашҡайным. Һөнәрем буйынса эшләү өсөн миңә унда бөтә мөмкинлектәр ҙә булдырылғайны. Әммә тыуған яҡ тартты һәм мин ҡайтып төштөм. Шулай уҡ оҙайлы хеҙмәт юлымда Өфөгә йәки башҡа яҡҡа китеү, күпкә уңайлыраҡ, яйлыраҡ урынлашыу мөмкинлектәре лә булманы түгел. Әммә... Бәлки, был һүҙҙәр артыҡ яңғырауыҡлы ла һымаҡ булыр: тик мине тап ошо тыуған еремдә ерегеү ҡыҙыҡһындырҙы. Мин был ергә күсереп ултыртып булмаған ағас, ағышын үҙгәртә алмаған йылға һымаҡ ереккәнмен...

Минең бергә уҡыған иптәштәрем илебеҙҙең төрлө төбәктәренә таралып, шул яҡтарҙа ғүмер итте. Йәй көнө Сочиҙа төпләнгән иптәштәр менән осрашырға тура килде. Улар диңгеҙ буйында йәшәйҙәр, климат һәйбәт, йәшәйештәре яҡшы. Ҡарап һоҡланырға ғына ҡала кеүек. Әммә осрашыу мәлендә мин уларҙың күңеле барыбер китек икәнен һиҙҙем. Бигерәк тә ғүмеренең ниндәйҙер үренә еткән ир кешелә аңғарыла икән ул күңел китеклеге. Улар күберәк бала саҡтары, тыуып үҫкән ерҙәре, элекке хәтирәләрен һөйләргә, иҫтәлектәргә бирелеп китергә ярата. Хатта шул иҫтәлектәрҙе тормошоноң иң мөһим өлөшө итеп иҫәпләй һәм әлеге тормош ваҡиғаларын иҫләмәй ҙә, тигәндәй. Был үҙенә күрә бер күңел яраһы бит инде ул. Ә күңеле яралының йәшәйештә, эштә, ижадта көсө лә, ҡөҙрәте лә самалы була. Әлбиттә, был һабаҡташтарым да абруйлы хеҙмәт юлы үткән. Әммә сит ер уларҙы эшсе булараҡ ҡына тотонған да, инде пенсияға сыҡҡас, уларҙы иҫләүсе лә, хөрмәтләүсе, оло кеше тип тәбрикләүсе лә юҡ. Тыуған ереңдә иһә һине: "Бына ул шуның заты, шуның ата-бабаһы", - тип булһа ла һанлаясаҡтар. Уйлай китһәң, был төшөнсәнең фәлсәфәһе бик тәрән. "Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ ереңдә олтан бул", ти халыҡ мәҡәле лә, шуның кеүек, мин дә, ни күргәндә лә, ошо ерҙә күрергә булһын, тип уйланым.

**Сибай ҡалаһының яҙмышы хаҡында бөгөн төрлө күҙаллауҙар, фекерҙәр бар. Тау комбинаты нигеҙендә төҙөлөп, шуның көсө менән йәшәгән ҡаланың, комбинаттың кәре ҡайтҡас, яйлап һүнә барыуы тураһындағы хәүеф тә тойолоп ҡалғандай. Ошо хәүефте дөрөҫләйһегеҙме?**

- Был хаҡта юғары кимәлдәге һөйләшеүҙәрҙә лә әйткәнем булды. Ҡаланы йәшәтеү өсөн уның бығаса булған мөмкинлектәрен ҡулланып көн итеү генә аҙ, ә киләсәктә тереклек итеү юлдарын уйларға, табырға кәрәк. Һәм был бынан күпкә алдан уйланырға тейеш ине. Барыһын да күҙаллап алып барыу, контролдә тотоу, идара итеү өсөн етәксе көслө һәм белемле булырға тейеш. Быларҙан тыш, шул ерҙә йәшәгән халыҡтың ихтыяжын да төшөнөү зарур. Юғиһә, ҡалабыҙҙа ике-өс йылға ғына килеп киткән етәкселәр, образлы әйткәндә, уның һауаһын да һулап өлгөрмәй. Ә ҡалаға ниндәйҙер файҙалы эштәр атҡарыу хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Ҡала йәки район етәксеһе булыу, был яуаплы вазифаға инеп алыу, бөтөн тәрәнлеген төшөнөү өсөн кәм тигәндә ун йыл ваҡыт кәрәк, минеңсә. Тәүге өс-дүрт йылы адаптация осорона инһә, ары ғына һин емешле, эҙмә-эҙлекле күрһәткестәр бирә, ниндәйҙер пландарыңды тормошҡа ашырыуға өлгәшә башлаясаҡһың. Һуңғы йылдарҙа беҙҙең ҡала уйынсыҡ урынына ҡулдан-ҡулға тапшырылып, әрһеҙләнеп ташланды.

Республикала төрлө программалар бар, улар йылдан-йыл ҡабул ителеп тора. Шуларҙы тейешле юҫыҡта файҙалана белеү ҙә эш һөҙөмтәһендә сағылмай ҡалмай. Мәҫәлән, ТОР (территория опережающего развития) программаһы бар. Ни өсөн Сибай ошо программаға эләкмәй? Унда әлеге мәлдә Бәләбәй, Нефтекама, Мәләүез, Белорет һ.б. ҡалалар бар. Был программа сиктәрендә улар тәүге траншта уҡ биш йөҙ миллион һумлыҡ файҙа ала. Күпме эш урындары, предприятиелар асырға булыр ине. Быларға ярашлы һалым льготалары була. Асылда, ошоларҙы тормошҡа ашырыуға бер нәмә лә ҡамасауламай. Бары теләк һәм ынтылыш ҡына кәрәк. Шулай уҡ халыҡ һүҙен, халыҡ зарын ишетә белеү кәрәк.



**Заманында Урал аръяғындағы бер күренеш булған Сибай институты ла көрсөк кисерә, уның да хәле ҡыл өҫтөндә, тигән шом булды бер ваҡыт…**

- Бындай шом һәм шау-шыу сығарырға теләгәндәр маҡсаттарына өлгәшә алманы, тип уйлайым. Әлбиттә, илдәге үҙгәрештәргә, заман ауырлыҡтарына, оптималләштереү һәм башҡа күренештәргә ҡарата беҙҙең дә реакция булды, әммә кире түгел, бары тик ыңғай ғына. Был ҡәҙәре бай базала, ныҡлы нигеҙҙә ултырған институт бындай ғына һынауҙарға бирешеп тормаясаҡ. Ниндәйҙер бүлектәр ябылһа, заманға, һөнәр баҙарына яраҡлаштырып, икенсе төрлөләре асылды. Коммерция нигеҙендә йәки башҡа төрлө уңайлы шарттарҙа уҡыу мөмкинлектәре тыуҙырылды. Һөнәр үҙләштереүҙән тыш, шәхес булараҡ үҫешеү өсөн дә өҫтәмә шарттар булдырыла тора. Беҙҙең уҡыу йортонда бит студентты бөтөн яҡтан да формалаштырыуға ҡулайлашҡан профессиональ команда тупланған.

Был институтта бөтөн Урал аръяғы ғына түгел, республика һәм күрше өлкәләрҙән дә әллә нисә быуын уҡып сыҡты. Бөгөн, бәлки, ул ағым юҡтыр ҙа. Беҙ быға ҡайғырмайбыҙ, сөнки уҡыу йорто үҙ маҡсатына өлгәште. Ул кәрәкле мәлендә ошо төбәк халҡын бөтөн көсөнә хеҙмәтләндерә, уларға файҙалы була алды. Күпме башҡортҡа юғары белем алыу юлын асты ул, уларҙың яҙмышын яҡтыраҡ, хыялдарын яҡыныраҡ итә алды. Ә бит был уҡыу йортоноң төп тәғәйенләнеше лә шунда ине.

Студенттарға ҡытлыҡ бөгөн дә юҡ. Туҡһан процент белем алыусыларыбыҙ - башҡорттар. Бындай күренеш тағы ҡайҙа бар? Урамда ауыр эштә йөрөгән милләттәш ҡатын-ҡыҙҙарҙы, ир-егеттәрҙе күргәндә эсем өҙөлөп китә. Белемһеҙ булғанлыҡтан, уларҙың лайыҡлы йәшәү кимәленә күтәрелә алмауына көйөнәм. Нисек кенә тимә, беҙҙең төбәк сағыштырмаса ауыр йәшәй, предприятиеларыбыҙ юҡ кимәлендә, эш урындары аҙ, эшһеҙлекте, мохтажлыҡты йәшереп булмай. Быларҙы күҙ Урал аръяғы халҡы мәнфәғәттәрен ҡайғыртасаҡ әле, тигән өмөттәбеҙ.

**Йәштәр менән эшләгән, ҡайнап йәшәгән кеше буларак, бөгөнгө башҡорт йәштәренең кимәлен нисек баһалайһығыҙ? Ауыҙлыҡлай аламы улар үҙ заманын, әллә ағым ыңғайында ғына йөҙөп йөрөйҙәрме? Донъя көтөүгә, киләсәк быуынды тәрбиәләүгә барымы бармы уларҙың? Ғөмүмән, тормош теҙгенен ышанып тапшырырлыҡтармы?**

- "Башҡорт эсә, башҡорт эсә" тигән ҡалыплашҡан хәбәрҙе күп тыңлап, буяуҙарҙы артыҡ ҡуйыртып ташланы йәмғиәт. Ысынбарлыҡта улай уҡ түгел ул. Үҙебеҙҙә уҡып сыҡҡан йәштәрҙе генә алғанда ла, үҙ райондарына ҡайтып, оло-оло йорттар һалып, ниндәйҙер кәсепкә тотоноп, ғаиләле булып йәшәгәндәр бихисап. Хәҙер йәштәрҙең аңы икесерәк барыбер ҙә. Улар барлыҡҡа, муллыҡҡа ынтыла белә. Эскелекте һанламайҙар. Эскелек менән ҡунаҡлашыу, эскелек артында аралашыу модаһы юҡ тиерлек улар араһында.

Мин үҙем дә урыҫтар араһында йәшәгән, эшләгән, уларҙы яҡын күргән кешеләрем байтаҡ. Шул уҡ ваҡытта башҡорттарҙың да ҡул бирмәҫтәйҙәре юҡ түгел.

Милләттең төп проблемаһы үҙен кәм итеп тойоуында ул. Шуның өсөн белемле булырға, телеңде-рухыңды һаҡларға, башҡалар араһында кәм-хур булмаҫтай йәшәй һәм эшләй белергә кәрәк. Әгәр һин үҙеңде кәм итеп тоймайһың, тартынмайһың, ҡурҡмайһың икән - һине берәү ҙә кәмһетә алмай.

Шул уҡ ваҡытта милли хәрәкәттәр ҙә булһын ул. Әгәр беҙ был хәрәкәтте үҙебеҙҙә ойоштормайбыҙ икән, Рязань йәки Орел өлкәһендә башҡорт милләтен йәшәтеү өсөн көрәшеп йөрөмәйәсәкбеҙ бит инде. Бары был хәрәкәттең ынтылыштарында башҡаларҙы түбәнһетеү түгел, ә үҙебеҙҙе йәшәтеү сәйәсәте ятһын. Һәм реаль эштәр кәрәк. Буш хәбәр һөйләү мәле үтте.

**Һеҙҙе үтә талапсан кеше, тиҙәр. Был һыҙат һеҙҙең йәшәү прицибымы, әллә был эшмәкәрлек һыҙаты ғынамы? Һәм был эштә, өйҙә, башҡа мөнәсәбәттәрҙә нисек сағыла?**

**Бәхетле ир, ғаилә башлығы була алырлыҡ, шул халәткә өлгәшерлек егеттәрҙе нисек тәрбиәләргә икән?**

- Бының өсөн уландарҙа, хеҙмәт һәм яуаплылыҡ менән сыныҡтырып, спортҡа ылыҡтырып, рух ныҡлығы тәрбиәләргә кәрәк. Рух ныҡлығы иһә уның үҙ телендә һөйләшә, йырҙар тыңлай, әкиәттәр һөйләй, шәжәрәһен белеүенән башлана. Айыҡ аҡыллы, белемле булыуға өлгәшкәс, тормош иптәше һайлағанда үҙ милләтенә өҫтөнлөк бирерлек аң да булырға тейеш. Сит өлкәлә уҡыған саҡта күп кенә иптәш егеттәр башҡа милләт ҡыҙҙарына өйләнде һәм шуларҙың яртыһынан күбеһе күңел тыныслығы таба алманы, тип әйтер инем. Сит менталитет, сит тел һәм быларға бәйле башҡа мөнәсәбәттәр, йыйыла-йыйыла барып, уларҙы эстән яндырҙы. Яҙмыштарының ошо трагедияһын уларҙың күбеһе олоғайғас ҡына аңланы...

**Интернет селтәрҙәрендә төрки халыҡтары берлеге тураһында хәбәрҙәр йөрөй. Был идеяға нисек ҡарайһығыҙ?**

**фекерендә булдырыу өсөн ниндәй сифаттарға өлгәшергә йәки ниндәй тәртиптәргә өйрәнергә кәрәк буласаҡ?**

- Иң беренсе сиратта, йәштәр белемле булырға тейеш. Бер генә төрлө белем аҙ хәҙер, мотлаҡ бернисә йүнәлештәге белемде үҙләштерергә кәрәк буласаҡ. Һәм ул белем дә ҡағыҙҙа ғына булмаһын. Белемле икәнлекте йәшереп булмай бит ул, йәки белемһеҙ көйө күҙ буяу ҙа шунда уҡ күҙгә ташлана.

Эсмәҫкә кәрәк. Эсеү, хатта күңел өсөн генә эсеү ҙә, яйлап тормошоңа ағыуын ебәрәсәк. Һин үҙең айыҡ аҡыл менән йәшәгәндә генә, башҡаларҙан да нимәлер талап итә алаçаҡһың. Үҙ-үҙеңә талапсан булыу мотлаҡ. Башта үҙеңә, унан башҡаларға. Һүҙ менән генә булмай, үҙ өлгөңдә күрһәтергә кәрәк бар яҡшы эштәрҙе һәм ҡылыҡтарҙы. Тағы ла бер кәңәш: милләттәштәреңде тартыу кәрәк. Ҡайҙалыр ерегеп эшләү һәм йәшәү өсөн, юғары урындарҙа ултырыу, етәкселек вазифаларын уңышлы биләү өсөн беҙгә бер-беребеҙҙе күтәрә,

# БӘПЛӘРГӘ ЯРАМАЙ,

## дөрөҫ йүнәлеш бирергә генә кәрәк

уңында тотоп, түләүле бүлектә уҡыусыларға төрлө ташламалар, ятаҡ хаҡынмы, тукланыу хаҡынмы бушлай итеү юлдары, түңәрәктәрҙә түләүһеҙ өҫтәмә һөнәр үҙләштереү алымдары ҡарала. Беҙгә килеп ингән йәш кешене нисек тә юғары белемле, заманға ҡулайлаша алғандай һөнәрмән итеп сығарырға тырышабыҙ. Уҡыған кеше - уҡыған кеше бит, уның тәғәйен эше, ашы була. Шунлыҡтан, халҡыбыҙҙың мал көсө менән булһа ла балаларын уҡытырға, һөнәрле итергә ынтылыуын хуплайым.

Әлбиттә, ситтән дә килеүселәр байтаҡ. Миҫал өсөн, әлеге көндә Екатеринбург ҡалаһынан ғына ла ун туғыҙ йәш кеше ситтән тороп уҡый. Ырымбур, Силәбе, Ханты-Манси өлкәләренән яҡташтарыбыҙҙы, милләттәштәребеҙҙе уҡырға саҡырабыҙ. Беҙҙең үҙенсәлек тә шунда - миллилекте юғары тотабыҙ. Әгәр миллилек булмаһа, беҙ башҡа йөҙәрләгән уҡыу йорттары кеүек уҡ булып, юғалып ҡаласаҡбыҙ. Бына уҡыу йортонда йыл һайын һабантуй үткәреүҙе генә алайыҡ. Бындай йола байрамы башҡа уҡыу йорттарында үткәрелмәй. Беҙ иһә, белем алыусы йәштәребеҙ, киләсәктәге уҡытыусылар, етәкселәр, белгестәр ошо йоланы белеп-күреп, халыҡты ойоштороусы бер сара икәнен аңлап, артабан үҙҙәре лә ошоно уҡ үҙ тәжрибәләрендә ҡулланһындар өсөн ойоштораbыҙ.

Үрҙә әйтелгәнсә, башта бер тулҡын булып уҡып сыҡҡандар бөгөн балаларын, хатта ейәндәрен уҡыта беҙҙә. Бына ошоларҙан сығып ҡына ла, Сибай институты үҙ бурыстарын тулыһынса башҡара, һәм ул киләсәктә лә

Йәштәргә тормош теҙгене ышанып тапшырырғамы, юҡмы, тигән һорау бөтөнләй торорға тейеш түгел. Киреһенсә, уларға үҙ замандарының хужаһы икәнен иртәрәк төшөндөрөргә һәм шул яуаплылыҡты елкәләренә һалырға кәрәк. Иртәрәк бешекһен, яраҡлашһын, сыныҡһын улар. Йәштәрҙең көслө һәм аңлы икәнен күреп торам, барыһы ла күҙ алдында. Курсаларға, бәпләргә кәрәкмәй уларҙы, киреһенсә, алға ебәрергә лә, арттан ҡарап, өйрәтеп, дөрөҫ йүнәлеш бирергә кәрәк. Ошо быуын ҡулында үҫкән быуын тағы ла шәберәк булыр һәм шулай итеп милләт үҙ сәләмәтлегенә ҡайтыр, тип ышанам.

**Урал аръяғында күберәк башҡорт милләте йәшәй һәм бөтөн ерҙә лә ошо милли рух өҫтөнлөк итә. Хатта был төбәктә йәшәп, башҡорт булыуы ла рәхәтерәк һымаҡ. Әммә республиканың башҡа төбәктәрендә йәки сит өлкәләрҙә башҡорт булыу ауырыраҡ. "Милләтсе" тигән мөһөр алыу бер ни тормай хәҙер. Һеҙҙе ҡурҡытамы ошондай һүҙ?**

- Юҡ, мине бындай һүҙ ҡурҡытмай. Мин үҙ милләтемде яратам, ҡурсалайым, уның киләсәге өсөн борсолам. Һәм, әлбиттә, һайлау торғанда һәр ваҡыт үҙ милләтемә өҫтөнлөк бирәсәкмен. Башҡа милләттәрҙең беҙҙең ерҙә йәшәп, беҙҙең һыуҙы эсеп тә беҙҙе кәмһетергә тырышыуына ҡаршымын. Партия заманында ла ундайҙарға өҙә һуҡтым, әле лә аямайым. Тик мин һуҡырҙарса милләтселекте лә өнәмәйем. Урыҫ, татар һәм башҡа милләттәр араһында ла хөрмәт иткән,

- Шулай тиҙәрме?.. Мин ысынлап та бары сифатлы хеҙмәт тәҡдим итә алырҙай кешеләрҙе генә яратам. Шул ғына. Быны мин үҙемдән дә талап итәм. Эргәмдәге йәштәргә эшләтергә өйрәтәм, уларға өйрәнергә, аңларға ваҡыт бирәм. Ниндәйҙер арала улар быны ҡабул итә икән - әйҙәләйем, ҡабул итмәй икән - хушлашабыҙ. Ваҡыт уҙһын, сабата туҙһын, тип йөрөүселәр минең командала була алмай.

**Ғаилә ниндәй роль уйнай һеҙҙең тормошта?**

- Ғаилә - ул тыл, тиһәм, бәлки, тапалғаныраҡ та булыр, әммә хәҡиҡәт шулай. Бигерәк тә ир кеше өсөн ғаилә арҡа һөйәге кеүек була. Был һөйәк ныҡлы икән - ул да ныҡ. Мәҫәлән, арып эштән ҡайтҡан ирҙе өйҙә насар ҡараш, ашһыҙ өҫтәл, көйһөҙ ҡатын ҡаршы алһа, ул икенсе көн эштә лә кәйефһеҙ, дәртһеҙ буласаҡ. Бик күп булдыҡлы, белемле, көслө ир-егеттәрҙе беләм, тик улар ғаиләләре ныҡлы булмауы сәбәпле, энергияларын икенсе юҫыҡҡа сарыфлап, юғалып ҡалдылар. Был мәсьәләлә ҡараш бик етди булырға тейеш.

Айһылыу апайығыҙ менән ғаиләләге ир һәм ҡатын бурыстарын, яуаплылыҡтарҙы баштан уҡ дөрөҫ ҡуя алдыҡ. Уның ҡатын-ҡыҙ аҡылы яйлағандыр быны, тип уйлайым. Мин уға үҙемә ышанғандай ышанып, таянып өйрәнгәнмен. Эштә ниндәй генә хәлдәр, донъяла ниндәй генә ауырлыҡтар булғанда ла, өйөмә ҡайтып тыныслыҡ табырмын беләм. Әлеге йәшемдән, тәжрибәмдән сығып әйтә алам - ир кеше өсөн был ҙур бәхет.

- Төрки халыҡтары берлеге лә булырға тейештер, бәлки. Тик шул берлек эсенә инеп юғалмаҫҡа, милләт булып ҡала белергә кәрәк. Югиһә, башҡаларҙан бөйөгөрәк булырға ынтылған милләттәр ҙә бар бит. Унан һуң, интернетта күтәрелгән идея-тәҡдимдәрҙең күптәре сәләмәт булмаған сәйәсәткә ҡоролған, шуларға эйәрергә ярамай. Көслө һәм үҙаллы милләт булыуға өлгәшә алһаҡ, башҡа рухташ халыҡтар үҙҙәре уҡ дуҫлыҡ ҡулын һуҙасаҡ. Тик шуны ла онотторға ярамай: ҡасандыр миллионға яҡын башҡорт үҙ-үҙен ҡорбан итеп, автономия төҙөмәһә, бөгөн башҡа республикаларҙың автономиялары булыр инеме икән? Шулай уҡ, миҫал өсөн, 1812 йылғы һуғышты ғына алайыҡ. Нимәгә кәрәк булған ул бер милләттән 28 полк? Ҡайһы туғандаш милләттән ул ҡәҙәре яугирҙар яуға күтәрелгән? Һуңғы һуғышты ҡарағыҙ: нимәгә кәрәк булған кавалерия дивизияһы ойоштороп, һыбайлыларҙы танктарға ҡаршы ташлау? Ниңә ундай атлы ғәскәрҙе башҡалар бирмәгән? Улар ҙа ат менә белгән төрки халыҡтары түгелме ни?

Бына ошоларҙы иҫтә тоторға кәрәк ниндәйҙер берлек, ойошма эсенә инергә ҡарар итерҙән алда. Һаман да үҙебеҙҙе алғы һыҙыҡҡа ташлар ҡорал ғына итмәйек. Элитабыҙҙы ҡорбан итеүгә юл ҡуймайыҡ. Бындай фиҙаҡәрлек нисек кенә ғорурлыҡ уятмаһын, ғорурлыҡ менән генә йәшәп булмай хәҙер. Бөгөн аҡыл, белем, дин һәм, әлбиттә, рух алға ҡуйыла. Зәки Вәлиди ҙа беҙгә шуларҙы васыят иткән.

**Йәштәргә тормошта үҙ юлын табыу, табыу ғына түгел, ул юлда ышаныслы атлай алыу, карьера яһау, йәмғиәттә хөрмәт ҡаҙаныу, яҡын-тирәләгеләрҙең ышанысын яулау, үҙ һүҙең һәм**

яҡлай, тарта белеү зарур. Бөгөн был төшөнсә бик етди ҡабул ителергә тейеш.

**Бөгөн милли матбуғаттың хәле еңелдән түгел. Тәрбиәүи сараларҙың береһе буларак, уларҙың кәмеүе йәки юҡҡа сығыуы ни ҡәҙәр зыянлы булыр ине, һеҙҙеңсә?**

- Милләткә ҡәҙерле булған тел, моң, йола, аҡыл кеүек изге төшөнсәләрҙе кәметкән кеүек уҡ кимәлдә зыянлы булыр ине. Мәҫәлән, бына "Киске Өфө"нөң рухи ҡиммәттәребеҙҙе пропагандалауҙағы хеҙмәтен юғары баһалайым һәм ул гәзиттән яҙған уҡыусының рухи һайығыу кисеререн яҡшы беләм. Шуның кеүек, һәр милли баҫма үҙ урынында үҙ ролен үтәй. Киләсәктә лә балалар өсөн тәғәйенләнгән матбуғат баҫмаһы - бәләкәстәр донъяһына, йәштәрҙеке - йәштәргә, оларҙыҡы тейешле уҡыусыһына барып етһен һәм ихтыяжын ҡәнәғәтләндерһен. Был тәңгәлдә милли баҫмаларҙа Хөкүмәт тарафынан яҡлау ҡаралырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта һәр учреждение, предприятие, ойошма уларҙы алдырып, милли мәҙәниәтте йәшәтеүҙә үҙ өлөшөн индерһен ине...

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Бөтөн ошо әңгәмәләшеүгә Зиннур Ғөбәйҙулла улы миңә ҡырҡ минут ваҡыт бүлгәйне. Ул ваҡыт эсендә нисек итеп әңгәмә ойоштороп өлгөрөргә икән, тип борсолғайным да, борсолоуым юҡҡа булды: Зиннур Ғөбәйҙулла улының профессионаллеге, тәжрибәһе, күңелендәге һәм тел осондағы әйтер һүҙе бер тынала бер епкә теҙелде лә ҡуйҙы. Был миңә үҙенә күрә бер дәрес булды. Үҙеңдән һәм кешенең ваҡытын ҡәҙерләй белеү дәресе.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

✓ *Хөрмәтулланың ҡолағы ҡарп итеп ҡалды. Байрас менән Сания мәктәптә уҡыған саҡта уҡ бер-береһенә битараф түгелдәр ине. Ул саҡта уҡ уларҙы кейәү менән килен тип ирештерә торғайнылар.*





Ғәлим ХИСАМОВ

# Көтөлмәгән туй

(Хикәйә)

Хөрмәтулла Баҡыртау ҡалаһында һөнәрселек училищеһын тамамлағас, фабрикала эшләне, ошонан әрмегә китте, өс йыл хеҙмәт иткәндән һуң, шунда кире ҡайтты. Яҙ ҡайтып эшләй башлағайны, көҙөн колхозға эшкә ебәрҙеләр. Ул йылды иген уңғайны, ауылда ашлыҡты урып-һуғырға, йыйып бураға һалырға эшсе ҡул етешмәй. Ҡалалағы предприятиеларҙан ауылға ярҙамға кешеләр ебәрергә булдылар. Ураҡ менән сүкеш берлеге бит. Слесарҙар цехында йәрәбә Хөрмәтуллаға төштө. Уны ебәрмәй, бүтән кемде ебәрһендәр ике айға төп эштән айырып? Хөрмәтулланың ғаиләһе юҡ, тимәк, өйҙә (дөрөҫөрәге ятаҡта) илап балаһы көтмәй. Өҫтәүенә, Хөрмәтулла ауыл балаһы, ундағы эште лә, тормошто ла белә, өйрәтеп тораһы түгел.

Ошо ике айҙы тултырҙы ла эшкә барып күренде һәм ялға атаһы, әсәһе янына ҡайтып китте. Ул саҡта Ҡыуандыҡ, Ейәнсура һәм башҡа ауылдарҙан сыҡҡан күп кеше Баҡыртауҙа эшләй, йәшәй торғайны. Иң яҡын ҡала булғанға, кейем-һалым алырға ла шунда йөрөнөләр. Хөрмәтулла үҙҙәре яғына барған поезд вагонына ингәйне, күрше ауылдан Фәүзәт ағай менән ҡатыны ултыра.

- Яҡташтар ҙа бында икән, - тип барып күреште Хөрмәтулла.

- Эйе, - тине ир кеше. - Бына тегенеһен- быныһын алырға гурытҡа барҙыҡ. Көҙ етте бит. Балаларҙың өҫтөнә кәрәк. - Ҡатынының өндәшмәй ултырғанын шәйләп, - Сәриә, һин Хөрмәтте танымайһыңмы ни? Ейәнсурала Сания менән бергә уҡынылар.

-Ә-ә, - тине ҡатын, әммә асылып китмәне.

- Сания ни эшләй? Күптән күргән дә юҡ, - тине Хөрмәтулла.

- Ул да ҡалаға китте. Туҡыу фабрикаһында эшләй.

- Кейәүгә барманымы һуң әле?

- Юҡ. Яңыраҡ үҙебеҙҙең ауыл Байрастан яусы килгәйне лә, бирмәнек.

Хөрмәтулланың ҡолағы ҡарп итеп ҡалды. Байрас менән Сания мәктәптә уҡыған саҡта уҡ бер-береһенә битараф түгелдәр ине. Ул саҡта уҡ уларҙы кейәү менән килен тип ирештерә торғайнылар. Ни эшләп бирмәнеләр икән һуң Байраҫҡа?

- Күрәләтә нисек бирәһең инде? Ул өйҙә Байрастан башҡа алты бала бар. Иң өлкәне Байрас, - ҡатын Хөрмәтулла ышанмай ҡуйыр тигән һымаҡ, һәр һүҙенә баҫым яһап, ныҡлап аңлатты. - Унда килен булып төштөниһә, Сания ҡол була ла ҡуя инде. Байрастың әсәһе сирләшкә генә, теге алтауҙы ҡарарға кәрәк бит. Өҫтәүенә, күбеһе малайҙар.

- Ә беҙҙең балалар икәү генә бит. Сания иркә генә үҫте, - ир ҙә ҡатынын яҡлашты.

- Ярар, Байраҫҡа бирмәһә ни, ҡыҙыбыҙҙың йәше үтеп бармай әле. Уның матурлығы менән утыҙҙа ла сират торорҙар.

- Мин алам, тиһәм, бирер инегеҙме? - Хөрмәтулла был һүҙҙең ауыҙынан нисек сығып киткәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды, шикелле. Ләкин әйтелгәйне ине инде. Осоролған сәпсекте кире тота алмайһың.

Фәүзәт менән Сәриә ялт итеп Хөрмәтуллаға ҡараны. Бик үк оҙон булмаһа ла кәүҙәгә мыҡты ғына, түңәрәк бите килешле генә, тулҡынланып торған сәсен артҡа тараған. Ошондай сәсте ярата Сәриә, юҡһа, иренең сәсе ике бөртөк кенә, асыуым да килмәгәйе, уныһы ла һарғылт. Ҡырын тараған була ла, түбәһендәге таҙын аса ла ҡуя.

- Әлләсе... - тип һуҙҙы ҡатын.

- Һеҙ атайың менән әсәйеңдә бишәүме әле? - тип асыҡлыҡ индерергә булды Фәүзәт.

- Юҡ, беҙ дүрт бала. Ике ағайым, бер апайым бар. Мин - кинйә.

- Үҫеп бөткәндәр икән, - ҡатындың тауышы йомшаҡ ҡына сыҡты.

- Үҫеп бөтөү генә түгел, үҙҙәренең балалары бар, айырым торалар. Мин ҡырҙа булғас, атайым менән әсәйем өйҙә икәһе генә.

- Һин ҡала кешеһе булып бөттөңмө инде? - Фәүзәттең дә тауышы һәүетемсә тыныс ҡына сыҡты. Былар кирегә боролоп китмәһен, тип, егет ышаныслы һөйләргә тырышты:

- Әрмегә тиклем Баҡыртауҙа ике йыл эшләгәйнем. Ҡайтҡас та һаман шундамын.

- Ятаҡта тораһыңмы? - Сәриәнең тауышы һағайыулы ине.

- Эйе, ятаҡта. Өйләнмәгән кешеләрҙең бөтөнөһө лә ятаҡта йәшәй. Өйләндениһәләр, шундуҡ фатирлы булалар.

- Эш хаҡың күпме һуң?

- Йөҙ һум сыға айына.

- Оho, Байрастыҡы 35 һум ине. Үҙенең ашауынан артмай.

Байрастың эш хаҡы күберәк икәнен белә ине Хөрмәтулла. Училищела ла бергә уҡынылар, бер үк фабрикала эшләйҙәр бит. Ләкин тегене яҡлап, аныҡлыҡ индереп торманы.

Сանияның атаһы менән әсәһе бер аҙ шым ултырҙы.

- Һинең атайың ветеринармы әле? - тип ҡыҙыҡһынды ҡатын. Хөрмәтулла урынына ире яуап бирҙе.

- Эйе, беләм мин уны. Силсәүит тә булды, һатыусы ла, агент булып, иҫке-моҫҡо ла йыйҙы. Ветеринарлығы тыумыштан инде. Уның ҡулы тейгән мал, үлергә ятһа ла, тороп китә. Хәтерләйһеңдер, беҙҙең һыйыр ашлыҡ ашап, эсе күбеп тәгәрәгәс, ул әллә нимә генә эшләтте, теге шәбәйеп китте. Ә бит күпме кешенең малы ҡазаланды.

Вагондағы кешеләр хәрәкәтләнә, төшөргә йыйына башланы. Ир менән ҡатын да сумкаларын барланы. Шунда Фәүзәт Хөрмәтуллаға боролдо.

- Һинең һүҙгә Сания ни әйтер икән һуң?

Хөрмәтулла яуырындарын һикертте.

- Мәктәптә уҡыған саҡта уҡ күҙем төшә торғайны. Ул Байрас менән йөрөгәс, араларына инмәнем.

- Ярар, уйларбыҙ, - Фәүзәт һүҙҙең бөткәнен аңлатып, нәмәләрен ҡулына алды, ул арала поезд тәгәрмәстәре лә сыйлашып барып туҡтаны.

Ейәнсура станциянан алыҫ түгел. Хөрмәтулла йүгерә-атлай ҡайтып инде. Солан иҙәнендә аяҡ кейеменең күплегенә ҡарап, атайымдар ҡунаҡ йыйғандар икән, тип уйланы. Өй ишеген асыу менән уны күрше урамда йәшәгән Зәбилә күрҙе. Был ни эшләп йөрөй икән бында? Зәбилә йылп итеп ҡашығаяҡ яҡҡа инеп китте. Ундағы ҡатын-ҡыҙға өндәшә һалды:

- Хөрмәтулла ҡайтҡан.

Быны егет тә ишетте. Элек Хөрмәт ти ҙә ҡуя торғайны. Быға ни булған, тип кенә уйлап өлгөрҙө, уңарсы булмай, әсәһе килеп сыҡты. Улының арҡаһынан тупылдатып һөйөп:

- Минең улым үҙе лә ҡайтып инде,- тип, яңылыҡты өйгә тултырҙы. Хөрмәтулланың атаһы килеп сыҡты, уның артынан Зәбиләнең атаһы, әсәһе сығып, егет менән күреште. Ирҙәр матур ғына ҡыҙмаса булып алған. Өҫтәлдә бал һала торған стакандар күренә. Был ниткән байрам икән? Зәбиләнең нәҫел-ырыуы менән атайымдар бик яҡынлап аралашмай торғайны ла баһа, тип ҡуйҙы Хөрмәтулла эстән генә.

Яңы ҡунаҡ килгәс, табынды яңырттылар ҙа киренән һикегә ултырыштылар. Тик Зәбилә генә өйҙөң ҙур яғына, ҡунаҡтар араһына сығып күренмәне.

Хөрмәтуллаға атаһы әсе бал һалынған стакан тотторҙо. Быныһы инәлтмәне, төп күтәреп эсте лә:

- Атай, мин өйләнәм. Шуны әйтергә ҡайттым, - тине.

- Өйлән шул. Һин өйләнһен тип мәшәҡәтләнеп ултырабыҙ бына беҙ. Үҙең тапмағас, ҡыҙҙы бына беҙ таптыҡ.

Шунда барыһын да аңланы Хөрмәтулла. Атаһы менән әсәһе яҙ әрменән ҡайтҡас та, өйләндерәбеҙ, тип бер булғайны. Ул саҡта өйләнергә күҙе төшкән ҡыҙы юҡ ине Хөрмәтулланың. Шулай тигәс, шымғайны атай менән әсәһе. Әле бит былар Зәбиләне уға әйттерергә булып, ҡоҙа - ҡоҙағый менән танышыу табыны ҡорған икән да баһа!

- Юҡ, ул түгел, - Хөрмәтулла өйҙөң бәләкәй яғында йөрөгән Зәбиләгә баш иҙәне.- Ул түгел.

- Кемде алыр китәһең һуң һин?

Өй шып-шым булып ҡалды.

- Күрше ауылдан Фәүзәттең ҡыҙы Санияны.

- Тирә-яҡта бер сибәр, тип һөйләйҙәр, шунымы ни?

- Эйе, шуны.

- Ауыҙың бәлеш түгел, үҙемә оҡшап. Әсәһе, ишетәһеңме, улың ни һөйләй?

Хөрмәтулланың әсәһе ҙур яҡтың ишегенән башын ғына тығып ҡараны ла ҡунаҡтар яғына ымланы. Кеше алдында нимә һөйләгәнеңде аңғарып ултыр, тийеүе ине. Әммә ир быны аңламаны, шикелле, һаман үҙенекен итте.

- Ул килен булһа, беҙҙең өй ҙә бүтәнгә әйләнер ине.

Атаһының башҡа юҫыҡҡа борола башлағанын тойған Хөрмәтулла:

- Атай, Санияны һорап яусы ебәрәйек, - тип ысҡындырҙы.

- Ә нимәһе? Дөрөҫ. Тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға кәрәк. Әсәһе, бар Мәфтүхаға әйт: яусы булһын. Ат менән күрше ауылға үҙем алып барам. Һөйләшеп бөткәнен Хәйернисаларға инеп көтөп торормон, Фәүзәткә күрше генә бит. - Тора һалып, ат егергә сығып та китте. Ҡашығаяҡ яғында Зәбилә, уның әсәһе мышҡылдашып илай ине. Зәбиләнең атаһы ҡайтырға була ишеккә йүнәлде. Уға өй хужаһы:

- Мин һине былай ғына "ҡоҙа" тиер ҙә ҡуйырмын. Туй ашына ла әйттерермен, килерһең, йәме, - тип өндәште.

Тегенеһе ҡулын ғына һелтәне лә, өндәшмәйенсә, ҡайтып китте. Кешеләр таралышҡас, Хөрмәтулланың әсәһе үпкәләне:

- Эй, иҫәрһегеҙ ҙә инде. Үҙенән алда нимәһе ҡысҡырған, тигәндәй, кешене саҡыр ҙа, битенән көлөп сығарып ебәр. Шул булдымы ирлек?

- Кеше алдында яҡшатланам тип, балаң ғүмер буйы оҡшатмаған кешеһе менән йәшәһенме? Тегенең, исмаһам, ҡарайым тиһәң - бите, тотам тиһәң...

- Ҡайтып, дау һалдың да ул. Ә атай менән әсәйҙең туй яһарлыҡ хәле бармы һуң, шуныһын уйланыңмы? - Әсәй кеше иң һуңғы, әммә кәттә дәлилде сығарҙы.

- Ул яғын уйлағанмын инде, сығымдарҙы үҙем күтәрәм. Ике ай колхозда йөрөгәндә фабрик эш хаҡының өстән икеһен түләйем тине, 200 һум тирәһе була ул. Хеҙмәт өсөн колхоз 2 центнер иген бирә, бер ат йөгө ҡауын-ҡарбуз тейә. Шул туйға етмәйме ни?

- Ит яғын үҙем ҡайғыртам. Ике-өс һарыҡты йығам да һуям, - атай ҙа үҙ дәлилен ҡуйҙы.

Ыштанының һыңар балағын күтәргән, икенсеһен ергә һөйрәлтә яҙғанса төшөргән Мәфтүха ҡарсыҡты ултыртып сығып киткән йорт хужаһы бер нисә сәғәттән боролоп та ҡайтты. Былай тиҙ йөрөгәс, юлдары уңмағандыр, тип ҡыуанған ҡатыны йүгереп сығып ҡапҡа асҡайны, арбанан төшөр-төшмәҫтән ир ҡысҡырып та ебәрҙе:

- Ҡатын, эш беште. Фәүзәттең Санияһы беҙҙеке. Туй, мәһәр, бирнә - барыһы тураһында ла һөйләштек, килештек. Һал ашыңды, ҡайнат самауырыңды, саҡыр ағай-энене. Ҡасан кейәүләү, ҡасан туй - шуны һөйләшәбеҙ.

Әсәһе ауыҙын ҡымтыны ла ҡушҡанды эшләргә тотондо, Хөрмәтулла үҙе, ауыҙы йырылып, һарай башына менеп китте. Уның шунда ятып йөрөй торған урыны бар. Ятып, хыялға батырға булды.

- Ирмен тигән иргә ҡаршы торор кәртә бармы ни ул? - Шулай һөйләнә-һөйләнә, Мәфтүха ҡарсыҡ үпкәһен йөҙҙөргәнсе эсерлек сәйгә өмөт итеп, өйгә инеп китте.

* * *

Ҡыҙ яғында туйҙы ике өйҙә үткәрергә булдылар. Ололар төп ҡоҙаның өйөндә йыйылыр, йәштәр айырым Хөрмәтулланың апаһы Хәйернисаларҙың өйөндә ултырыр, тинеләр. Хөрмәтулла кәләш алыу мәшәҡәттәрен Баҡыртауҙа эш хаҡы алып, магазиндарҙан кәрәкле әйберҙәрҙе йыйыуҙан башланы. Буласаҡ ҡайны менән ҡәйнәһенән башлап, ҡайнағаларына, ҡайынеңгәләренә арыу ғына бүләк алды. Ҡәйнеш, балдыҙҙарына бәке, тараҡ кеүек ваҡ-төйәген йыйҙы, кейәү күстәнәсе тип ике литр араҡы ла алды, шешәләренең муйынына ҡыҙыл таҫма бәйләтте. Аш-һыуҙы был юлы ҡыҙҙың атай, әсәйе хәстәрләй, шуға Хөрмәтулла был турала уйланманы. Иң ҡыйыны, кәләшкә күлдәк һайлау булды. Әҙер тегелгәнен алыр инең, ярайлы-юҡмы уға, ҡайҙан беләһең. Үҙе тегеп кейер, тип, ситсаһын ғына алыуҙы ла килештермәне. Уны ҡасан бестерә лә, ҡасан тектерә әле. Ә туй көнө етеп килә. Туйҙа кейәү бүләген кейеп ултырырға тейеш бит инде кәләш. Эҙләнә торғас, бик матур асыҡ зәңгәр төҫлө

күлдәккә барып юлыҡты. Хаҡы ла арыу инде, тик уныһына ҡарап тораһыңмы ни Сания сибәрҙе алғанда. Күлдәктең билдеге лә бар. Бер һүҙ менән әйткәндә, килешергә тейеш был күләшкә. Штапель күлдәк кемгә әлегә әле? Ә үҙе ағаһының костюмын кейеп торор. Ағаһы Мәскәүгә хеҙмәт алдынғыларының слетына барғанда алған. Хатта-хатта матур.

Хәйернисаның өйөнә ике өҫтәл ҡуйҙылар. Береһе тирәләп Санияның ауылдаштары ултырыр, икенсеһе Хөрмәтулла менән килгән егеттәргә тәғәйен. Кейәү менән кәләш тә шунда. Санияны ла, Хөрмәтулланы ла оҙон ҡолаҡтар иҫкәртте: ҡыҙ яғынан килгән егеттәр ыҙғыш сығарырға, Хөрмәтулланы ла дөмбәҫләргә йыйыналар. Бәлки, эсенә бысаҡ та тығырҙар әле. Араларында төрмәнән ҡайтҡан береү ҙә бар, ти. Ыҙғыш башында Санияның элекке йәре Байрас тора, ти. Ҡыҙ үҙенә әләкмәгәс, Хөрмәтуллаға ла тәтемәһен, тигән, имеш. Һуйһам - һуям, һуйылһам - һуйылам, әммә бүтәнгә бирмәйем. Хөрмәтулла менән Сания ла үҙҙәренсә сараһын күрҙе. Егет үҙ нәҫелендәге иң үткер, иң һуғышсан егеттәрҙе алып килде. Кемдең ҡасан нимә эшләргә тейешлеген билдәләп ҡуйҙылар. Байрастарҙың тәүҙә үҙ-ара ыҙғыш сығарып, шунан егет яғын һуғышҡа индереп ебәрергә уйлағаны ла билдәле булды.

Сания ҡыҙ менән егет йәрәшә торған өйҙә нығ йәшерен әҙерләне. Бөрәү ҙә белмәслек иттеләр. Байрастың туй мәжлесендә быларға һөжүме барып сыҡмаһа, йәрәш йортона йүгерәсәге көн кеүек асыҡ бит инде. Шуға бер кемгә лә белдермәҫкә тырышты.

Мәжлес башланды. Кейәү егете менән ҡыҙҙың әхирәте ултала. Йәштәрҙе улар һыйлай. Туй менән ҡотлап ике стакан әсе балды түнәрәккә төшөрөп ебәрҙеләр. Тәүҙә кейәү менән кәләш эсемлеккә тел тигеҙеп кенә бирҙеләр. Шулай тейеш. Уларҙың бөгөн нәҫел яралғыландыраһы бар. Киләсәк таҙа, эскелекһеҙ булырға тейеш.

Иң түрҙәге мөйөшкә һырығып Байрас ултыра, һонтор кәүҙәһен бөксәйткән, күтәрелеп бөрәүгә лә ҡарамай, һүҙ ҙә ҡушмай. Сираты килеп еткәс, стаканды тартып алып, бер тында төп күтәргәнсе эсте лә, тағы ҡой, тип ишараланы. Тиҙерәк ҡыҙмаса булып, ҡара уйын ашырмаҡсы инде. Икенсегә стакан бирмәнеләр быға. Күршеһенә һонолған ҡулға һуҡты ла ебәрҙе был. Бал китте сәсрәп, стакан ашамлыҡ өҫтөнә барып төштө.

- Нишләйһең ул! Кейемде лыс бал иттең! - тип ҡысҡырҙы кемдер. Берәүһе икенсеһенең яғаһынан матҡыны.

Кейәү яғындағылар аңланы: Байрастыҡылар ыҙғыш башланы. Күрше ауылдан килеүселәр һикереп кенә торҙо ла эргәләге өҫтәл тирәһендәгеләрҙең кемен муйынынан һыҡты, кеменең ҡулын шаҡарып бәйләне.

Шау-шыу, орош-бәреш башланыу менән теге матур штапель күлдәкте кейгән Сания Хөрмәтулланың ҡулынан етәкләп алды һәм:

- Әйҙә! - тип тышҡа һөйрәне. Хөрмәтулла ҡарышманы. Бер нисә минуттан былар һарай артына сығып, баҡсалар буйлап, ауылдың осона ҡарай йүгерә ине инде. Ҡараңғы төндә ҡыҙҙың штапеле ялт-йолт итеп бара, арттан эйәргән егеттең костюм һиҙәбе эленмәгәнлектән, аҡ күлдәге генә сырамытыла.

Сания Хөрмәтулланы икенсе урамдың осона уҡ килтерҙе. Бәләкәй генә өй. Ҡараңғы, күҙгә төртһәң дә күренерлек түгел. Сания, һәрмәнеп, һикене тапты, егеттең етәкләнгән ҡулына түшәктең мөйөшөн тоттторҙо.

- Сисен, ят! Мин хәҙер киләм, күлдәкте генә сисәм дә...

Хөрмәтулла сыр ялағас ҡалғансы сисенеп, кейемен ҡайҙалыр ҡараңғыға быраҡтырҙы ла, түшәккә сумды. Күп тә үтмәне, унын кеүек үк яланғас ҡыҙ егеттең ҡуйынына һырылды... Ир кәләшен үпте, иркәләне, тәнен һыйпаны. Ҡулы арҡаһындағы миңгә тейҙе, шуны тотоп та ҡараны, бармаҡ осо менән дә, усы менән дә ышҡыны. Кәләшенең иң нығ билдәһе шул, тип уйланы, ахырыһы.

Хөрмәтулла уянып киткәндә, түшәктә яңғыҙ ята ине. Бәләкәй генә тәҙрәләрҙән тоноҡ яҡты төшә. Мейес арьғындағы ҡашығаяҡ яҡта кемдер ҡыштырҙай. Унын йөҙөн күрмәһә лә күлдәген күреп ҡалды: кәләше йөрөй, сәй хәстәрләйҙер инде.

Шул саҡ шығырлап ишек асылды, кемдер инде.

- Хәйерле иртә, йәштәр! - тип сәләмләне инеүсе. - Тороғоҙ. Сәй эсегеҙ ҙә кейәү мунсаһына барығыҙ. - Шунан Хөрмәтулланың юрған осонан тартты. - Кейәү, тор! Кәләш ҡуйыны тәмлелер ҙә ул, һыуынмаҫ борон, мунсаға барыр кәрәк.

Кемдең тауышы был, шул тиклем таныш, тип ятты тәүҙә Хөрмәтулла. Шунан күҙен асып ҡараһа, Сания тора.

- Үҙең мунса яғып йөрөйһөңме ни? - тип һораны Хөрмәтулла.

- Шулай итмәй булмай. Кәләшенә мунса яғырға ярамай әле.

- Һин дә инде минең кәләш.

- Түгел шул, бына һинең кәләшең. - Штапель күлдәк кейгән кеше Хөрмәтулланың янына килеп баҫты. - Зәбилә!

- Танымай ҙа торһыңмы кәләшеңде? - Сания көлдө. - Ҡараңғыла битен дә күрмәгәнһеңдер инде. Өҫтәүенә, бит ҡайғыһы ла булмағандыр...

- Күрмәһә лә, һәрмәп таный инде ул. Минең арҡалағы миңде эй һыпаны, эй һыйпаны...

- Миндә ундай миң юҡ.

Ул арала булмай, йәнә ишек асылды, ир кеше килеп инде.

- Сания, әйҙә йәһәтерәк, - тип ҡабаланырҙы. - Поезға һуңлайбыҙ.

Быныһын шунда уҡ таныны Хөрмәтулла. Байрас бит.

Сания менән Байрас сығып китте. Ни хәл булғанын һаман төшөнөп бөтмәгән Хөрмәтулланы Зәбилә саҡырҙы:

- Ирекәйем, ҡоймаҡ бешерҙем, әйҙә, сәй эсәйек!

Ҡоймаҡты ярата Хөрмәтулла, ҡайһылайтып баш тартһын. Тороп кейенә башланы...

ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ

# ҮҘЕБЕҘ ТУРАҺЫНДА ҮҘЕБЕҘ

**"Өфөнән һөйөү менән!" - шулай тип атала яңы башҡорт фильмы. Лирик комедия апрелдән республика кинотеатрҙарында күрһәтелә башлаясаҡ. Нимә тураһында һуң был фильм? Ошо һорауға яуап эҙләп, фильмдың режиссеры Айнур АСҠАРОВҡа мөрәжәғәт иттек.**



**➔ Донъя, шулай уҡ Рәсәй кинематографияһында ниндәйҙер билдәле бер ҡала исеме менән бәйле фильмдар байтаҡ ҡына. "Өфөнән һөйөү менән!" фильмы Өфө тураһындамы?**

- Һис шикһеҙ, Өфө тураһында ла. Өфө бит ул төрлө, ҡайһы саҡта ҡәтғи, усал, йәлләй белмәй, ҡайһы саҡта - мәрхәмәтле. Фильмда ҡала айырым бер персонаж кеүек. Беҙҙең геройҙар бөтәһе лә Өфөлә йәшәй һәм бөтөн ваҡиғалар Өфөлә бара. Шуға ла кино шулай тип атала. Өфө тураһында фильм төшөрөүҙең төп маҡсаттарының береһе - уны тотош Рәсәйгә танытыу. Унан һуң, баш ҡала булараҡ, Өфө беҙгә яҡын, беҙ уны яратабыҙ, уға ҡарап һоҡланабыҙ. Уға беренсе ҡараштан уҡ ғашиҡ булаһың һәм был тойғо һине бер ҡасан да ташламай.

Кино төшөрөү мәле Өфөлә киң масштаблы мәҙәни саралар тура килде. Геройҙар Симфоник төн, Дизайн-Маркетта "ҡатнашты", шуға ла күп кеше кадрға эләкте. Шул уҡ Симфоник төнгә тиң лә меңәрләгән тамашасы килгәйне. Шуға ла фильмда күптәр үҙен таныуы ла ихтимал, үтеп барыусы машиналар, урам буйлап йөрөүсе йәйәүлеләр, мәҙәни сарала ял итеүселәр үҙҙәре лә һиҙмәҫтән "кино геройҙары"на әүерелде. "Киноға кил һәм ҙур экранда рҙа үҙеңде тап!" - фильмдың бер слоганы юҡҡа ғына шулай яңғырамай.

**➔ Был - Һеҙ төшөргән һәм, ғөмүмән, башҡорт кинематографияһында һуңғы йылдарҙағы беренсе тулы метрлы фильм. Ниндәй ауырлыҡтар менән осрашырға тура килде?**

- Ижадсы өсөн ҡыҫҡа метрлы һәм тулы метрлы фильм төшөрөү араһында айырма ул тиклем түгел, сөнки икеһе лә ижади ҡараш, тырышлыҡ, көс, ныҡышмалылыҡ талап итә. Шулай ҙа тулы метрлы фильмды төшөрөү ауырыраҡ. Ваҡыт арауығы менән иҫәпләгәндә, мәҫәлән, фильмды 70 көн буйы төшөрҙөк, уға тиклем 2-3 ай әҙерләндек, ярты йыл инде монтаж, ҡорау эштәре бара. Өфөлә генә 40 урында төшөрҙөк, шуға ла ваҡыт һуҙылып китте. Былтырғы йәй күптәргә эҫе һауа торошо менән хәтерҙәрендә уйылып ҡалһа, беҙ уны ҡыҙыу һәм ҡыҙыҡлы эш мәле итеп иҫләйбеҙ. Картинаның матди яғына килгәндә, ул Башҡортостан Башлығының грантына төшөрөлдө. Унын суммаһы 4,5 млн һум. Был тулы метрлы кино өсөн бик аҙ күләм, шулай ҙа бюджет бәләкәй тип, эшкә илке-һалҡы ҡараманыҡ. Киреһенсә, команда бөтөн тырышлыҡты һалып эшләне һәм ул ҡиммәтле фильм кеүек күренә.

**➔ Милли кинематографтың берҙән-бер етди проблемаһы ҡалды, ул да булһа, республика тамашасыһының урында төшөрөлгән фильмдарға ышанмауы, тиҙәр. Был дөрөҫмө?**

- Бөгөнгө көндә сит илдән индерелгән аҙыҡ-түлекте урындағы продукция менән алыштырыу кәрәк, тип күп һөйләнелһә лә, фермерҙар етештергән продукция магазин кәштәләрендә юҡ тиерлек, сөнки эре сауҙа үҙәктәре уларҙы алмай. Кинола ла шулай уҡ. Кинотеатр - ул шул уҡ магазин, ул тамашасыларға фильм тәҡдим итә. Әммә улар үҙебеҙҙә төшөрөлгән фильмдарҙы прокатҡа алмай, был бөгөнгө көндә ҙур проблема. Беҙ сифатлы кино, әйтәйек, хатта шул уҡ "Форсаж"ды төшөрһәк тә, кинотеатрға әлегә алмаясаҡбыҙ, сөнки прокат эшмәкәрлеге беҙгә буйһонмай. Республика кинотеатрҙарының расписаниеһын Екатеринбург, Мәскәү, Санкт-Петербург төҙөй, ә улар иһә Голливуд фильмдарына өҫтөнлөк бирә. Урындағы кинотеатрҙар беҙҙең киноны алырға теләһә лә, ала алмаясаҡ, сөнки прокат Голливуд фильмдары менән тулған. Икенсенән, тамашасы ла әлегә милли киноларға ышанмай. Башҡорт киноһы тураһында ғына һүҙ бармай бында, Рәсәйҙә төшөрөлгән һәр кино насар тиген фекерҙә күптәр. Был ҡараш менән дә йәйлап көрәшергә, күберәк тамашасыларҙы милли кино менән таныштырырға кәрәк. Йәйлап был хәлдән сығырбыҙ, тием, һәм тамашасылар урында төшөрөлгән яңы картиналарҙы һағынып көтөп ала башлар. Был фильмдың яҙмышына килгәндә, Өфөнөң 5 кинотеатрында ул 13 апрелдән күрһәтелә башлай, шулай уҡ республиканың 3-4 ҙур кинотеатрында, шулай уҡ район үҙәктәрендә урынлашҡан һәм кино күрһәтеү ҡоролмалары булған мәҙәниәт һарайҙарында уны ҡарау мөмкинлеге булыр, моғайын. Тиҙҙән Ҡазанға "Яңы кино" форумына барасаҡбыҙ, бәлки, күрше республикала ла уны прокатҡа сығарып булыр, әлегә Татарстандың бер кинотеатры менән килешеү бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт киноһының яҙмышы - һеҙҙең ҡулығыҙҙа, тип өндәшәбеҙ тағы бер тапҡыр тамашасыларға. Башҡорт кинематографияһы юҡ ул, тип өйҙә ултырғансы, бер тапҡыр барып ҡарау яҡшыраҡ икәнен үҙегеҙ ҙә аңлап торһағыҙбыҙ. Сөнки "Өфөнән һөйөү менән!" фильмы ул Өфө генә түгел, һеҙҙең һәм беҙҙең турала ла!**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

✓ *Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# НАСАР ЕҪЛЕ... рауза

■ Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмы әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй.

■ Гарвард университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡайнар какао ҡулланыу ҡарттарҙың баш мейеһе торошон һәм хәтерен яҡшырта. Ғалимдар быны какао составындағы флавоноидтар менән бәйләй. Һынауҙарҙа уртаса 73 йәшлек кешеләр ҡатнашҡан. Ай дауамында улар көнөнә ике тапҡыр какао эскән. Асыҡланыуынса, бынан һуң уларҙың баш мейеһендә ҡан әйләнеше яҡшырған, хәтерҙәре нығынған. Какао тромбтар һәм насар холестерин, ҡан тамырҙары системаһы ялҡынһыныуын булдырмай.

■ Рухи сәләмәтлек нигеҙендә ябай ғына ҡағиҙәләр ята, тип белдерә белгестәр. Уның беренсеһе булып кеше эшенә ҡыҫылмау тора. Донъяла бер төрлө фекер йөрөткән, бер төрлө булған кешеләр юҡ - Аллаһы Тәғәлә беҙҙе төрлө итеп яратҡан. Шуға ла үҙ дөрөҫлөгөндө кешегә көсләп тағырға кәрәкмәй. Ғәфү итә һәм онота белеү - күңел тыныслығына өлгәшеү өсөн һөҙөмтәле сара. Тормош шул тиклем ҡыҫҡа, ҡасандыр кемдер һеҙҙе рәнйеткән өсөн йөрәктә таш йөрөтөү уны мәғәнәһеҙерәк итәсәк. Өсөнсө кәңәш - йәмғиәттә абруй яуларға ынтылмағыҙ. Донъяла эгоистар шул тиклем күп, шәхси мәнфәғәтен алға ҡуйыусы бер ҡасан да башҡаларҙы баһаламаясаҡ. Етмәһә, бөтөн яҡтан камил кешеләр булмай, шулай булғас, ни өсөн һеҙ үҙегеҙ кеүек үк кешенең маҡтауына лайыҡһығыҙ? Көнләшеү, башҡаларҙы үҙгәртергә тырышыу ҙа рухи тыныслыҡҡа эйә булырға ҡамасаулаясаҡ.

■ Боронғо гректар һарымһаҡты насар еҫле рауза тип йөрөткән. Йәғни, ҡырҡыу еҫе - был йәшелсәнең берҙән-бер кире яғы. Борондан һарымһаҡ изге ризыҡ иҫәпләнгән. Һарымһаҡты бысаҡ менән ҡырҡһаң, аллицин тигән берләшмә барлыҡҡа килә, был матдәне 1944 йылда Америка белгестәре асҡан һәм ул тәбиғи антибиотик иҫәпләнә. Ғалимдар раҫлауынса, аллицин ҡан тамырҙары һәм йөрәк эшмәкәрлеген яҡшырта, ҡандың липид составын нормаға килтерә, артериаль ҡан баҫымын яйлай, яман шештән һаҡлай. Аллициндан тыш, һарымһаҡта А витамины күп, ул күреү һәләтенә йоғонто яһай, РР витамины депрессия һәм йоҡоһоҙлоҡтан һаҡлай. Һарымһаҡта ла, һуғанда ла фитонцидтар күп, ул күп вирустарҙы юҡҡа сығара.

■ Бөйөк Британия ғалимдары ҡояштың ультрафиолет нурҙарының тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған. Ҡояшлы көндә асыҡ һауала ҡыҫҡа ваҡытта ғына булыу ҙа артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә икән. Табиптар раҫлауынса, ультрафиолет нурҙары тәьҫирендә тире күҙәнәктәре азот молекулаларын синтезлаусы ферменттарҙы артығыраҡ эшләп сығара. Был матдә ҡанда күтәрелгәс, ҡан тамырҙары киңәйә һәм ҡан баҫымы түбәнәйә. Юғары ҡан баҫымы инсульт һәм инфарктҡа килтереүсе төп сәбәп булыуын иҫәпкә алғанда, "ҡояш ванна"лары кешенең ғүмерен оҙайта.

*ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП*

**Тула һуғыу кейеҙ баҫыуға бер аҙ оҡшаған. Йөн еп киндер йәки сүс ебе кеүек үк әҙерләнә. Башҡорттар Беренсе донъя һуғышына тиклемге йылдарҙа уҡ еп иләүестәр менән файҙаланмаған, ә ҡолға менән орсоҡ ҡына ҡулланған. Башҡорттарҙың ҡолғаһы бер йәки ике өлөштән торған. Тура мөйөш менән бөгөлгән ағас киҫәге тапһалар, тимәк, ҡолға бер өлөштән тора булып сыға. Уның йыуан яғын нигеҙ өсөн яҫы итеп бысалар, ә нәҙегерәк өлөшөн таяу итеп ҡалдыралар. Ә яҫы итеп бысылған ағас киҫәгенең бер осонан тишек яһап, уға ҡолғаның таяуын ҡуйып нығытһалар, тимәк, ҡолға ике өлөштән тора. Орсоҡтар башлыса ҡулдан яһалған, ә токарь станогында эшләнгән орсоҡтар Беренсе донъя һуғышы алдынан ғына ҡулланыла башлаған.**

# ТУЛА СӘКМӘН, ТУЛА ИТЕК

## халҡыбыҙҙың кейгәне...



Әҙерләнгән йөн йомарламын ҡолға таяуының өҫкө осона бәйләйҙәр. Иләүсе ҡолғаның нигеҙенә ултыра. Һул ҡулдың баш һәм һуҡ бармаҡтары менән йөн йомғағынан нәҙек кенә йөндө тартып сығара, ә уң ҡулы менән орсоҡто туҡтауһыҙ өйөрөлтә.

Орсоҡ тулғас, йомғаҡты алып, ҡайтанан иләйҙәр. Йөн иләү менән, ғәҙәттә, өлкән йәштәге ҡатындар шөғөлләнә, әммә был, йәштәр йөн иләү менән шөғөлләнмәй, тигән һүҙ түгел. Йөндөң күләменә ҡарап, хужабикә йә үҙе генә иләй, йә кемделер яллай. Кеше яллаһа инде, иләнгәнептең оҙонлоғона ҡарап, хаҡын түләй. Иләү берәмеге баҫма тип атала.

Иләүҙе иртә яҙҙан башлайҙар. Беренсе эш - еп уратыу, йәғни туҡыу станогында уралғанептең оҙонлоғона, шулай уҡ эшкәртелгән туланың оҙонлоғона тап килтереп,ептең оҙонлоғон билдәләйҙәр. Өйҙөң стенаһына бер-береһенән билдәле бер алыҫлыҡта, стенанан 25-30 см оҙонлоҡта сығып торған ағас ҡаҙауҙар ҡағыла. Ҡаҙауҙарҙың иҫәбе епте ниндәй оҙонлоҡта әҙерләүгә бәйле. Мәҫәлән, еп оҙонлоғо 24 см булһа, стенаға 9 ҡаҙау ҡағырға кәрәк. Киргәндән һуң, ептәрҙе көрөгә индереүгә һәм тараҡҡа бүлеүгә, һуңынан епте туҡыу станогының артҡы клинкетына йәки сығырына урауға күсәләр.

Был түбәндәгесә башҡарыла: еп остарын сығырҙың эсендә ҡулайлаштырылған ағас планкаға бәйләйҙәр һәм иләнгән йөндө тигеҙ итеп артҡы клинкетҡа урайҙар. Бер кеше әле тағатылмаған йомғаҡтарҙан билдәле бер алыҫлыҡта элмәктәрҙе ысҡындыра.

Ҡаптан артҡы клинкетҡа уралған ептәрҙе, көрөҫ һәм тараҡтар аша тартып, алғы клинкетҡа нығыталар. Төп еп - буй, ә иләнгән йөн - арҡау тип атала. Хәҙер инде еп туҡыу өсөн әҙер. Көрөҫтө башҡорттар ғәҙәттә үҙҙәре әҙерләй, ә тараҡты эшләүе ҡатмарлыраҡ, шулай ҙа уның рамын һәм яңағын үҙҙәре яһай.

Иләнгән филтә ебен һәм арҡау ебен ҡалтырсаға нығытып бәйләйҙәр. Был 15 см оҙонлоғондағы шүрегә иләнгән епте һоҫаға һыйырлыҡ күләмдә урайҙар. Әҙерләнгән шүрене ҡаты ағастан яһалған нәҙек күсәргә кейҙерәләр ҙә, был күсәрҙе һоҫаның эсенә беркетәләр, бында шүре хәрәкәтһеҙ күсәр тирәләй әйләнә. Туҡыу артабан билдәле ысул буйынса башҡарыла.

Туланы һуғып бөткәс тә ул әле ҡулланыуға әҙер түгел. Хәҙер уны баҫыуға әҙерләйҙәр. Тәүҙә ҙур ҡаҙанда һыу ҡайнаталар. Ҡайнаған һыуҙы ялғашҡа ҡойоп, туланы өҫтөнә һыу сығырлыҡ итеп батыралар. Бер аҙ ятҡас, туланы ҡайнар һыуҙан алалар ҙа, 3-4 см диаметрлы тишектәр яһалған махсус таҡтаға һарҡытыу өсөн йәйеп һалалар. Тула баҫыу менән шөғөлләнеүсе кеше ултырған эскәмйәнең тояҡтары ялғаштың ҡырыйына терәтеп ҡуйыла һәм махсус таҡтаға ла таяу хеҙмәтен үтәй. Эҫе һәм еүеш туланың һыуы тишектәр аша ялғашҡа ағып төшә. Ситтәрен ҡул менән һығырға мөмкин. Туланы тигеҙләү һәм һыуын һығып сығарыу өсөн өҫтөн ялан аяҡлап тапайҙар. Был эште башҡарған ваҡытта тағы ла һыу ҡайнатырға ҡуялар. Һыуыған туланы тағы ла ҡайнар һыуға тығып алып, ҡайтанан шул уҡ процесс башҡарыла. Тула тейешенсә тығыҙланғанға тиклем, ҡабат-ҡабат шулай һыулап, ошо ысул менән һыуын һығып сығаралар. Һыуын һығып сығарыу бер үк ваҡытта уны йыуып таҙартыу ҙа булып тора. Тапаған ваҡытта туланы тартҡылап киреп тә алалар. Был эш барышында туланың оҙонлоғон, киңлеген үлсәп торалар. Кәрәгенсә тығыҙайғас, уны таяҡҡа урайҙар ҙа, кейеҙ баҫҡандағы кеүек, йоҙроҡлап төйәләр.

Баҫып бөткәс, ике яғын ҡушып, типсеп сығалар һәм бейек урынға элеп, туланы киреү өсөн бөкләнгән еренән эсенә ауыр әйбер һалып сығалар. Шул көйөнсә тулыһынса кипкәнсе элеүле тора.

Баҫыу оҙайлығы йөндөң сифатына бәйле. Әгәр тулала яҙғы йөн күберәк булһа, оҙағыраҡ баҫалар, көҙгө йөн күберәк булһа, артыҡ оҙаҡ баҫмайҙар (сөнки көҙгө йөн тиҙ һуҙыла). Әҙер туланың киңлеге - 40-46 см.

Туланан, ғәҙәттә, эслекһеҙ генә пальто тегәләр. Ирҙәр өсөн аҡ туланан байрамдарҙа кейә торған сәкмән теккәндәр. Ала, һары, һоро туланы эш кейемдәре тегеү өсөн ҡулланғандар. Йәш ҡыҙҙар ап-аҡтан йәки уны төрлө төҫкә буяп, үҙҙәренә матур кейемдәр теккән. Туланы итек ҡуңыстары өсөн дә файҙаланғандар, ҡуңысын киң итеп тегеп, тубыҡ аҫтынан ҡысмау, ҡуңысбау менән бәйләп ҡуйғандар.

**Ғәлимйән ТАҒАН.**
**("Этнографические заметки о башкирах и других тюркских народах" китабынан).**

*ТӘҘРӘ ТӨБӨМ...*

# КИВИ ӨЙҘӘ ЛӘ ҮҪӘ



**Өйҙә киви үҫтереп ҡарарға теләһәгеҙ, март - май айҙары бының өсөн иң ҡулайлы ваҡыт. Магазинда яҡшы бешкән киви емешен һайлап алығыҙ. Ул йомшаҡ, тигеҙ булырға тейеш.**

Емеште йыуырға ла, бер нисә өлөшкә ҡырҡырға. Иплəп кенә иҙгәс, йылы һыулы стаканға һалырға, болғатырға һәм орлоҡтар һыуҙың өҫтөнә йөҙөп сыҡҡансы көтөргә. Орлоҡтарҙы һөҙөп алырға ла, тағы ла бер нисә ҡат йыуырға. Мамыҡҡа урап, ҡайнар һыу ҡойоп, өҫтөн полиэтилен менән ҡаплап, ҡояшлы йылы урынға ҡуйырға. Төнгөлөккә полиэтиленды алырға, иртән өҫтәп һыу ҡойорға кәрәк. 7-10 көндән орлоҡтар шытып сығасаҡ.

Гөл ултырта торған көршәктең төбөнә керамзит йә таш, уның өҫтөнән тропик лианалар өсөн һатылған әҙер тупраҡ һалырға. 5-10 мм тәрәнлектәге соҡорҙарға 2-3-әр орлоҡ һалырға ла, өҫтөнә еңелсә тупраҡ һибергә. Йылы һыу һипкәс, полиэтилен менән ҡапларға, йылы урынға ҡуйырға. 3-6 көндән тәүге шытымдар күренәсәк. Насарҙарын, сибектәрен шунда уҡ йолҡоп торорға кәрәк. Һыуҙы самалап һибәләр. Яҙ, йәй мәлендә аҙнаһына 2 тапҡыр етә, ҡышын айына 2-3 тапҡыр ғына һибергә мөмкин. Киви үҫемлегенең тамыр системаһы әүҙем үҫешә, 10-12 см бейеклеккә еткәс, уларҙы айырып ултыртырға кәрәк буласаҡ. Яҡшы ҡарау булғанда киви өсөнсө, дүртенсе йылына сәскә ата һәм емеш бирә.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИРҘЕҢ ИҢ ҘУР ЛӘҘЗӘТЕ...

## тоғро ҡатын булыр



**Исламда никах йән тыныслығы табыу сараһы булараҡ ҡарала. Никах - үҙ-ара ярҙамлашыу, эскерһеҙлек һәм түҙемлелек принциптарына таянып, һөйөү һәм наҙға сорнап балалар тәрбиәләү һәм бәхетле мосолман ғаиләһе ҡороу маҡсатында бер-береһен яраткан һәм йәлләгән ир менән ҡатындың бергәләп йәшәүе. Изге Ҡөрьән ир менән ҡатын араһындағы тәбиғи бәйләнештәрҙе бик матур итеп һүрәтләй, һәм беҙҙең күҙ алдына һөйөү, үҙ-ара аңлашыу һәм шәфҡәтлелек менән һуғарылған тыныс, имен ғаилә тормошо баҫа.**

Хыянатһыҙ, тоғро ҡатын Исламда Аллаһы Тәғәләнең иргә биргән иң ҙур ләззәттәренең береһе һәм мәрхәмәте итеп ҡарала, сөнки ир унда күңел тыныслығы таба. Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Был донъя ваҡытлыса файҙаланыуға бирелә, ә унан алырға мөмкин булғандың иң яҡшыһы - тоғро ҡатын".

Никахҡа һәм ҡатын-ҡыҙға ошондай юғары ҡараштарҙан сығып, ысын мосолман ҡайһы бер хәҙерге заман ҡыҙҙарының тышҡы буш һәм ялтырауыҡ әйберҙәренә ҡыҙыҡмай. Уның ҡарауы, ул һәр яҡлап камил шәхес булған мосолман ҡыҙына тартыла. Ғөмүмән, никах ныҡлы булһын өсөн, ғаиләне тән, аҡыл, рух һәм тойғо талаптарын иҫәпкә алып төҙөргә кәрәк.

Ислам иргә ҡатынына яҡшы мөғәмәлә күрһәтергә ҡуша, башҡа бер диндә лә ҡатынға бындай юғары урын бирелмәй. Бәйғәмбәр ирҙәргә мөрәжәғәт итеп: "Ҡатын-ҡыҙҙарға һәр ваҡыт яҡшы мөғәмәләлә булығыҙ, сөнки улар ысынлап та ҡабырғанан яһалған, ә ҡабырғаның өҫкө өлөшө ҡыйыш була, һәм әгәр һин уны төҙәйтергә маташһаң, һынып ҡуйыуы ихтимал, ә әгәр тыныслыҡта ҡалдырһаң, ул шулай ҡыйыш көйөнсә ҡаласаҡ, шуға күрә һәр ваҡыт яҡшы мөғәмәлә итегеҙ", - тигән.

Икенсе бер хәҙистә былай тиелгән: "Ысынында ҡатын-ҡыҙ ҡабырғанан яһалған, һәм ул бер ваҡытта ла бер нисек тә һинең өсөн төҙәймәйәсәк. Әгәр уның менән ләззәтләнәһең килә икән, ҡыйышлығына ҡарамай, ләззәтлән, ә инде төҙәйтергә маташаһың икән, һындырасаҡһың, һындырыу - уның менән айырылышыу, тигән һүҙ".

Был миҫалда ҡатын-ҡыҙҙың асылына һәм уның тәбиғәтенә асыҡ аңлатма бирелә. Йәғни ул ире теләгәнсә турая алмай, һәм өйләнгән мосолман был үҙенсәлектең тыумыштан булыуын белергә һәм уны үҙе теләгәнсә камиллаштырырға маташмаҫҡа тейеш. Ҡатын-ҡыҙ холҡо үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, Аллаһы Тәғәлә уны нисек итеп яратһа, шулай итеп ҡабул итергә кәрәк.

Ысын мосолман - ул идеаль ир. Ҡатыны, оҙаҡ йылдар бергә йәшәһәләр ҙә, уның менән аралашыуҙан, уның йомшаҡлығынан һәм баҫалҡылығынан кинәнеп бөтә алмай. Өйгә ҡайтып ингәс тә ул ҡатынын, балаларын, Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанса, ихлас күңелдән йылмайып сәләмләй. Быныу менән ул ғаиләһенә кәйеф күтәренкелеге, шатлыҡ, бәхет нуры алып инә. Ҡатынының ярҙамға мохтажлығын күрһә, ярҙам ҡулы һуҙа, нимәгәләр зарланһа, йомшаҡ ҡына йыуата. Иренең ышанып арҡа терәрлек, көслө, изге күңелле, миһырбанлы булыуын тойоп йәшәү ҡатынды сикһеҙ бәхетле итә.

Динле һәм аҡыллы мосолман, башҡа наҙан ирҙәр кеүек, ашты үҙе теләгәнсә бешермәгән йәки ваҡытында әҙерләмәгән өсөн дә, башҡа ошондай сәбәптәр арҡаһында ла тулып бармай. Ул үҙ ҡатынын ихтирам итеүҙән тыш, уның әхирәттәренә лә хөрмәт күрһәтә.

**Ысын ғаилә башлығы булған мосолман:**

● Аллаһы Тәғәләнең ярлыҡауын алырға ынтылып, мосолман ғаиләһенә ҡағылған һәм ҡатыны ышанып һөйләгән бөтә серҙәрен һаҡларға тырыша, сөнки быны шәриғәт ҡанунды ры талап итә. Бынан тыш, ул ҡатыны менән яҡшы мөнәсәбәттәрен ныҡытыу, әйләнә-тирәһендәгеләрҙең ихтирамын яулау өсөн дә шулай эшләй;

● Мосолман ҡатынын кешеләр алдында уңайһыҙ хәлгә ҡалдырмауҙы өҫтөн күрә, әгәр тәртибен оҡшатмай иҫкәрмә яһар йәки нидәйҙер хатаһын төҙәтер булһа, быны өсөн уңайлы урынын һәм ваҡытын табырға тырыша;

● Үрҙә әйтелгәндәрҙе иҫәпкә алып, мосолман ҡатынының туғандарын рәнйетмәскә тырышырға тейеш, сөнки быны менән ул ҡатынын уңайһыҙ хәлгә ҡуясаҡ һәм кәмһетәсәк;

● Шулай уҡ ул үҙ ата-әсәһен һәм туғандарын да хөрмәт итергә, уларҙы тыңларға тейеш.

Ир ҡатынының ихтирамын яулаһа, ҡатыны уның ихтыярынан тыш бер нәмә лә эшләмәйәсәк. Сөнки Ислам ирҙән ҡатынына яҡшы мөнәсәбәт талап итеү менән бер рәттән, ҡатын-ҡыҙға иренә буйһонорға ҡуша. Был Бәйғәмбәребеҙҙең түбәндәге һүҙҙәрендә асыҡ күренә: "Әгәр минә кешеләрҙең береһенә икенсеһе алдында баш эйергә ҡушырға тура килһә, мин, әлбиттә, ҡатынына ире алдында баш эйергә ҡушыр инем!"

Унан да бигерәк, Бәйғәмбәр, ир үҙ ҡатынынан ҡәнәғәт ҡалһа, бындай ҡатындың урыны ожмахта буласаҡ, ти.

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

# АЙЫРМА БАР...



**Баҡтиһаң, ике енес араһындағы айырма енси ағзалар менән генә сикләнмәй икән.**

**Мейе.** Ғәҙиҙә булараҡ, ир-ат бары тик бер мәсьәләне хәл итеүгә генә иғтибар йүнәлтә ала, ә ҡатын-ҡыҙ шул уҡ ваҡытта бер нисә мәсьәләне бер юлы хәл итә. Бында сәбәп мейе ҡоролошонда: ҡатын-ҡыҙҙа уң һәм һул ярымшарҙарҙы тоташтырып тороусы нейрон епсәләре күберәк. Ир-аттарҙан айырмалы, ҡатын-ҡыҙҙарҙың тел үҙәктәре ике ярымшарҙа ла бар, шуға улар телдәрҙе енелерәк үҙләштерә.

**Һығылмалылыҡ һәм көүҙә.** Ҡатын-ҡыҙҙың муйыны һығылмалыраҡ. Шуға күрә, артҡа бороп өсөн улар башын ғына борһа, ир-атҡа тотош көүҙә менән борорға кәрәк.

**Тире.** Юҡҡа ғына ир-атты "ҡалын тиреле" тимәйҙәр. Ысынлап та, уларҙың тиреһе ғүҙәл зат менән сағыштырғанда ҡалыныраҡ, шуға күрә унда һырҙар бик күренмәй. Өҫтәүенә, ҡатын-ҡыҙ тиреһе бик иртә ҡартая. Был йәш үҙгәреүенә бәйле: 35 йәштән һуң организмда коллаген эшләнеүгә йоғонто яһаған эстроген гормоны кәмей.

**Еҫ тойоу.** Ҡатын-ҡыҙҙар еҫтәрҙе яҡшыраҡ тоя һәм уларҙы яҡшыраҡ айыра. Шуға күрә ғүҙәл заттың еҫле майҙар, хушбуйҙар, еҫле май һалынған ванна инеүҙе яратыуына аптырайһы түгел.

**Төҫ айырыу.** Ҡатын-ҡыҙ 100 миллионға тиклем төҫ айырһа, ир-ат хатта ҡыҙыл менән йәшел араһындағы айырманы ла күрмәүе мөмкин. Быны ни өсөн ҡатын-ҡыҙҙар араһында дальтониктар юҡ! Уның ҡарауы, ир-аттар иң ваҡ яҙыуҙы ла таный һәм ҡараңғыла яҡшыраҡ күрә!

**Интим өлкә.** Ни тиклем ҡыҙыҡ булмаһын, ир-ат менән ҡатын-ҡыҙҙың енси ағзалары бер ни тиклем оҡшаш. Ләкин ҡатын-ҡыҙға ләззәт татыу өсөн ир-атҡа ҡарағанда биш тапҡырға күберәк ваҡыт кәрәк!

**Енси гормондар.** Ҡатын-ҡыҙҙың түллек ағзаһы эстроген - тәндәге үҙгәрештәр өсөн яуаплы гормондар эшләп сығара. Ир-ат организмы ла был гормонды етештерә, әммә аҙ күләмдә. Эстрогендың файҙаһы бик ҙур: ул ауыр холестерин күләмен кәметә, баш мейеһенең сәләмәт торошон тәьмин итә, һөйәк туҡымаһында кальций тупланыуына йоғонто яһай, матдәләр алышыныуын тиҙләтә, тиреһе сәләмәт торошта тота, нервылар системаһы эшмәкәрлеген нормаллаштыра.

**Генетика.** Ир-ат нәҫелдән килгән сирҙәр менән йышыраҡ ауырый, сөнки уларҙың Х-хромосомаһы бәрәү, ә ҡатын-ҡыҙҙа - икәү. Зарарланған Х-хромосомалар гемофилияға һәм дальтонизмға, шулай уҡ пеләшләнеүгә килтерә. Пеләшләнеү процесында төп роль уйнаған гормон - андроген рецепторҙары тап Х-хромосомала ла инде.

**Алкоголь ҡулланыу.** Ҡатын-ҡыҙ организмында алкоголде эшкәртеүсе фермент - алкогольдегидрогеназа әҙерәк эшләнелә. Уның ҡарауы, ғүҙәл затта алкоголгә бәйлелек тә кәмерәк.

**Сәләмәт йөрәк.** Ҡатын-ҡыҙ ҡан тамырҙарын һаҡлаусы эстрогендар арҡаһында оҙағыраҡ йәшәй. Менопауза осоро еткәнсе улар ир-атҡа ҡарағанда йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына, шул иҫәптән инфаркт һәм инсультҡа һирәк дусар була.

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Ыңғай раҫлауҙар ижади көстө азат итә

Әйтелгән һүҙҙәр хистәргә, кәйефкә, ышаныҫҡа һәм тормош тәжрибәһенә ҙур йоғонто яһай. Быға тиклем кире раҫлауҙар нисек итеп беҙҙе уңышһыҙлыҡҡа, күңел ҡайтыуына, ярлылыҡҡа, төшөнкөлөккә һәм сирҙәргә программалауы тураһында һөйләнек. Ниндәй ҡарар ҡабул итәһегеҙ? Ул бик ауыр ҙа түгел. Бары тик кире процесты ғына ҡулланығыҙ. Аңығыҙҙы көслө һүҙҙәр һәм раҫлауҙар менән тултырығыҙ.

Түбәндә килтерелгән раҫлауҙар һеҙҙең көслө яҡтарығыҙҙы һүрәтләй, аңды ыңғайға көйләй, һеҙҙең кем булыуығыҙҙы һәм кем була алыуығыҙҙы билдәләй. Ошо йәки шуға оҡшаш һүҙҙәрҙе төпкө аңығыҙҙы программалау һәм хыялығыҙҙағы тормошто булдырыу өсөн ҡулланығыҙ.

## Ыңғай фекерҙәр менән ҡоралланығыҙ

● Был мәл минең алдымда сикһеҙ мөмкинлектәр аса, сөнки мин сикһеҙ ысын тормошта йәшәйем.

● Мин кем була алам - шул кеше әле үк аңымдың бер өлөшө булып тора.

● Мин хәҙер үк үҙемдең сикһеҙ мөмкинлектәремде ҡабул итергә әҙер.

● Мин мөмкинлектәремдең сикһеҙлеген асыҡ аңлайым. Фекерем әлеге ваҡытҡа тупланған, әлеге ваҡытты күрәм, көтөүем дә әлеге мәлдә.

● Тормошома ыңғайға көйләнгән кешеләрҙе генә индереүгә өҫтөнлөк бирәм.

● Ҡуҙаллау мөмкинлеге биргән көстө ни тиклем ныҡыраҡ тоям, шул тиклем уны тормошҡа ашырыу көсөн һиҙәм.

● Мин башҡаларға үҙ хыялдарын тормошҡа ашырыуҙы һорамайым, әммә һәр кем минең хыялдарымды тормошҡа ашырыу каналы булып тороуын һәм Сикһеҙлек улар ярҙамында барыһын да эшләйәсәген таныйым.

● Мин универсаль аңға әйә кеше, шуға күрә ҡайҙа нимә белергә тейешлегемде беләм. Был белем төпкө аңымдан томаналыҡты ҡыуып сығара.

● Мин уңышлы һәм ышаныслы, сөнки эске көскә аңымды дәртләндерергә, уны хәрәкәткә килтерергә рөхсәт итәм.

● Минең ғәмәлдәрем аңлылығымдың логик эҙемтәһе. Барлыҡ башланғыстарымды ла уңыш көтә. Тормоштоң барлыҡ өлкәһендә лә уңышҡа өлгәшергә һәләтлемен.

● Барлыҡ яңы ысулдарға һәм идеяларға асыҡмын һәм уларҙы ҡабул итәм.

● Ижади шәхес булараҡ, теләгемә өлгәшеү юлын беләм.

● Мин интеллектуаль һәм эмоциональ йәһәттән үҙем һәм тирә-яҡтағылар өсөн уңайлылыҡ тыуҙырыуға йүнәлеш алғанмын. Мин дуҫлыҡ мөнәсәбәтендәге Ғаләмдә йәшәйем, ул минең үтенестәремә яуап бирә һәм хыялдарымды тормошҡа ашыра.

● Мәһаймайынса, рухи камил шәхесмен, тип әйтә алам. Аңым сәләмәт һәм унан ҡәнәғәтлек алам. Миндә ҡурҡыу һәм үкенеү тойғоһо юҡ. Миндә йәшәү көсө бар. Мин үҙ-үҙемә ышанам.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

БЕЛЕМ УСАҒЫ



# УНЫҢ ИЖАДЫ ЛА...

## тәрбиәләй беҙҙе

**Өфө ҡалаһы Зәйнәб Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһында йыл да әҙибәнең тормош юлы, ижадына арналған конкурс ойоштоттола килә. Быйылғы ижади проекттар конкурсында ҡатнашып, еңеү яулаған уҡыусылар менән ябай ғына бер темаға - олуғ шәхескә арналған ярыштың һөҙөмтәләре һәм уның исемен йөрөткән белем усағы тураһында һөйләштек.**

***Ҡарлуғас Исмәғилева, З. Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһы уҡыусыһы:*** "З. Биишеваның тормош юлы һәм ижады" республика ижади проекттар конкурсында быйыл да республиканың төрлө районларынан уҡыусылар ҡатнашты, алты секция эшләне. Конкурс һәр йылда төрлө темаға бағышлана. Быйыл мин үҙем "Яҡтыға" трилогияһында шәхес үҫешенә йоғонто яһаусы шарттар" темаһына доклад яһаным. Күп балалы ғаиләлә, үгәй әсә ҡулында тәрбиәләнгән ҡыҙ баланың характеры, рухи тәрбиә һәм донъяға ҡараш булдырыуҙа йәмғиәт - ауыл кешеләре һәм таныш-белештәр йоғонтоһо ниндәй булыуын анализланым. Сөнки Зәйнәб Биишеваның әҫәрҙәрендә һүрәтләнгән осраҡтар, етем балаларҙың яҙмышы бөгөнгө көндә лә бик актуаль проблемаларҙың береһе булып ҡала килә. Беҙҙең секцияла ҡатнашҡан башҡа конкурсанттар трилогияла ҡатын-ҡыҙ образы нисек сағылдырылыуға арналған докладтар яһаны. Бер ҡыҙ әҫәрҙә ой эсенең нисек йыһазланғанын өйрәнгән, хатта матур итеп һүрәттәр төшөрөп алып килгәйне. Ғөмүмән, конкурс һәр кемгә үҙ һәләттәренән сығып, төрлөсә сығыш яһарға мөмкинлек бирә. Берәүҙәр сығыштарын башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында уйнап, йырлап тулыландыра, кемдер һүрәт төшөрә, компьютер графикаһын ҡуллана, ҡағыҙҙан макеттар, паннолар эшләгәндәр ҙә бар. Иң мөһиме, һәр уҡыусы башҡаларға тәьҫир итерлек итеп сығыш яһарға өйрәнеп килә. З. Биишева тураһында фекерләргә лә өйрәнәбеҙ, мәғлүмәтле лә булабыҙ, аудитория алдында сығыш яһарға ла күнегәбеҙ. Яҙыусының исемен йөрөткән белем усағында беренсе синыфтан алып уҡыйым, хәҙер тамамлап сығырға ла ваҡыт етте. Ошо йылдар эсендә бөтә предметтар буйынса ла яҡшы белем биргән, төрлө конкурстар, милли саралар ойошторған, Емеш кеүек маҡсатлы, тырыш, көслө рухлы һәм аҡыллы булырға өйрәткән уҡытыусыларыма рәхмәтлемен.

***Земфира Хантимерова, Ейәнсура районы Иҫәнғол Башҡорт гимназия-интернаты уҡыусыһы:*** Конкурс һөҙөмтәләре буйынса мин үҙ секциямда беренсе урын алдым. Беҙҙең гимназия-интернаттан тағы бер уҡыусы - Шамил Илкенбаев та бишенсе секция эшендә ҡатнашып, беренсе урын яуланы. Мин тикшеренеү эшен "Кешенең тормош ҡиммәттәре" темаһына бағышланым. Рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Лениза Ураҙова конкурста ҡатнашырға тәҡдим иткәс, "Яҡтыға" трилогияһын уҡып сығып, сығыш әҙерләнем һәм һүрәт менән панно эшләнем. Һүрәтемдә Емеш ҡояшҡа ынтылып тора. Ә ҡамырҙан яһаған паннола уны ҡараңғы, бәләкәй генә тәҙрәле өйҙә шәл бәйләп ултыра, тип сағылдырҙым. Әҫәрҙе анализлап, кешенең тормошонең төп ҡиммәттәре - ул һәр көндән ҡыуаныс таба белеү, мөхәббәт, эшһөйәрлек һәм рух көсө булыуын аңланым. Романдың һәр геройы ошо ҡиммәттәр аша тормошта үҙ юлын таба. Минең секцияла сығыш яһаған башҡа уҡыусылар ҙа бик төплө әҙерләнеп килгәйне, һәр кем үҙ һәләтен күрһәтте, бер ҡыҙ сығышын инглиз телендә һөйләне, һорауҙарға яуап бирҙе.

140-сы башҡорт гимназияһы бик ҙур, яҡты, синыф бүлмәләре йыһазландырылған, уҡыусылар белем алһын өсөн бөтә уңайлыҡтар бар. Әммә унда ҡалала үҫкән балалар уҡығанға күрәме, бөтәһе лә русса һаулыҡ һорашып, аралашып йөрөй. Быны күргәс, үҙем уҡыған Ейәнсура районы Иҫәнғол Башҡорт гимназия-интернаты өсөн ғорурлыҡ тойҙом. Беҙҙә бөтә балалар ҙа, уҡытыусыларыбыҙ ҙа башҡортса аралаша, бөтә саралар башҡорт телендә үтә.

***Ғәлиә Ҡотләхмәтова, Баймаҡ лицей-интернаты уҡыусыһы:*** Конкурсанттар менән осрашыуға бик күп билдәле шәхестәр килгәйне. Мин сығыш яһаған секцияла ун дүрт уҡыусы ҡатнашты, һәр кем "Яҡтыға" трилогияһы буйынса үҙенсәлекле проект эштәрен тәҡдим итте. "Зәйнәб Биишеваның "Кәмһетелгәндәр" һәм "Оло Эйек буйында" романдарында халыҡ ижады ынйылары" тигән тема һайлағайным. Презентацияла башҡорт халыҡ кейемдәре, йолалары, аш-һыуы буйынса мәғлүмәттәр килтерҙем. Әҫәрҙә сағылыш тапҡан халыҡ ижады өлгөләрен төрҙәренә ҡарап бүлеп, миҫалдар килтереп һөйләнем. Романдарҙа мәҡәл, әкиәт, уйын, йола, йыр, легенда, таҡмаҡ һәм башҡа халыҡ ижады өлгөләрен осратырға мөмкин. Уларҙың барыһын да яҙыусы бик урынлы итеп ҡуллана алған. Мәҫәлән, был ике китапта 56 мәҡәл бар. Һәр уҡыусы ошондай башҡалар белмәгән ҡыҙыҡлы фактар тураһында һөйләне конкурста, шуға ла жюри ағзаларына ла, үҙебеҙгә лә бик ҡыҙыҡлы булды. Зәйнәб Биишеваның ижадына бәләкәйҙән шулай ҡыҙыҡһыныу уятып, башҡорт әҙәбиәтенә иғтибар арттырып, был китаптар аша башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен күңелдәренә һеңдереп үҫтереүҙе маҡсат иткән ойоштороусыларҙың эше оло баһаға лайыҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Өлгө алырҙай, беҙҙе тәрбиәләрҙәй, яңы үрҙәргә ынтылыш бирерҙәй күренекле шәхестәребеҙ бик күп. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева нәҡ шундай, һәр быуын кешеһенә тормошо менән дә, ижады менән лә юғары өлгө күрһәтеүселәрҙең береһе. З. Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһында үткәрелгән конкурста ҡатнашыусы балаларҙың быға төшөнөүе ҡыуаныслы күренеш.**

Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Март (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 13 (14) дүшәмбе | 6:08 | 7:38 | 13:30 | 17:44 | 19:14 | 20:44 |
| 14 (15) шишәмбе | 6:05 | 7:35 | 13:30 | 17:46 | 19:16 | 20:46 |
| 15 (16) шаршамбы | 6:03 | 7:33 | 13:30 | 17:48 | 19:18 | 20:48 |
| 16 (17) кесе йома | 6:00 | 7:30 | 13:30 | 17:50 | 19:20 | 20:50 |
| 17 (18) йома | 5:58 | 7:28 | 13:30 | 17:52 | 19:22 | 20:52 |
| 18 (19) шәмбе | 5:55 | 7:25 | 13:30 | 17:54 | 19:24 | 20:54 |
| 19 (20) йәкшәмбе | 5:53 | 7:23 | 13:30 | 17:56 | 19:26 | 20:56 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**11 март "Мулла"** (Т. Миннуллин), драматик хикәйә 12+
**12 март "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+
**14 март "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл 12+
**17 март "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14 март "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миннуллин), музыкаль комедия 12+
**17 март "Ҡыҙ урлау йәки башкирская пленница"** (М. Кәрим), музыкаль комедия 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**11 март "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев). Башлана 19.00 0+
**12 март "Маленький гном"** (И. Әлмөхәмәтов). Башлана 12.00, 14.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**11 март "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия 12+
**15 март "Йырлай-йырлай тыуған яҡҡа ҡайтам"** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Ғәзинур Хужахмәтовтың концерты 6+
**16 март "Ә таңдар бында тыныс"** (Б. Васильев), драма 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**16 март "№13"** (Р. Куни), комедия 16+

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## "ДЖУТ" - МӘСКӘҮҘӘ

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының "Джут" спектакле "Битлек плюс" программаһы сиктәрендә Мәскәүҙә күрһәтелде. Башҡорт театры актерҙары был программала беренсе тапҡыр ҡатнаша.**

Режиссер Айрат Абушахмановтың был спектаклен "Алтын Битлек" фестивале генераль директоры Мария Ревякина, пьесаның авторы - Мәскәүҙә йәшәгән ҡаҙаҡ драматургы Олжас Жанайдаров та ҡараны. Башҡортостан театр эшмәкәрҙәре берлеге рәйесе урынбаҫары Хәрмәтулла Үтәшев әйтеүенсә, зал тулы булған һәм тамашасылар спектакль тамамланғас та актерҙарҙы сәхнәнән оҙаҡ ебәрмәгән. Һуңынан театр тәнҡитселәре ҡатнашлығында һөйләшеү ойошторолған.

## БАЛАЛАР БАЛЕТЫ

**Р. Нуриев исемендәге Башҡорт хореография колледжында белем алыусылар "Ҡар батшабикәһе" балалар балетын сәхнәләштерәсәк. 1,8 млн һумлыҡ был проект Башҡортостан Башлығы грантына тормошҡа ашырыласаҡ. Премьера Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры сәхнәһендә ноябрь айында үтәсәк.**

"Был Григ музыкаһына ике актлы спектакль һәм унда яҡынса 70 кеше, шул иҫәптән әҙерлек бүлеге тәрбиәселәре лә ҡатнашасаҡ", - ти колледж директоры Олия Вилданова. Спектаклдең ҡуйыусы балетмейстеры - Римский-Корсаков исемендәге Санкт-Петербург консерваторияһы профессоры Александр Полубенцев. Хореограф ошо көндәрҙә Өфөгә килергә тейеш.

МАТУР ХӘТИРӘ

**Халҡыбыҙ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 85 йыл тулыуы республикабыҙ, илебеҙ, улай ғына ла түгел, донъя кимәлендә киң билдәләнде. Бигерәк тә интернетта уның шиғырҙарын ятҡа һөйләү буйынса конкурс географик киңлеге менән айырылып торҙо. Шағир исеменә бәйле һәр бер хәтирә беҙҙең өсөн үтә лә мөһим. Бына, мәҫәлән, мин дә ун биш йыл элек Өфө урамында Рәми Ғариповтың тәрбиә мәктәбенә бәйле шундай бер ваҡиғаның шаһиты булғайным.**



# АЗАМАТТЫҢ ҺОҠЛАНДЫРҒАНЫ,

## Гөлнараның башҡортса төш күргәне...

Октябрҙең 50 йыллығы менән Минһажев урамдары киҫелешендә, "Өфө уттары" ҡаршыһындағы трамвай туҡталышында булды ул ваҡиға. Мин "Йәштәр һарайы" (ул ваҡытта "Юбилейный") артындағы парк янындағы тротуар буйлап Матбуғат йортона табан йүнәлеп, үткәлдәге светофорҙың ҡыҙыл утына туҡталып ҡалғайным. "Үҙәк баҙар" һәм "Көньяҡ автовокзал" яғынан килгән автомобилдәрҙең үтә күп булыуы һөҙөмтәһендә ике урам киҫелешендә мәхшәр ҡупҡан, тығын барлыҡҡа килгән. Хәл-күренеште күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ. Бындай саҡта "текә" машиналарға атланған "тәкәләр" туҡтауһыҙ сигналға баҫып, алдында тороусыларҙы ашыҡтыра, тәрлә урындарға, ярыҡтарға ҡыҫылып, хәрәкәттең ҡаршы йүнәлешенә барып булһа ла, тығын барлыҡҡа килгән урындан китергә тырыша...

Бында ла табылды бер "тәкә". Ул ҡайһылыр арала дөйөм хәрәкәт ағымынан айырылып сығып, трамвай көтөүсе утыҙлаған кешенең өҫтөнә килә башланы. Кешеләр тырым-тырағай һибелде, кемеһеләр албырғап ҡатып ҡалды. Шул саҡ тәртипте боҙоусыға ҡаршы бер егеттең барып баҫыуы машинаны туҡталып ҡалырға мәжбүр итте. Бар урында ла оятһыҙлығы һәм һөмһөҙлөгә ярҙамында еңеп өйрәнгән "тәкә"гә егеттең был ҡыйыулығы оҡшап етмәне, күрәһең, ул ҡорос атының ишеген асыҡ ҡалдырып, юлына сығыусы егеткә ҡаршы баҫты. Егет уға киҙәнергә, башҡа төрлө зыян итергә мөмкинлек бирмәне. Иҙеүенән эләктереп алып, нығ итеп бер-ике таптыр һелкетеп алғайны, "тәкә" уның ҡоростай ҡаты ҡулдарын тойоп, шундуҡ шинеп ҡалды, ҡаршыһына сығыусынан ҡараштарын айырмайынса, артҡа сигенде һәм машинаһына ултырып, артҡа табан хәрәкәт итеп, тайыу яғын ҡараны...

Былар барыһы ла ярты минут самаһы эсендә булып үтте. Уңарсы светофорҙың йәшел уттары янды, һаман да һерлегелән торған машиналар араһынан ҡаршы яҡҡа сығып барғанда теге егет минең яҡҡа йөҙө менән боролғайны. Бәй, Рәми Ғариповтың улы Азамат бит был! Башҡорт дәүләт педагогия институтында уҡығанда танышҡайныҡ. Уға ҡаршы киттем, уңарсы трамвай килеп туҡтап, ул "электр арбаһы"на ултырып өлгөргәйне...

Ошо бәләкәй генә ваҡиғала Рәми ағайҙың улы Азаматҡа биргән ирәзаматлыҡ тәрбиәһе һөҙөмтәһе ярылып ята ине. Халыҡ шағирының "Көндәлектәр"ендәге 1972 йылдың 12 июнендәге яҙмаһына иғтибар итәйек: *"Азаматты лагерға оҙаттым. Шул тиклем бараһы килмәй. Өйҙәге ирек уға бөтәһенән дә ҡиммәт. Һуңғы рәттәренән, яратҡан китаптарынан, күрше малайҙарынан айырылып китеү уға донъянан айырылып китеү менән бер кеүек. Өйҙән сыҡҡанда "Грек мифтары"н рюкзагына һалып алды. Инде нисәнсе ҡат уҡый шул мифтарҙы, яҡкмай. Минең хатта күңел тулып китте..."*

Азамат ғаиләһенән айырылып, оҙайлы ваҡытҡа лагерға киткәндә юҡҡа ғына рюкзагына "Грек мифтары"н һалып алмаған икән. Трамвай туҡталышындағы ваҡиғала ул, ысынлап та, шул грек мифтарының батырҙарына оҡшағайны...

"Тубырсыҡ" шиғырында халыҡ шағиры улы Азаматҡа шундай өмөттәр бағлаған:

*Күпме көстә һалыр кәрәк әле,*
*Һиңә кеше булыр өсөн дә.*
*Киләсәктә шаулар ҡарағай бит*
*Ята шул тубырсыҡ эсендә!..*

Азамат һөмһөҙлөккә һәм оятһыҙлыҡҡа ҡаршы ҡарағайҙай сығып баҫты һәм атаһының үҙенә арналған шиғырындағы өмөттәрен тулыһынса аҡланы. Азамат менән ҡул биреп иҫәнләшеүселәр һиҙә торғандыр: ҡорос ҡыҫһыуыр кеүек уның ҡулдары. Әйткәндәй, Рәми ағай ҙа шундайын физик көскә эйә булған. Ә инде рух көсө хаҡында әйтеп торорға ла түгел.

Йәки булмаһа, шағир "Көндәлектәр"енең 1974 йылдың 30 апрелендәге яҙма:

*"Үҙ балаларымдың башҡортса төш күреүе лә миңә оло бер бәхет...*

*Күҙгә йәштәр тула хатта. Ун туғыҙ йыллыҡ тырышлығым бушҡа китмәгән, тим. Быны әйтеүе генә анһат. Ә бит был ун туғыҙ йыл нисә көндән тора!.. Иртән - май. Гөлнар ҡыҙым төш күрә..."*

Бында ла халыҡ шағирының үҙ балаларына бирелгән рухи тәрбиә емештәре төҫмөрләнә...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ВИКТОРИНА

## ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР

**Был юлы йәш шағир Алмас Шаммасовтың ижады һәм "Өй түбәмдә күгәрсендәр" йыйынтығы буйынса һорауҙар тәҡдим итәбеҙ.**

**1. Алмас Шамммасовтың беренсе китабының исеме нисек атала?**
а) "Әсәйем ғүмер бүләк иткән";
б) "Әсәйем ҡулдары";
в) "Әсәй минә ғүмер асҡан".

**2. "Өй түбәмдә күгәрсендәр" китабына ниндәй поэма ингән?**
а) "Замандаш трагедияһы";
б) "Замандаш";
в)."Өй түбәмдә күгәрсендәр".

**3. Ошо уҡ поэманың төп геройының исеме нисек?**
а) Хәйрулла;
б) Вилдан;
в) Маша.

Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем беҙгә 246-03-24 номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйтә, шул уҡыусыбыҙға Алмас Шаммасов үҙенең автографы ҡуйылған "Өй түбәмдә күгәрсендәр" китабын бүләк итмәксе. Үткән уйын йомғаҡтары буйынса Гөлсирә Ғиззәтуллина-Ғайсарованың автографы ҡуйылған "Йәннәт баҡсаһында" китабын Өфө ҡалаһынан Лилиә Зәйнуллина отто! Йәгеҙ, кем алыҡ?

**Викторинаны Иҙел РӘХИМОВ алып бара.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хикмәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИКЕ ЙӨҘЛӨЛӨК КЕНӘ...

## ярлыҡанмай торған гонаһ

Асыу - дошман, аҡыл - дуҫ, асыуыңа аҡыл ҡуш.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мөхәббәт бәләкәй генә шатлыҡҡа ла ҡыуана, ләкин күпте талап итә.

**(Клайв Льюис).**

Ҡатындарыбыҙ беҙҙе башҡа ҡатын-ҡыҙ менән һөйләшкәндә генә иғтибарлап тыңлай.

**(Анри Торе).**

Зауығы етешмәгән ҡатын-ҡыҙ модаға эйәрә, тәрбиәһе етешмәгән ҡатын-ҡыҙ этикет көҫәй.

**(Мария, Румыния батшабикәһе).**

Хоҙай Тәғәлә бер үк ваҡытта бар ергә лә өлгөрә алмай, шуға ла Ул әсәләрҙе яратҡан.

**(Элизабет Стоун).**

Әгәр балаһы сит кешеләр алдында алдашһа - әсә ҡыҙарына, әгәр балаһы сит кешеләр алдында дөрөҫтө әйтһә... әсә ер тишегенә инерҙәй була.

**(Элизабет Клингер).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер хаким аҡыл эйәһе Баһаутдин Нәҡшбәндиә эргәһенә килә һәм уның уҡыусыларының дәрес мәлендә нисек һәм ҡайҙа урын алыуын күҙәтә. Һуңынан хаким Нәҡшбәндиәнән һорай:**

**- О, Мәңгелек остазы! Мин һинең уҡыусыларыңдың дәрес ваҡытында минең һарайымда хеҙмәт итеүселәр кеүек үк, ярым түңәрәк яһап ултырышыуҙарын шәйләнем. Бында ниндәйҙер ишара бармы?**

**- О, Донъяны буйһондороусы! Һинең хеҙмәтселәреңдең ҡайҙа һәм нисек урынлашыуын һөйләп бирһәң, мин дә шәкерттәремдең урынлашыу тәртибен аңлатып бирермен, - ти Нәҡшбәндиә.**

**- Беренсе түңәрәктә мин ныҡ ышанғандар ултыра, шуға ла улар миңә барыһынан да яҡыныраҡ урынлаша. Урта таңғәлдә минең батшалыҡтың иң мөһим һәм ҡеүәтле кешеләре урын ала. Иң һуңғы рәттә иһә әһәмиәтһеҙерәк, бәләкәйерәк кешеләр урынлаша, - ти хаким.**

**- Улай булғас, беҙ кешеләрҙе төрлөсә бүләбеҙ булып сыға, - ти Нәҡшбәндиә. - Миңә яҡыныраҡ ултырғандар - улар һаңғырау, яҡында ултырғас, улар ишетә ала. Урта тирәләге кешеләр - наҙандар, былай урынлашып, улар Уҡыуға дикҡәт итә ала. Иң артҡы рәттә иң Аңлы уҡыусылары ултыра, уларға миңә яҡын ултырыу мөһим түгел..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирҙәр:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 10 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 469/03